ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

20-26 июль (майай) 2019

№29 (863)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ерҙә йәшәгәндә…

бәхетлелек күгенә ашырыбыҙҙы онотмайыҡ 3



Өфөнөң хәҙер…



1500 илсеһе бар! 5

Бәкәтин вариҫының әйткәне



6

Парижға барып…



Шүлгәнташ мәмерйәһен күрһәттек 8-9

ТВ-программа 14

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!**
**Таныштарығыҙ, дуҫтарығыҙ араһында 2019 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, беҙҙең сәләмде тапшырығыҙ, зинһар: 17 августҡа тиклем яҙылып өлгөрһәләр, гәзитте сентябрҙән алдыра башлаясаҡтар. Индекстар үҙгәреүен дә белеп ҡуйығыҙ: ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә ҡалған 4 ай өсөн 416 һумға яҙыла алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Тормошобоҙҙағы инабатһыҙлыҡ, мәҙәниәтһеҙлек күренештәренә ҡарашығыҙ нисек?

*Сәфәрғәли ЙӘНТҮРИН, биология фәндәре докторы, БДУ-ның Сибай институты профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:* Был һорауығыҙ студент саҡтарҙа республикабыҙ ауылдары буйлап экспедицияла йөрөгән саҡтағы бер хәлде иҫкә төшөрҙө. Әйткәндәй, "инабат, инабатһыҙлыҡ" тигән һүҙҙәр бөгөн бик йыш ҡулланылмай; телмәребеҙҙән ул, күрәһең, әҙәби лексикаға күсеп киткән. Ә бына элегерәк ул ябай һөйләш телмәрендә, айырыуса ауыл ағинәйҙәре телендә йыш ишетелә торғайны. Әлеге шул экспедицияла йөрөйбөҙ. Әбйәлил районының Ахай (әлеге Ишбулды) ауылында бер йортҡа инеп, һөт, ҡатыҡ алдыҡ та хужабикәгә аҡса һонабыҙ. Шул саҡ апайыбыҙҙың йөҙө үҙгәреп китте: "Абау, инабатһыҙҙар, хәләл малымдың ағы өсөн хаҡ алып торорға ни... Кәрәкмәй!" Беҙ килешмәгән ҡылығыбыҙҙан уңайһыҙланып, рәхмәттәр әйтеп сығып киттек. Инабатһыҙ, тимәк, әҙәпһеҙ, әхлаҡһыҙ тигәнде аңлата булыр. Тормош үҙгәрә бара нормалар ҙа үҙгәреп китә икән. Бөгөнгө көндә бик күп уңған хужабикәләр баҙарға алып барып, оло юлдарға ла сығып, һыйыр көтмәгән ауылдаштарына ла әлеге шул "аҡ"ты - хәләл малы биргән ризыҡты һатып, иш янына ҡуш таба һәм был бер кем өсөн дә әҙәпһеҙлек булып тойолмай, сөнки улар үҙҙәре аҫраған малының "дәүләте"н һатып, йәғни үҙ көсөн, үҙ тирен түгеп тапҡан әмәл менән көн күрергә мәжбүр. Тимәк, ҡасандыр "инабатһыҙлыҡ" булып тойолған ғәмәл бөгөн килеп нормаға әүерелде. Минеңсә, был бөгөнгө беҙҙең әхлаҡ принциптарын ҡылыҡһырлаусы ҡыҙыҡлы бер күҙәтеү, шулай бит? Шул уҡ ваҡытта заманыбыҙ тыуҙырған бик күп инабатһыҙлыҡ күренештәренән йән әрней. Айырыуса алдашыу, урлау, кеше хаҡын "ашау" кеүек факттарҙы инабатһыҙлыҡ төшөнсәһенә генә һыйҙырып буламы икән әле! Баяғы бер фекеремә ялғап, шуны әйтмәксемен: "инабат" һүҙенең онотола барыуы кешеләрҙә намыҫ төшөнсәһенең юғала барыуына ла бәйле түгелме икән ул? Бөтә кешене лә бер ҡалыпҡа һалыуҙан алыҫмын, әммә арабыҙҙа намыҫты аҡсаға алыштырған әҙәмдәрҙе ғибрәт итеп, бөгөнгө тормошобоҙ күренештәренән сығып, "намыҫһыҙ, инабатһыҙ" һүҙҙәренең кемдәргә нығыраҡ ҡағыла икәнен үҙегеҙ ҙә шәйләй торғанһығыҙҙыр...

(Дауамы 2-се биттә).

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ОЯТҠА ҠАЛМАЙЫҠ...

## ситтән килгәндәр алдында



**"Киске Өфө" гәзитенең һәр һанында тиерлек ошо рубрика менән донъя күреп торған мәҡәләләрҙе уҡып барам: эшлекле фекерҙәр ҙә, ҡайһы бер проблемалар хаҡында тәнҡит һүҙҙәре лә була. Гәзиттең даими уҡыусыһы булараҡ, мине бер һорау борсой: ана шундай эшлекле фекерҙәр һәм тәнҡит һүҙҙәре ҡала властары иғтибарына барып етәме икән?**

Ни генә тиһәң дә, гәзит уҡыусы хаттары - ул асылда йәмғәтселек фекерен сағылдыра бит. Элегерәк гәзиттә баҫылып сыҡҡан аныҡ фекерҙәр-тәҡдимдәр, шулай уҡ тәнҡит материалдары ошо матбуғат баҫмаһының ойоштороусылары иғтибарына еткерелеп торор ине. Хәҙер электрон бәйләнеш заманында был эштең бер ауырлығы ла юҡ. Элек кенә ул махсус бланк тултырып, уны иҫәп журналына теркәп, конвертҡа һалып, почта аша ебәреп ултыра ине махсус хеҙмәткәр. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, тигәндәй, мин дә баш ҡалабыҙ тормошона ҡағылышлы бер мәсьәлә хаҡында һеҙгә яҙып ебәрергә булдым.

Үҙегеҙгә лә күптән мәғлүм булыуынса, Матбуғат йорто эргәһенә хәтәр шәп ҡунаҡхана төҙөп ҡуйғайнылар бит. Унда күберәк сит илдәрҙән килгән кешеләр генә урынлаша, сөнки бындағы хаҡтар ябай кешеләр өсөн түгел. Ошо ҡунаҡхана эргәһендә электән эшләп торған "Матрица" магазины бар ине, хәҙер ул ябылды һәм, уның бинаһы байтаҡ ваҡыт буш торғандан һуң, урынына "Светофор"тип аталған магазин-склад асылды. Ул ябай һатып алыусылар өсөн бик уңайлы һәм нигеҙҙә улар өсөн тәғәйенләнгән дә: хаҡтар арзан, ассортимент төрләндереп торола. Тик бындай склад-магазиндың сит ил ҡунаҡтары ял итә торған ҡиммәтле отель янында тороуы ғына һис тә урынлы түгел.

(Дауамы 3-сө биттә).

12+

**✓ Шуға күрә машина йөрөтөүгә таныҡлыҡ биреү процедураһында психологтар ҙа ҡатнашырға, буласаҡ водителдәрҙең холоҡ-фиғелен махсус тестар ярҙамында өйрәнергә тейештәр, тигән фекерҙәмен.**



БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# УРЛАШЫУ - ГОНАҺ

**Интернет селтәрҙәрендә Луиза Хәйруллинаны яҡлап ҡырталаша халыҡ. Йәнәһе, ябай кеше банктыҡын урлаған. Йәнәһе, банктарға булған үстәре ҡанып ҡалған. Хатта Луизаға ярҙамға тип аҡса йыйырға тотонғандар икән. Был тәңгәлдә, аңлауымса, һәр беребеҙҙә йәшәгән "байҙарҙан тартып алып, ярлыларға таратып бирә торған " герой уянып китә. Хөкүмәткә, ҙур проценттар түләткән банктарға һәм шуларға бәйле тормош ауырлыктарына, уңышһыҙлыктарға булған асыу йырып сығып, әлеге хәлдә бер тантана итеп күтәреп ҡуя. Тик был хата. Бик тәрән хата. Иң төптән алып фекер йөртәйек әле.**

Иң башта, урлашыу - гонаһ. Намыҫлы кеше үтә ярлы булғанда ла хәләл ризыҡҡа һәм тапҡанына таянып йәшәй. Был күҙ буяу ҙа, кеше алдында йөҙ һаҡлау ҙа түгел, ә үҙеңдең асылыңа тоғро булыу. Аҡылы булғандар бөтәһе өсөн түгел, ә үҙе өсөн яуап бирә. Банктыҡы булһынмы ул, тотош илдекеме, йәки күршеңдекеме - урлама. Урлашыу борон-борондан ҙур гонаһ һаналып, уның өсөн ҡаты яза бирелгән. Мәҫәлән, беҙҙә ат ҡарағы булыу иң мәсхәрә хәл иҫәпләнгән, был ҡара исем балаларынан балаларына күсеп, оятсылыҡ килтергән. Сөнки ат бөгөнгө аҡса ҡиммәтендәге юғары баһалы мал иҫәпләнгән. Халыҡта, дөйә урлаған да бур, төймә урлаған да бур, тип әйтелә бит.

Ә бөгөн беҙ бурҙарҙы яҡлашып, балаларға, йәштәргә ниндәй үрнәк күрһәтәбеҙ? Шулай мөмкин, икенсерәк юлдар менән тотолмаҫҡа ла була, байҙыҡын урларға, йәһәт кенә байырға була, тигән ҡотко төшә бит улар күңеленә. Минеңсә, был тәңгәлдә өҙә һуғырға кәрәк: урлама - гонаһ!

# СИТТӘР АҠСА ЭШЛӘЙ...

**Республика буйлап шаулап-гөрләп һабантуйҙар, йыйындар үтте. Байрам булғас, әлбиттә, ашау-эсеүһеҙ ҙә булмай. Һәм кем ашатты тип уйлайһығыҙ беҙҙе? Үзбәктәр, тажиктар инде. Эйе-эйе, башҡорт байрам итте, ә ситтән кәсеп артынан килгәндәр аҡса эшләне. Байрам урынына кистән барып ятып, һарыҡ һуйҙы, ҡара таҡтан тороп, оло ҡаҙандарын аҫты һәм көнө буйы күңел асыусыларҙы былау, һурпа, шешлек менән тәьмин итте.**

Ысынында, һабантуйҙарҙа башҡа төрлө туйыныр урындар ҙа булмай инде ул. Тирмәләргә, мәҫәлән, ситтәр яҡын килә алмай, унда үҙҙәренеке генә тамаҡ ялғай. Икенсенән, улар сауҙа итергә килмәй, ә башҡорт аш-һыуын күргәҙмә өсөн генә алып килә. Үҙебеҙҙең шәхси эшҡыуарҙар тундырма, һут һәм тәм-том, ҡайһы саҡта ҡымыҙ, буҙа ғына алып килә. Әммә ундай ризыҡтар менән тамаҡ туймай, әлбиттә. Байрам кәйефе аппетитты ла күтәрә бит. Һәм, ирекһеҙҙән, шул ситтәр бешергән былау өсөн һыу буйы сиратҡа барып баҫаһың инде.

Ни өсөн беҙҙекеләр ошо уҡ аштарҙы бешереп һатып тора алмайҙыр был сараларҙа, аңламаҫһың. Ҡаҙан юҡмы беҙҙә, әллә елкәме?

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Тормошобоҙҙағы инабатһыҙлыҡ, мәҙәниәтһеҙлек күренештәренә ҡарашығыҙ нисек?

(Башы 1-се биттә).

***Булат ҒӘЛИЕВ, водитель:*** Тормошобоҙҙағы инабатһыҙлыҡ күренештәре ҡайһы бер кешеләрҙең тәрбиәлелек кимәлен, мәҙәнилеген күрһәтеп тороусы бер сифат. Мәҙәни кимәле юғары кеше, ул кем генә һәм ҡайҙа ғына булмаһын: йәмәғәт урындарындамы, урамдамы, эштәме, өйҙәме - инабатһыҙ ҡылыҡтарға юл ҡуймаясаҡ. Урамда, тигәндән, тап бына ошонда аҙым һайын тиерлек инабатһыҙлыҡ күренештәренә тап булырға тура килә. Ҡала урамдарында был бөгөн айырыуса водителдәрҙең үҙ-ара һәм йәйәүлеләргә ҡарата мөнәсәбәтендә йыш күренә. Тыйылған билдәләрҙе һанға һуҡмау, бер-береңә юл бирергә теләмәү, минминлелек, үҙ мәнфәғәтеңдә генә ҡайғыртыу кеүек инабатһыҙ ҡылыҡтарҙы юл ҡағиҙәләре ғәфү итмәй. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров юҡҡа ғына ҡуҙғатманы был теманы. Республикала автомобилдә хәүефһеҙ йөрөү мәҙәниәте булдырыу фарыҙ, тигән тәкдим индергәйне ул яныраҡ ҡына Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә. Әгәр мәсьәлә юғары кимәлдә ошондай борсолоу тыуҙыра икән, тимәк, юл-транспорт аварияһары түҙеп торғоһоҙ кимәлгә еткән. Светофорҙар, иҫкәртеүсе билдәләр, видеокамералар ҙа туҡтата алмай юғары тиҙлек яратыусы ҡайһы бер тәрбиәһеҙҙәрҙе. Шул арҡала типтигеҙ юлдарҙа ла ҡот осҡос фажиғәләргә дусар була бер ғәйепһеҙ пассажирҙар. Мин 14 июлдә Архангел районы биләмәһендә түңкәрелеп, 6 кешенең үлеменә сәбәпсе булған аварияны күҙҙә тотам. Был автобус водителе күптән инде руль артында түгел, ә төрмәлә ултырырға тейеш булғандыр, бәлки, сөнки ошо аварияға тиклем ул тиҙлек режимын даими боҙғаны өсөн 18 тапҡыр административ язаға тарттырылған булған. Тимәк, был кешенең күп тапҡырҙар иҫкәртеүҙәрҙе һанға һуҡмауы, үҙе өсөн һығымта яһамауы, мин-минлеге һәм һаман да намыҫһыҙ рәүештә водитель сифатында йөрөп ятыуы арҡаһында пассажирҙар яҡты донъя менән хушлаша. Был фажиғә әлеге водителдең генә түгел, бәлки уның таныҡлыгын күптән тартып алырға тейешле дәүләт инспекцияны хеҙмәткәрҙәренең дә намыҫында. Юл йөрөү мәҙәниәтенә эйә булыу мәсьәләһе бик урынлы күтәрелә, ләкин шуны ла оноторға ярамай: автомобиль йөрөтөү мәҙәнилеге иң тәүҙә руль артындағының шәхси сифаттарына, йәғни инабатлылығына, үҙ-үҙен контролләй һәм тота алыуына нығ бәйле. Шуға күрә машина йөрөтөүгә таныҡлыҡ биреү процедураһында психологтар ҙа ҡатнашырға, буласаҡ водителдәрҙең холоҡ-фиғелен махсус тестар ярҙамында өйрәнергә тейештәр, тигән фекерҙәмен.

***Фәрзәнә ИШКИЛДИНА, хеҙмәт ветераны:*** Бала саҡтан хәтергә һеңеп ҡалған: элек берәй ярамаған эш ҡылһаң, инәйҙәр: "Кит, инабатһыҙланып йөрөмә!" - тип ороша инеләр. Бала аҡылына аңлашылмағанлыраҡ ят һүҙ тойолһа ла, ниндәй ҡылыҡты хупламай әйтелеүен белгәс, башҡаса бындай әҙәпһеҙлекте ҡабатламаҫҡа тырышаһың инде. Элек бит ауыл әбейҙәре һәм ҡарттары, кем балаһы булыуына ҡарамаҫтан, балаларҙы бергәләп тәрбиәләне, тәүге әҙәп һабаҡтарын беҙ уларҙан алдыҡ. Бөгөн ауылдарыбыҙҙа йәшәйме ана шул яҡшы ғәҙәт, әллә улар шул боронғо ағинәй һәм аҡһаҡалдар менән бергә китеп юғалдымы? Һәр хәлдә, яҡшы ғәҙәт, инабатлыҡ һабаҡтары һәр ғаиләнең иман шарты булырға тейеш тә бит... Тик бына ҡайҙан барлыҡҡа килә ул тәртипһеҙ, тыңлауһыҙ балалар, унан ары - һуғыш суҡмарҙары, урлашыуҙар, алдашыуҙар, һүҙе һайын әшәке һүгенеүселәр? Бер генә ата-әсә лә балаһын насарлыҡҡа өйрәтеп ултырмайҙыр бит, тик барыбер инабатһыҙлыҡ күренештәре тормошобоҙҙа аҙым һайын осрай. Шул уҡ ваҡытта ул бөгөн транспортта өлкәндәргә урын бирмәү кеүек классик миҫалдан күпкә "алға" китте, шуны шөйләйһегеҙме, йәмәғәт? Шул уҡ юғары мәҙәнилек идеяһын алға һөрөүсе театрға, концерт залдарына ла килеп инде, йыш ҡына трибунаға лә менеп китә ул инабатһыҙлыҡ тигән ғәҙәт. Кемдер, мәҫәлән, Чайковский концертын тыңларға килә лә йә йоҡомһорап китә, йә шоколад ҡағыҙын шыптырҙатып, тамаҡ ялғай, йә күршеһе менән ҡыҫҡырып һөйләшеп ултыра... Бәғзе берәүҙәр йыйылышта һүҙ һорап ала ла, кәрәген генә әйтеп төшөп китеү урынына, һүҙен тамамлай алмайынса, тыңлаусыны яфалай... Бындай күренештәр күберәк үҙ урынын, самаһын шәйләмәгән, әҙәп-әхлаҡ нормаларын бар тип тә белмәгән кешеләр менән килеп сығыусан. Ундайҙарға, ысынлап та, бала сағында ғаиләлә әҙәп һабаҡтары бирелмәгән, уларға әкиәт һөйләүсе лә, ҡыҫҡырып китап уҡыусы ла булмағандыр, күрәһең, тип йәлләп тә кителә. Халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадынан ғына ла күпме һабаҡ алырға була белеклe кеше өсөн! Өләсәй, әсәйҙәребеҙ телмәрен генә алып ҡарайыҡ: улар бит һөйләме һайын әйтем дә мәҡәл менән генә һөйләшер ине. Был ҡанатлы һүҙбәйләнештәр, ишараларҙың мәғәнәһенә төшөнөргә тырышып, күпме уйланып йөрөйһөң әле! Ана шундай уй һалыу етмәй бала башына бөгөнгө ғаиләләрҙә. Уйҙың урынын гаджеттар алмаштырҙы. Ә бит уй уйлаған кеше насар әҙәм, инабатһыҙ булып үҫмәйәсәк, иманым камил.



**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Өфөгә килгән Таиланд Короллеге Ғәли йәнәптәре Мом Луанг Раджадарасри Джаянкура етәкләгән эшлекле даирәләр делегацияһы менән осрашты һәм ҡунаҡтарҙың нефть-газ, инфраструктура объекттары төҙөлөшө, ҡала хужалығын һәм мәғарифты һанлаштырыу өлкәһендәге проекттар менән таныштыҡ, республика менән Таиланд араһында тауар әйләнешенең 2018 йылда өс тапҡырға - 7,4 миллион долларға тиклем артыуын, әммә уны артабан үҫтереү кәрәклеген билдәләне.

✓Башҡортостан етәксеһе Нефтекаманың ҡайһы бер күп фатирлы йорттары подъездарында ремонт барышы менән ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе. Мәҫәлән, Социалистик урамының 61-се йортонда подъездарҙа бер нәмә лә эшләнмәгән, бар ерҙә лә сымдар, кабелдәр сығып тора. Шул уҡ мәлдә һәр подъезд ремонтлауға 320 мең һум аҡса бүленгән. Радий Хәбиров етешһеҙлекте төҙәтергә һәм подъездарҙы ремонтлауҙы республика программаһы талаптары буйынса эшләргә бойороҡ бирҙе.

✓Башҡортостан Башлығы Хакимиәтенең Иҗтимағи-сәйәси үҫеш идараһығы начальнигы итеп Азат Баҙранов тәғәйенләнде. Был туралағы указға Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы. Радий Фәрит улының икенсе бойорого менән Урал Килсенбаев БР Башлығы Хакимиәтенең Иҗтимағи-сәйәси үҫеш идараһығы начальнигы вазифаһынан бушатылды һәм БР Башлығы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләнде.

✓2013 йылдың октябрендә ябылған Нефтекама мәктәп-интернаты базаһында татар полилингвистик мәктәп-интернаты асыласаҡ. Полилингвистик мәктәп-интернат республиканың төньяҡ-көнсығыш төбәге өсөн лингвистик белем биреүгә терәк майҙансығы буласаҡ. Радий Хәбиров Нефтекамала булғанда ошо турала белдерҙе һәм төҙөлөштө тамамлау һәм яңы мәктәптә асыу ваҡытын 2021 йылдың 1 сентябренә билдәләне.

✓Төбәк Тәфтиш идараһығы, республиканың Архангел районында үҙе идара иткән автобусты түңкәргән 32 йәшлек Татарстан кешеһе ҡулға алынды, тип хәбәр итә. Ул юл хәрәкәте һәм транспорт саралары ҡулланыу ҡағиҙәләрен боҙоуҙа һәм шуның менән ике йәки унан күберәк кешеләрҙең үлеменә ғәйепләнә. Бығаса тиклем ул тиҙлек режимын арттырған өсөн 18 тапҡыр административ яуаплылыҡҡа тарттырылған булған.

УЙЛЫҒА - УЙ

**Беҙ йәш саҡтарыбыҙҙан күреп белгән, аралашҡан, йәиһә ҡылған ғәмәлдәре, ҡаҙаныштары менән һоҡланған күренекле замандаштарыбыҙ, киң билдәле милләттәштәребеҙ бер-бер артлы фани донъябыҙҙы ҡалдырып, йыш ҡына хәсрәтле уйҙарға батырып, арабыҙҙан китеп тора. Беребеҙ ҙә ергә мәңгелеккә килмәгәнбеҙ шул. Тормошобоҙ шулай ҡоролған - дини байрам көндәрендә, изге рамаҙан айында, яҡындарыбыҙ йәиһә таныштарыбыҙ яҡты донъянан киткән ваҡытта ошо хаҡта ла уйланмай ҡалмайбыҙ, әлбиттә. Тик донъя мәшәҡәттәре артынан ҡыуып, башлыса, ҡараштарыбыҙҙы юғарыраҡҡа, рухи бейеклектәр тарафына күсерергә ашығып бармайбыҙ. Ерҙә йәшәп, Мәңгелек Күк барын онотобораҡ та китәбеҙ.**



# ЕРҘӘ ЙӘШӘГӘНДӘ...

## баҡыйлыҡ күгенә ашырыбыҙҙы онотмайыҡ

Ислам тәғлимәтен ҡабул иткәнгә тиклемгә дәүерҙәрҙә ата-бабаларыбыҙ бөйөк Күк Илаһы - Тәңрегә табынған. Боронғо кешеләр - тәбиғәт балалары, башҡорттар ҙа үҙҙәрен мәңгелек тәбиғәттән айырып ҡарамаған. Тәңре лә, улар үҙҙәре йәшәгән матди донъянан айырылып тороп, икһеҙ-сикһеҙ күк төпкөлдәренән барса йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт есемдәре менән идара итеүсе рухи зат рәүешендә күҙалланған. Башҡорт тәңреселеген мәжүсилек менән бутарға ярамай, сөнки башҡорттарҙың беҙгә билдәле булған башҡа илаһтары юҡ. Ошо уңайҙан Ибн Фаҙландың башҡорттарҙың 12 илаһы бар, тип яҙыуын уның, башҡорт телен белмәгәнлектән, тәржемәсе аша ишеткәнде яңылыш яҙып алыуы менән генә аңлатып булалыр. Ысынбарлыҡта башҡорттарҙың ҡыш, йәй, ел, ямғыр һ.б. шундай илаһтары һис ҡасан булмаған: бында һүҙ ер йөҙөндәге әйбер-күренештәрҙең хужалары - эйәләре тураһында бара. Һыу эйәһе, урман эйәһе, өй эйәһе кеүек мистик заттар халыҡ фольклорында ла сағылыш тапҡан, әммә улар бер ҡасан да илаһҡа тиңләнмәгән. Тимәк, Исламға тиклем дә халҡыбыҙ тик берҙән-бер илаһҡа табынған, тәңреселек ул замандағы йәшәйештең ғәҙәти инаныстарына ҡуша килеп, айырым бер системалы тәғлимәте булмаған дини ҡарашты тәшкил иткән. Тап шуның өсөн дә Ислам башҡорт мөхитенә тиҙ арала, бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ үтеп инә алған. Милләттәштәребеҙҙең күпселеге үҙ тормошонда исламиәт ҡанундарын ҡабул итә, дини традицияларға тоғро ҡалырға тырыша.

Хәҙерге осорҙа фән, ғилем тармаҡтарының иҫ китмәле ҡаҙаныштары дини инаныстарҙы юҡҡа сығара алманы, дини тәғлимәт бөгөн дә рухиәт нигеҙен тәшкил итә. Быйның кире ҡаҡҡыһыҙ сәбәптәре бар. Кеше йәшәйештә быуаса күрелмәгән матди байлыҡ туплауға, шәхси тормошонда барса ихтыяждарының, теләк-талаптарының үтәлеүенә өлгәшә ала. Әммә тик матди етешлелек кенә уның күңелен, тойғолар һәм уй-фекер донъяһын бөтәйтә лә, байыта ла алмай. Аҡса-әйбергә бай булып, рухи яҡтан фәҡирлектә көн итеүсе замандаштарыбыҙ бихисап. Әммә һәр кемдең көндәре һанаулы. Әҙәм балаһы, телә-теләмәһә лә, фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күсәсәге хаҡында уйланмай булдыра алмай. Ниндәй генә күркәм йортта йәшәһәң дә, ниндәй генә затлы кейемдәр кейһәң дә, ниндәй генә татлы ризыҡтар ейһәң дә, ошо донъяуи уңыштарың һинең рухыңды биҙәмәй, күңел күгенде бейегәйтә лә алмай. Былар аңлы рәүештә, йә осраҡлы ҡылынған гонаһлы ғәмәлдәреңде бер нисек тә аҡламай. Былдай хәлдә кешегә бары бер генә юл ҡала - үҙең хаҡында үҙеңә уйланырға, рухиәт юлына ныҡлап аяҡ баҫырға, дини тәғлимәт аша шәхси йәшәйешең асылына төшөнөргә, йәнеңде баҡыйлыҡҡа әҙерләп өлгөрөр форсаттан файҙаланып ҡалырға. Боронғолар ҙа әйткән бит - әҙәм балаһына тәүбәгә килергә бер ҡасан да һуң түгел, тип. Тик матдилыҡҡа мөкиббән китеп, ҡараштарыбыҙҙы ерҙән күктәргә күсерә алмаһаҡ, иманлы була алмаҫбыҙ. Үҙең йәшәгән мөхиттә яҡшылыҡтар, изге тип нарыҡланыр ғәмәлдәр ҡылыр өсөн һуң булып ҡуйыуы бар. Ошо хаҡта йышыраҡ уйланһаҡ ине, хөрмәтле милләттәштәрем.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ОЯТҠА ҠАЛМАЙЫҠ...

## ситтән килгәндәр алдында

(Башы 1-се биттә).

Бер көн күрәм: оҙон буйлы (күрәһең, волейболсы йә баскетболсыларҙыр инде), ҡара тәнле сит ил егеттәре ошо склад магазиндың йәшниктәр, уларҙан бушатылып бөтмәгән һауытһаба, хужалыҡ тауарҙары өйөләп торған шыҡһыҙ залдары буйлап йөрөп аталар. Нимә эҙләп килеп инделәр икән - кем белә инде... Ҡайҙа килеп эләктек, тип аптыраған ҡиәфәттә алырға теләгән әйберҙәрен тапмай, ҡайҙа барып һуғылырға белмәй йөрөгән кеүек күренде улар миңә.

Бер нисә көндән йомош менән Матбуғат йортона килә ятҡанда әлеге спорт кейемендәге был егеттәрҙең ҡунаҡханаға инеп барғанын күрҙем. Минә нисектер үҙебеҙҙең Башҡортостан, уның баш ҡалаһы Өфөбөҙ өсөн уңайһыҙ булып китте. Быларҙың магазиндары шулай хәрт кенә икән, тип уйлағандарҙыр инде, тип йән көйҙө. Ҡала властарына, уның архитекторҙарына, сауҙа бүлектәренә былай ҙа яҡшы билдәле булырға тейештер бит: зиннәтле ҡунаҡхана төҙөп ултыртылған икән, уның эргә-тирәһен дә ҡараштырырға, төҙөкләндерергә, йәшелләндерергә кәрәктер бит. Өҫтәүенә, ошонда уҡ милли ризыҡтар, сувенирҙар, үҙебеҙҙең Башҡортостанда етешерелгән тауарҙар менән сауҙа итеүсе "Байрам", "Һабантуй", "Йәрминкә" магазиндары, исеме беҙҙеңсә булмаһа ла "Пышка" эко-маркетының сауҙа нөктәләре эшләп торһа, әйтерең бармы. Ә инде "Светофор", "Полушка" кеүегерәк арзан магазиндарҙы сит-ят күҙенән арыраҡ, һәр хәлдә, ҡаланың бай кварталынан ситтәрәк асырға ла булыр ине. Баш ҡалабыҙ Өфөлә айырыуса һуңғы йылдарҙа бик күп халыҡ-ара саралар үткәрелә, ситтән килеүсе ҡунаҡтар, студенттар күп. Ниңә әле беҙ уларға Өфө ҡалаһының матурлығын, миллилеген, уңайлығын, байлығын күрһәтеп, ҡайһы бер мегаполистарҙан һис тә кәм түгеллеген раҫлай алмайбыҙ? Һуңғы йылдарҙа был мәсьәлә айырыуса көнүҙәк, сөнки баш ҡалабыҙҙа йыш ҡына нефть, газ һәм химия буйынса халыҡ-ара форум, иҡтисад һәм инвестиция мәсьәләләре буйынса бизнес-форумдар үткәрелә. Әле генә Халыҡ-ара "Евразия йәрәге" фестивале, унан Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы гөрләп үтте, уны Халыҡ-ара балалар уйындары алмаштырҙы. Киләһе йыл Башҡортостан Бөтә донъя фольклориадаһын ҡабул итергә йыйына һәм башҡалар... Тимәк, баш ҡалабыҙға сит ил ҡунаҡтарын ҡаршыларға бөтә яҡлап әҙерләнергә кәрәк. Был йәһәттән ваҡ мәсьәлә булырға тейеш түгел, минеңсә. Башҡортостан даны алыҫтарға китһен, ситтән килеп, беҙҙә булып ҡайтҡандар ҙа "Өфө ҡалаһы ни өсөн матур?" тип йырлап йөрөһөндәр, әйҙә!

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА,**
**шағирә, журналист.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓16 августа Башҡортостан Башлығы гранттарына конкурс еңеүселәре исемдәре билдәле буласаҡ. Ғаризалар 12 июлдә ҡабул ителеп бөттө. Коммерциялы булмаған ойошмаларҙың иң яҡшы проекттары дөйөм алғанда 50 миллион һум аҡса аласаҡ. Хәбәр ителеүенсә, "Гранты РБ" мәғлүмәт порталына 229 ғариза ҡабул ителгән. Уларҙың күбеһе - 171-е "Әүҙем республика" номинацияһына дәғүә итә. "Татыу республика" һәм "Яҡшы күршеле республика" бүлектәренә 29-шар проект бирелгән.

✓Республиканың ашығыс медицина ярҙамы быйыл 30 автомобиль һатып аласаҡ. Был туралағы ҡарар БР Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмә мәлендә һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын үтәүсе Максим Забелиндың докладынан һуң ҡабул ителде. Бөгөн республика халҡын 558 "ашығыс ярҙам" машинаһы хеҙмәтләндерә. Максим Забелин, Башҡортостан тағы ла 167 берәмек "В" һәм 30 берәмек "С" категориялы транспортҡа мохтаж, тип белдерҙе. Республиканың ашығыс медицина ярҙамына былтыр 138 автомобиль һатып алынғайны.

✓Республиканың төп пассажирҙар ташыусыһы "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһына ҡала-ара рейсларҙа кешеләр ташыу өсөн 20 яңы автобус ҡайтарылды. Водителдәргә "НефАЗ" асҡыстарын республика етәксеһе Радий Хәбиров тапшырҙы. Яңы автобустар Өфөнән Дүртөйлә, Нефтекама, Октябрьский, Туймазы, Бөрө, Яңауыл, Белорет, Учалы, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез, Баймаҡ, Сибай ҡалаларына, Иҫәнғол ауылына рейстар яһаясаҡ.

✓Ишембай районының Аҙнай ауылы эргәһендә "Кош юлы-2019" башҡорт бард йыры фестивале уҙҙы. Шиғриәт бәйгеһендә Айнылыу Дауытова гранпри яуланы. Гитарала уйнап йырлаусылар бәйгеһендә төп бүләк Нәгим Шәриповҡа тейҙе.Фестиваль программаһына, ижади бәйгеләрҙән тыш, волейбол, футбол кеүек спорт ярыштары, шулай уҡ тимбилдинг, түңәрәк өҫтәл инде. Таланттар байрамы "Беҙ бергә" төркөмөнөң концерты менән тамамланды.

✓Белорет үҙәк район клиник дауаханаһы баш табибы Евгений Кустов хаҡлы ялдағы табиптарҙы район ауылдарына эшләргә саҡыра һәм килеүселәргә торлаҡ, лайыҡлы эш хаҡы бирергә вәғәҙә итә. Эш тип ҡыҙыҡһыныусылар Евгений Кустовҡа "Фейсбук"тағы сәхифәһенә хәбәр яҙа ала.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Бал ҡорттарының үлеме Башҡортостанда ғына түгел, бөтөн ерҙә күҙәтелә. Әле Рәсәйҙә был күренеште барыбер ҙә ауыл хужалығы ерҙәрен пестицидтар ҡулланыу менән бәйләйҙәр.*



БАШ ҠАЛАМ

**Әбйәлил районында тыуып үҫеп, Өфөлә белем алдым һәм бөгөнгө көндә алыҫ Мурманск ҡалаһында йәшәйем.**

# ӨФӨ ЙӘШӘЙ ҺӘМ ЙӘШӘРӘ

Өфө йылдан-йыл үҙгәрә, матурая, бөгөнгө заман менән бер рәттән атлай. Ҡоролтайға килгән саҡта Гоголь, Маркс, Коммунистик урамдарынан үттем. Студент саҡта ошо урамдарҙы әллә күпме тапағанмын, ә уларҙың төҙәклөгөнә, йәшеллегенә иғтибар итмәгәнмен. Бигерәк тә Коммунистик урам йәйәүлеләр өсөн уңайлы булыуы менән айырылып тора. Ағастан төшкән күләгә аҫтында киң тротуар буйлап уҙыуы үҙе бер ғүмер. Әллә нисәмә быуындың яҡты иҫтәлеге булған ағастар артабан да үҙ урындарында тыныс ҡына үҫеп ултырыр, тип ышанам. Ә Гоголь һәм Маркс урамдары бәләкәй генә булһалар ҙа, үҙҙәренә бөгөнгө менән кисәгене һыйындырып "йәшәп" ята. Был урамдарҙа заманса ҙур һәм элекке ваҡыттан ҡалған тарихи йорттар бер-береһен тулыландырып килә, улар Өфөнөң тарихи үҙәге булыу менән бер рәттән, хәҙерге көндөң дә тере шаһиттары. Ғөмүмән, Өфө урамдарының һәр береһе миңә яҡын һәм ҡәҙерле.

Ҡалалағы үҙгәреш һәр ерҙә асыҡ күренә. Тиҫтә йыл элек бында булып киткән кеше хәҙер килһә, хатта танымай торорға ла мөмкин. Бөтә ерҙә лә яңы йорттар ҡалҡып сыҡҡан, заманса биналар күбәйгән, енел машиналарҙың ниндәй генә төрө юҡ, урамдар буйлап уңайлы һәм яңы автобустар елдерә. Ғөмүмән, баш ҡала ғына түгел, тотош республика үҙенең төҙәклеге менән күп төбәктәрҙән айырылып тора. Йәйге ялға ҡайтҡан саҡта машинала 3500 саҡрым юл үтәбеҙ һәм күп урындарҙы күрәбеҙ, шуға күрә мин Башҡортостанды, Өфөнө башҡа урындар менән сағыштыра алам. Һәм был сағыштырыуҙа Өфө иң яҡшы урындарҙың береһен биләй. Ҡала хакимиәте, республика етәкселеге Өфө, республика өсөн күп яҡшы эштәр атҡарыуын инҡар итеп булмай. Уларға артабан да эштәрендә ыңғайлыҡ юлдаш булһын.

Мурманск менән сағыштырғанда Өфөлә йорт хайуандары тотоусылар әҙерәк, тип билдәләр инем. Уның ҡарауы, Өфөлә велосипедта йөрөүселәр күп осраны. Баш ҡалала тағы нимә күҙгә ташланды - үҙәктә ашап алыу урындарының үтә лә күп булыуы. Һәм уларҙың һәр ҡайһыныһында тиерлек тулы халыҡ. Шулай уҡ Өфөлә йәш балалы ғаиләләр йыш осрай. Был бик ҡыуан189слы хәл, тимәк, ҡала йәшәй һәм йәшәрә.

Яратҡан Өфөмә һәр ваҡыт бөгөнгө көндәге кеүек үк матур һәм ҡунаҡсыл булып ҡалыуын теләйем.

**Әлиә ЙЫҺАНШИНА.**
**Мурманск ҡалаһы.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ҺИГЕҘ КАНДИДАТ

**Үҙәк һайлау комиссияһы Башҡортостан Башлығы вазифаһына тағы дүрт кандидатты теркәне. Башҡортостан Башлығын һайлауҙа бөтәһе һигеҙ кеше рәсми кандидат булды.**

Ҡала проекттарын үҫтереү фонды директоры Владимир Барабаш ("Граждандар көсө" партияһынан тәҡдим ителгән), блогер Владимир Кобзев (Рәсәйҙең "Пенсионерҙар социаль ғәҙеллек өсөн" партияһы), юрист һәм өлөшсөләрҙең инициативалы төркөмө вәкиле Зөлфиә Ғайсина ("Яблоко" партияһы) һәм эшҡыуар, "Восток" банкының элекке хужаһы Рәфис Ҡадиров ("Рәсәй патриоттары" партияһы) дәғүәсе таныҡлығын алды. Башҡортостан Башлығын һайлауҙа кандидаттарҙың тулы исемлеге хәҙер шулай: Радий Хәбиров ("Берҙәм Рәсәй"), Юнир Ҡотлоғужин (КПРФ), Иван Сухарев (ЛДПР), Юрий Игнатьев ("Ғәҙел Рәсәй"), Владимир Барабаш ("Граждандар көсө"), Владимир Кобзев (Рәсәйҙең "Пенсионерҙар социаль ғәҙеллек өсөн" партияһы), Зөлфиә Ғайсина ("Яблоко") һәм Рәфис Ҡадиров ("Рәсәй патриоттары").

Республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы ике кандидатты теркәүҙән баш тартты. "Социаль яҡлау" партияһынан күрһәтелгән Алексей Молокин теркәү өсөн ҡануниәт тарафынан билдәләнгән кәрәкле документтар пакетын, Рәмилә Сәйетова ("Рәсәй Социалистик партияһы") теркәү өсөн кәрәкле муниципалитет депутаттары ҡултамғаларын етерлек күләмдә тапшырмаған. Үҙәк һайлау комиссияһы ағзалары шулай уҡ Сания Тимасованың Башҡортостан Башлығын һайлауҙа артабан ҡатнашыуҙан баш тартыуы тураһында ғаризаһын ҡабул итте.

# ҠОРТТАР ҮЛӘ...

**Күптән түгел баҫыуҙарҙы пестицидтар менән эшкәртҡәндән һуң, Бишбүләк, Иглин, Йәрмәкәй, Өфө, Стәрлетамаҡ, Илеш, Миәкә райондары умартасылары күпләп бал ҡорттары үлеүен белдергәйне.**

Башҡортостан ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса фәнни-тикшеренеү институтының генераль директоры Әмир Ишемғолов белдереүенсә, зыян күреүселәр судҡа мөрәжәғәт итә ала. Ҡортсолоҡ тураһындағы законға ярашлы, фермерҙар һәм башҡа ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәр ағыу ҡулланыуҙан биш көн алда умарталыҡтары баҫыуҙарҙан 5 километр радиусында урынлашҡан умартасыларға барлыҡ бәйләнеш каналдары аша хәбәр итергә тейеш. Был осраҡта умартасылар умарталарҙы хәүефһеҙ урынға сығарып өлгөрә ала, әммә был юлы улар бер ниндәй ҙә иҫкәртеү алмаған. Әгәр Россельхознадзор лабораторияһы ҡорттарҙың ысынлап та химик эшкәртеүҙән һуң үлеүен асыҡлаһа, умартасылар фермерҙарҙан компенсацияға өмөт итә ала. Быйылғы миҙгелдә һәр күс 8-10 мең һум тора. Әмир Ишемғолов белдереүенсә, бөгөн Башҡортостанда рапс баҫыуҙары киңәйтелә. Ул балға ла бай һәм ҡорттар уның сәсәкәһенән һут йыя. Әммә рапс баҫыуҙарын вегетация осоронда дүрт тапҡыр пестицидтар менән эшкәртергә кәрәк. Бынан тыш, 30 көн дауамында көсө бөтмәгән препараттар ҙа бар. Улар ҙа бал ҡорттары өсөн үлемесле. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Һарытау ветеринария лабораторияһы белгестәре тикшереүе Стәрлетамаҡ районында бал ҡорттары үлеүенә "Лямбда-цигалотрин" һәм "Эсфенвалерат" тип аталған ағыулы химикаттар ғәйепле икәнен асыҡлаған. Тейешле инструкцияларҙы үтәгәндә, улар ҡорттар өсөн зыянлы түгел икән, әммә был осраҡта умартасылар алдан иҫкәртелмәгән була. 2011 йылға тиклем был инсектицидтарҙы һатыу һәм ҡулланыу "Россельхознадзор" контролендә булһа, һуңынан уларҙың вәкәләте Роспотребнадзорға бирелә. Әммә белгестәр урындарға сыҡмай, бары тик химикаттарҙың һуңғы продукттағы эҙен генә тикшерә. Шулай уҡ ағыуҙы ҡулланыуҙы "Росприроднадзор" күҙәтә.

Бал ҡорттарының үлеме Башҡортостанда ғына түгел, бөтөн ерҙә күҙәтелә. Әле Рәсәйҙә был күренеште барыбер ҙә ауыл хужалығы ерҙәрен пестицидтар ҡулланыу менән бәйләйҙәр. Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында бал ҡорттарының үлеүен тикшергән махсус ведомство-ара төркөм ойошторолдо. Министрҙың беренсе урынбаҫары Рәмил Нуриәхмәтов ведомство-ара эш төркөмөндә, бал ҡорттарының үлеүенә килтергән сәбәптәр ентекле өйрәнелә, тип белдерҙе.

Әйткәндәй, Башҡортостан ҡортсолоғонда тағы ла шундай кире факттар бар: 19 йыл инде Башпчелоконтора эшләмәй. Элек ул ҡортсолоҡ продукцияһын әҙерләү һәм һатыу, аналитика һәм мәғлүмәт эше менән шөғөлләнә, умартасыларға ярҙам итә ине. Шулай уҡ үҙәге Иглин районының Оло-Тәләк ауылында булған Башҡортостан Ҡортсолоҡ тәжрибә участкаһы ла 7 йыл инде юҡ. Заманында алдынғы булған фәнни-производство структураһы өнһөҙ генә онотолоуға дусар ителә. Ә Өфөлә Халыҡ-ара "Апимондия" умартасылар конгресын үткәреүгә ни бары ике йыл ҡалды...

# ЮЛДАР ЯҠТЫРТЫЛА

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров етәкселегендә ойошторолған юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса ведомство-ара кәңәшмәһендә "Урал буйы" федераль автомобиль юлдары идаралығы етәксеһе Азамат Илембәтов Р-240 трассаһы 2021 йылда Стәрлетамаҡҡа тиклем яҡтыртылып бөтәсәк, тип белдерҙе.**

Хәҙер Ырымбур юлын яҡтыртыу Өфөнән 31 саҡрымға, Булгаков ҡасабаһына тиклем еткерелгән. Азамат Илембәтов әйтеүенсә, ремонт һәм тергеҙеү программаһына ярашлы, федераль трассалар буйында урынлашҡан барлыҡ кеше йәшәгән пункттар янын яҡтыртыу планлаштырылған. Әлеге ваҡытта федераль юлсылар М5 "Урал" трассаһының Октябрьский ҡалаһы, Туймазы һәм Өфө райондарынан үткән 54 саҡрымлыҡ дүрт биләмәлә эшләй. М7 "Волга" трассаһында Дүртөйлө һәм Кушнаренко райондарында 20 километр юлға реконструкция үткәрелә. Р-240 трассаһында иһә 59 саҡрым юл ремонтланасаҡ.

# КЕМДӘР ХЕҘМӘТ ИТӘ?

**Яҙғы хәрби саҡырылыш һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостанда 4191 кеше әрме хеҙмәтенән азат ителгән, 254 кеше ярамһыҙ булып сыҡҡан. Был турала бөгөн БР Хөкүмәте кәңәшмәһендә Башҡортостан хәрби комиссары Игорь Харченко хәбәр итте.**

69 саҡырылыш комиссияһына тикшереүгә 20 483 кеше саҡырылған, 20 426 кеше килгән. Улар араһынан хәрби хеҙмәткә яраҡлы тип 14 217 йәш егет табылған. 3935 кеше - сиклəүҙәр менән яраҡлы.1992-2001 йылғы призывниктарҙың бер өлөшө ДОСААФ-та һигеҙ хәрби һөнәр буйынса уҡыған. Мәсәлән, 952 кеше С категорияһында водитель таныҡлығы алған. Игорь Харченко саҡырылыш комиссияһы ағзалары ниндәй проблемаларға юлығыуы тураһында ла әйтеп үтте. Водителдәрҙе әҙерләү сифаты түбән: курсанттарҙың 10 проценты ғына машина йөрөтөү буйынса һынауҙы бер биреүҙә тапшырған. Шулай уҡ менингит кеүек ауырыуҙарға килтереүсе пневмококк инфекцияһынан вакциналар етешмәй. Радий Хабиров һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын үтәүсе Максим Забелинға был һорауҙы хәл итергә бойорҙо.Тағы Игорь Харченко Башҡортостанда элек хөкөм ителгән йәки ирекҡә сығарылған 2500 граждандан торған саҡырылыш резервы барлығын әйтте. "Ләкин Генштаб бындай призывниктарға наряд ебәрмәне", - тине военком.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә БР буйынса Эске эштәр министрлығының Кинология хеҙмәте үҙәге комплексы асылды. Ул баш ҡаланың Октябрь районындағы урманлы зонаһында 7 гектар майҙанда урынлашҡан. Әлеге ваҡытта республиканың кинология хеҙмәтендә 436 хеҙмәт эте менән 370-тән ашыу хеҙмәткәр эшләй. Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров кинологтарға һәм полиция хеҙмәткәрҙәренә эштәре өсөн рәхмәт әйтеп, улар ауыл-ҡалаларҙағы тормошто хәүефһеҙ итә тип белдерҙе.

✓Салауат районының Лаҡлы ауылында 80 урынлыҡ мәктәп һәм 40 урынлыҡ балалар баҡсаһы төҙөйҙәр. Был маҡсатҡа федераль һәм республика ҡаҙнаһынан 153 миллион һум бүлеү күҙаллана. 2019 йылда, техник заданиеға ярашлы, ер эштәрен башҡарыу, нигеҙ һалыу, стеналарҙы күтәреү, ҡыйыҡ ябыу, ә 2020 йылда тәҙрәләрҙе ҡуйыу һәм эске ағын биҙәү планлаштырыла. Эштәрҙең икенсе этабы 2020 йылдың 1 октябренә тамамланырға тейеш.

✓Август айында Башҡортостан халҡын Ҡорбан байрамы хөрмәтенә өҫтәмә ял көнө көтә. Быйыл Ҡорбан байрамы йәкшәмбе 11 августҡа тура килә. Өҫтәмә ял көнө дүшәмбе 12 августҡа күсерелә, ә ул өс көн рәттән - 10, 11 һәм 12 август ял итеү мөмкинлеген аңлата. Ҡорбан байрамынан һуң 11 октябрь - Республика көнө килә, быйыл ул йомаға тап килә. Августағы кеүек, Башҡортостан халҡы өс көн рәттән: 11, 12 һәм 13 октябрь ял итә ала.

✓Башҡортостанда эшһеҙлек буйынса уртаса пособие күләме июндә 7 005 һум, йәғни эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы дәүмәленән 69,5 процент тәшкил иткән. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда эшһеҙҙәр һаны Халыҡ-ара хеҙмәтте йөштороу стандарттарына ярашлы 89 мең кеше тәшкил итә. Уларҙың 21 меңдән күберәге - рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр. Республикала иҡтисади әүҙем халыҡ иҫәбе 1,9 миллион кешенән артып китә.

✓Стәрлетамаҡта республикала беренсе дәүләт "Зоодом" зооҡунаҡханаһы үҙ ишектәрен асты. Ҡунаҡхана янында клиника урынлашҡан һәм ул тейешлсә йыһазландырылған. Унда хайуандарға вакцинация, диспансер тикшереүе, быуаҙ мәлдәрендә күҙәтеү, аҫрау буйынса кәңәштәр биреү, электрон чиплау, УЗИ үткәреү, амбулатор процедуралар, интенсив терапия, ветеринария документтары эшләү кеүек хеҙмәттәр ҡаралған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ӨФӨНӨҢ ХӘҘЕР...

## 1500 илсеһе бар!

**Үткән аҙна матур һәм сағыу ваҡиғаларға бай булһа ла, ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин сираттағы оператив кәңәшмәне күңелһеҙ осраҡтан башланы.**



Ысынлап та, һуңғы көндәрҙә республикала күҙәтелгән ике ҙур юл-транспорт ваҡиғаһы тетрәндереп кенә ҡалманы, хәүефһеҙлек тураһында ҡабат-ҡабат иҫкәртеү урынлы икәнен иҫкә төшөрҙө. Архангел районы территорияһында Татарстан Республикаһының аварияға осраған автобусы водителенең быға тиклем бер нисә тапҡыр ҡағиҙә боҙған икәнлеге асыҡланыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, Өлфәт Мансур улы пассажирҙарҙы хеҙмәтләндергән ҡала транспорты ойошмаларында осрашыуҙар, водителдәрҙе тикшереүҙәр үткәрергә ҡушты. "Талаптар мөмкин тиклем ҡаты булырға тейеш", - тине ул. Шулай уҡ Өфө-Ырымбур трассаһында йөк автомобиленең юл ремонтлаусыларҙы тапатыуынан һуң ҡала хакимиәте башлығы юлдарҙы, бигерәк тә төнгө ваҡытта, ремонтлаусыларҙың хәүефһеҙлеге тураһында хәстәрлек күреүҙе лә контролгә алыуҙы, инструктаждар үткәреүҙе, махсус кейемдәр менән тәьмин итеүҙе йөкмәтте.

Шулай ҙа үткән аҙнаның төп ваҡиғаларының береһе һәм оператив кәңәшмәнең көн тәртибендә беренсе һорау булып 53-сө Халыҡ-ара йәйге балалар уйындары торҙо. Унда, хәбәр итеүебеҙсә, 29 илдең 84 ҡалаһынан 1192 спортсы, 397 етәксе, тренер ҡатнашты. Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизовтың отчетынан мәғлүм булыуынса, Уйындарға килгән һәр команданы аэропорттан уҡ ирекмәндәр ҡаршы алып, уларҙы йәшәү урынына тиклем оҙатып ҡуйған. 10 июлдә барлыҡ командалар килеп етеп, ҡунаҡханаларҙа урынлашып бөткән. Уйындарҙы хеҙмәтләндереүгә 60-тан ашыу автобус, 100 еңел машина йәлеп ителгән. Ҡатнашыусылар һәм судьялар ярыш урындарына тотҡарлыҡһыҙ, ваҡытында барып еткән.

8-15 июлдә Ситуацион үҙәккә спорт саралары расписаниеһы, программа, ирекмәндәр эшмәкәрлеге, сервис, транспорт, хәүефһеҙлек, VIP-ҡунаҡтарҙы оҙатып йөрөү буйынса барлығы 577 мөрәжәғәт килә. Хеҙмәткәрҙәр консультациялар биреп кенә ҡалмай, юғалған әйберҙәрҙе табыуҙа ла, медицина ярҙамы кәрәккәндә лә ярҙам итә. Мәҫәлән, сара барышында ҡатнашыусылар 4 кеҫә телефонын, 10 миграция картаһын юғалта. Барлыҡ хеҙмәттәрҙең оператив эшләүе һөҙөмтәһендә барлыҡ шәхси әйберҙәр тиҙ арала табыла. Йәмәғәт тәртибен һаҡлауҙа эске эштәр, милли гвардияның 500-әр хеҙмәткәре, шәхси һаҡ ойошмаларының 100 хеҙмәткәре, Йәмәғәт именлеге үҙәгенең тулы составы, контроль-таратыу хеҙмәтенең 50 хеҙмәткәре ҡатнаша. ЮХХДИ-ҙың Өфө ҡалаһы буйынса идаралығы ла яйлы эшләй. Уйындарға 200-ҙән ашыу, шул иҫәптән Израиль, Һиндостан, Португалия, Австрия, Боливия, Нидерландтарҙан һәм Рәсәй ҡалаларынан, киң мәғлүмәт сараһы вәкиле аккредитациялана. Барлыҡ ҡатнашыусылар ҙа уйындарҙың юғары кимәлдә үтеүен, спорт объекттарының талаптарға яуап биреүен, ҡала халҡының ябайлығын һәм ихласлығын билдәләй. Шулай уҡ ошо көндәрҙә спортсылар менән тәүлек әйләнәһенә тигәндәй бәйләнештә булған ирекмәндәр ҙә йылы һүҙҙәргә лайыҡ. Хатта ярыштар тамамланып, командалар үҙ илдәренә ҡайтып киткәс тә, ирекмәндәргә рәхмәттәрен белдереп яҙалар. Ғөмүмән, ойошмалар, предприятиелар, ҡала советы депутаттары корпусы, киң мәғлүмәт саралары - бер кем дә был саранан ситтә ҡалмай. Уларҙың фиҙаҡәрлеге һөҙөмтәһендә Өфө - халыҡ-ара сараларҙы үткәреү өсөн иң яҡшы майҙандарҙың береһе булараҡ ыңғай фекер ҡалдырҙы.

Уйындар барлығы 5 спорт объектында үтте, артабан инде уларҙың буш тормауын тәьмин итеү буйынса эш алып барыу бурысы тора. "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркындағы актив ял зонаһында ла балаларҙың бушлай пляж волейболы, волейбол, баскетбол менән шөғөлләнеү мөмкинлеген булдырырға кәрәк, тигән фекер бар.

Әйткәндәй, 13 июлдә "Нефтсе" стадионында 53-сө Халыҡ-ара Йәйге балалар уйындарының (МДИ) йомғаҡлау матбуғат конференцияһы үтте. Журналистарҙың һорауҙарына Уйындарҙың генераль секретары Ричард Смит, Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин, футбол буйынса Рәсәйҙең экс-капитаны, Төбәк сәйәсәте һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәр буйынса Рәсәй футбол союзы директоры, дискриминация һәм расизмға ҡаршы көрәш буйынса офицер Алексей Смертин, МДИ комитеты һәм техник комиссияһы ағзаһы, ярыштарҙың баш судьяһы, билдәле конькиҙа уҙышсы Андрей Кривошеев, "Газпром трансгаз Өфө" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең генераль директоры Шамил Шәрипов һәм "Дуҫлыҡ өсөн футбол" проектының йәш илсеһе Альберт Зиннәтов яуап бирҙе. "Һуңғы йылдарҙа мин 12-се тапҡыр Өфөгә киләм һәм һәр сәфәремдән ҡыуаныс алам, - тине Ричард Смит. - Әҙерлек бик етди барҙы, инфраструктура, ярыштарҙы үткәреү, спорт ҡоролмалары, уйындарҙы хеҙмәтләндереү - иҫ киткес булды. Хәҙер Башҡортостандың баш ҡалаһының ниндәй матур ҡала икәнлеген донъя буйлап һөйләрлек мең ярым илсеһе бар". Андрей Кривошеев белдереүенсә, Уйындарҙың концепцияһына ярашлы, миҙалдар һаны буйынса урындар билдәләү ҡаралмаһа ла, дөйөм алғанда өфөләрҙең 25, шул иҫәптән 8 - алтын, 6 - көмөш, 11 бронза миҙал алып, лидер булыуы ҡыуаныслы. "Өфөлә мин икенсе тапҡыр һәм ике осраҡ та профессиональ футбол менән бәйле, - тип белдерҙе Алексей Смертин. - МДИ сиктәрендәге футбол матчтары арҡаһында төрлө ил балалары менән таныштыҡ һәм хатта дуҫлаштыҡ. Улар төрлө телдә һөйләшһә лә, футбол теле барыһы өсөн дә бер". "Дуҫлыҡ өсөн футбол" илсеһе Альберт Зиннәтов бындай проекттарҙың донъяның барлыҡ илдәрендәге балаларҙың һәләтен асыҡлауға, уларға уңышлы киләсәккә юл ярырға ярҙам итеүен билдәләне.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# АЛАЛАР, ФАЙҘАҺЫН КҮРӘЛӘР

**Беҙҙең илдә ун йылдан ашыу хәҙер әсәлек (ғаилә) капиталы рәүешендә балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙам сараһы бойомға ашырылып килә.**

Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, республикабыҙҙа 310 мең ғаилә әсәлек капиталы сертификатына эйә булды. Тапшырылған сертификаттар һаны буйынса Башҡортостан Рәсәйҙең төбәк бүлексәләре араһында иң алдынғы бишәү иҫәбендә килә. Әсәлек (ғаилә) капиталын тотонған 267 мең ғаиләнең 254-е (82 процент) аҡсаларын - торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, 12 мең ғаилә - балаларын уҡытыуға, 1,5 меңе мәктәпкәсә белем өсөн түләүгә йүнәлткән. 162 сертификат эйәһе аҡсаларын әсәләрҙең тупланма пенсияһын булдырыуға, 6 ғаилә инвалид балалар йәмғиәтенә социаль адаптация һәи интеграция өсөн тәғәйенләнгән тауарҙар һатып алыуға һәм күрһәтелгән хеҙмәттәргә түләгән. Бөтөн йүнәлештәр буйынса әсәлек капиталын тотоноуға республикаға барлығы 98,3 млрд. һум аҡса күсерелгән. 210 меңдән ашыу ғаилә тарафынан әсәлек (ғаилә) капиталы аҡсаһы тулыһынса тотонолған. 2018 йылдан алып, РФ субъектында билдәләнеүенсә, килеме йәшәү минимумынан 1,5 тапҡырға артмаған ғаиләләр әсәлек (ғаилә) капиталы аҡсаһынан айлыҡ түләү алып торорға хоҡуҡлы. Йәшәү минимумы 9552 һум (1,5 тапҡыр күләм - 14328 һум) булған беҙҙең республикала бындай түләү күләме 9182 һум тәшкил итә. Икенсе балалары тыуған (йә ул, ҡыҙ итеп алынған) 1347 ғаилә ошондай мөмкинлек менән файҙалана ла инде. Айлыҡ түләүҙәр алыу өсөн ғаризаны ата-әсәнең теркәлгән урынынан йә даими теркәлеү урынынан ғына түгел, ғаиләнең фактик йәшәгән урыны буйынса ла яҙырға мөмкин.

**Рәсәй Пенсия фонды Башҡортостан буйынса бүлексәнең матбуғат хеҙмәте.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үҙәк көйөү

❖ Яңы ғына һығылған картуф һуты ашҡаҙан һуты әселеген нормаға килтерә, шунда уҡ үҙәк көйөүен бөтөрә. Картуф һутын көнөнә өс тапҡыр, ашар алдынан 50-шәр мг эсәләр. Мөмкинлек булһа, картуфтың төрлө сорттарын ҡулланығыҙ. Шулаҡ уҡ ҡылыҡ үлән (аир) тамыры яҡшы ярҙам итә. 6-10 борсаҡ сәйнәү ҙә үҙәк көйөүенән ярҙам итә.

### Быу ҙа дауа

❖ Ҡурылдай, туберкулез, ангина, һыуыҡ тейеү, киҙеү, фарингитты дауалау өсөн түбәндәге ингаляцияны ҡулланығыҙ. 60 грамм прополис менән 40 грамм балауыҙҙы эмалле һауытҡа һалып, һыулы кәстрүлгә ҡуйығыҙ. Һыуҙы ҡайнау хәленә килтерергә кәрәк. Быу күтәрелә башлау менән 10-15 минут ингаляция эшләргә. Дауаны иртән һәм кисен 10-15 көн дауам итергә.

### Йәшел сәй

❖ Борондан йәшел сәйҙе дизентерия һәм ҡорһаҡ тифын дауалау өсөн ҡулланғандар. Ҡаты итеп бешерелгән йәшел сәйҙе ашҡаҙан-эсәк трактына һәм баш мейеһенә ҡан һауыу ваҡытында, капиллярҙар шартлаған мәлдә лә файҙаланғандар. Был эсемлек бәүел ҡыуығында, бөйөрҙәрҙә, бауырҙа таш барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай, шулай уҡ тиренең функцияларын әүҙемләштерә, тир бүленеп сығыуҙы көсәйтә, күҙәнәктәрҙе таҙарта. Әммә йәшел сәйҙең бөйөрҙәр аша шыйыҡлыҡ сығыуҙы тотҡарлауын да онотмағыҙ.

### Теш ите

❖ Теш ите ауырыуҙары ваҡытында ҙур булмаған сей картуф сәйнәгеҙ. Ошо ысул менән электән ауыҙ ҡыуышлығы ауырыуҙарынан һәм зәңгенән ҡотолғандар.

### Балыҡ майы

❖ Әгәр ҙә көнөнә 3 тапҡыр ашаған ваҡытта 5-әр капсула балыҡ майы ла ҡабул итһәгеҙ, быуындарығыҙҙы сәләмәтләндерәһегеҙ, ҡан баҫымын нормаға килтерәһегеҙ, шулай уҡ папилломанан ҡотолаһығыҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Арҡыры, йәки арҡылы балаҫ көнкүрештә лә, бигерәк тә урындыҡ ишеккә ҡаршы түгел, ә мейес буйында, бүлмәнең ситке өлөшөндә урынлашҡанда бик матур күренгән. Мәләүез, Ейәнсура райондарында арҡыры балаҫты буй балаҫ менән бергә йәйгәндәр.**

Һуғыу, биҙәк үҙенсәлегенә килгәндә, арҡыры балаҫтар Дағстандың көньяҡ халҡы, Төньяҡ Кавказдың һарыҡсылыҡ менән шөғөлләнгән башҡа өлкәләре балаҫ сәнғәтенә яҡын. Урал буйы башҡорттары мәҙәниәтенең төньяҡ-кавказ төбәгенә яҡынлығын аңлатыуы ауыр, әммә был күренеш матди мәҙәниәттең башҡа формаларында ла (ҡатын-ҡыҙҙарҙың туй кейемендәге ҡаты билбау, ирҙәрҙең баш кейеме - башлыҡ, бойҙайҙан әҙерләнгән милли ризыҡтар һ.б) осрай.



*Балаҫ һуғыу оҫтаһы Б. Тимербаева. Күгәрсен районы Бикбулат ауылы. Автор фотоһы. 1981*

XX быуатта Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында буй балаҫ һуғыу традицияһы икенсе планға күсә. Был - ултыраҡ тормошта төрлө конфигурациялы геометрик элементтарҙан торған сағыу биҙәкле балаҫҡа күберәк иғтибар йүнәлтеү мөмкинлеге һөҙөмтәһе. Бындай геометрик биҙәкле балаҫ һуғыу сәнғәте менән башҡорттарҙың ҡайһы бер төркөмдәре борондан таныш булған, тигән ҡараш йәшәй. Урта Азия, Яҡын Көнсығыш төбәктәренә хас биҙәктәр ошо турала һөйләй (был турала алда тулыраҡ әйтеләсәк). Башҡортостандың көнбайыш райондарында рамлы һуғыу станоктары булыуы һәм биҙәкле киндер туҡыма һуғыуҙары балаҫ һуғыу традицияһы нығыныуға ла килтергән.



*Биҙәкле балаҫ техникаһы үҙенсәлеге*

Биҙәкле балаҫ, йәки келәм, аҫалы балаҫты 60-70 см киңлектәге ике буй итеп һуҡҡандар. Буй балаҫтарынан айырмалы рәүештә, аҫалы балаҫтың ҡаймаһы була, уны төп биҙәк менән бер юлы һуғалар.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# БӘКӘТИН ВАРИҪЫНЫҢ ӘЙТКӘНЕ



**27 - 29 июндә үткән V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында миңә Төмән өлкәһенең "Себер татарҙары милли-мәҙәни автономияһы" ("Национально-культурная автономия сибирских татар") йәмәғәт ойошмаһы исеменән саҡырылған ҡунаҡ булараҡ ҡатнашыу бәхете тейҙе.**

Башҡортостанға өсөнсө тапҡыр килеүем булды был. Тәүгеһендә республика дәүләт архивына тыуған ауылым Бәкәтин (Бегетино) тураһында мәғлүмәт эҙләп юлланған инем. Икенсе тапҡыр "Рәсәй төркиҙәре: бөгөнгө заман һәм тарихи оҡшашлыҡ мәсьәләләре" исемле түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашыу мөмкинлеге тейҙе. Һәр килеүемдә лә ихлас күңеллелек һәм ҡунаҡсыллыҡ менән осраштым. Шулай уҡ башҡорт милли аш-һыуының тәмлелеген билдәләп үтмәйенсә мөмкин түгел. Ә иң оҡшағаны - ҡымыҙ булды. Өфөгә килгән һайын халыҡтарыбыҙҙың туғандаш булыуын тоям. Был телдә лә, шулай уҡ мәҙәниәт һәм йолаларҙа ла асыҡ сағыла. Мәҫәлән, мин башҡорт телен яҡшы аңлаһам, башҡорттар минең сыбыр телен (себер татарҙары телен) тәржемәһеҙ ҙә төшөнә.

Ҡоролтайҙа ҡатнашыуым да бары тик яҡшы яҡтары менән хәтеремдә ҡаласаҡ. Оло сараға килгән ҡунаҡтар ҡоролтайға тиклем ҡала буйлап сәйәхәттә лә булып өлгөрҙө, башҡорт халҡының милли эпосы буйынса ҡуйылған "Урал батыр" спектаклен дә ҡараны. Спектаклдә ҡулланылған лазер технологиялары, үҙенсәлекле битлек һәм костюмдар художестволы новаторлыҡ тураһында һөйләй. Шулай уҡ актерҙарҙың юғары оҫталығы ла һоҡландыра.

Ҡоролтай барышында әлегә тиклем тик социаль селтәрҙәр аша ғына таныш булған йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ғалимдар, журналистар һәм артистар менән шәхсән күрешеүемә һәм танышыуыма бик шатмын. Айырыуса, үҙҙәре мине танып, яныма килеүҙәре күңелемде үҫтереп ебәрҙе. Шулай уҡ "Тарих һәм оҡшашлыҡ (идентичность)" секцияһында тыңлаусы булараҡ үҙем өсөн фәһемле һәм мөһим мәғлүмәт алдым. Башҡорт халҡының артабанғы үҫеш стратегияһын күҙаллаған ултырыштағы докладтарҙа яңғыраған проблемалар беҙҙең себер татарҙарына ла хас. Шуға күрә, үҙем өсөн күп нәмә алдым һәм халҡым алдында торған мәсьәләләрҙе сисеү юлдарын күрҙем. Төрки халыҡтарының бер төптән булыуы уларҙың һәр береһе үҫеше өсөн ыңғай этәргес булып тороуына ышанам. Ошо уҡ көндә башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич һәйкәлен асыу тантанаһында ҡатнаштым. Бөйөк шағир ғына түгел, ә үҙ халҡының милли үҙаллылығы өсөн ҙур эштәр башҡарған шәхесте ҙурлауҙары башҡорт милләттенең үҙ тарихына ихтирамын күрһәтә.

Ә Торатау итәгендә үткән фольклор байрамының масштаблылығы иҫте китәрерлек. Төрлө ярыш һәм уйындар, милли күренештәр, ҡаласыҡтар, башҡорт халҡының элекке йәшәйешен, кейемен, шөғөлөн күрһәткән экспозиция менән биҙәлгән тирмәләр - барыһы ла юғары кимәлдә булды.

Шулай ҙа минең күңелемдә иң ҙур тойғо ҡалдырғаны - башҡорттарҙың изге тауы Торатау булды. Күпселек кеше кеүек үк, мин дә уның башына менеп, тирә-яғына күҙ һалдым. Тау башынан асылған матурлыҡҡа һоҡланып бөтөү мөмкин түгел. Ә ошо төбәктә, бәлки, нисәлер быуат элек бәкәтин ырыуынан булған башҡорт ата-бабаларым йәшәгәндер һәм яҙмыш ҡушыуы буйынса бөгөн килеп мин, уларҙың вариҫы, ошо ерҙә баҫып торам... Һүҙ менән генә аңлатып булмаған тойғолар кисерҙем мин Торатау башында, боронғо тарихыбыҙға барып урап ҡайтҡандай булдым.

Башҡортостандан мин тик яҡшы тәьҫораттар һәм йыйын барышында тыуған күп уй-фекерҙәр менән ҡайттым. Киләсәктә, Алла бирһә, туғандаш халыҡ менән тағы ла осрашырға, эшләргә насип булһын, тип теләйем.

**Фәрхәд ШАМУРАДОВ,**
**Төмән ҡалаһы.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**
**Төмән өлкәһе Вагай районында урынлашҡан Бегетино ауылына әллә күпме быуат элек ҡатай һәм үҫәргән ырыуҙары составына ингән бәкәтин башҡорт ырыуы кешеләре нигеҙ һалыуы хаҡында киң йәмәғәтселек иғтибарына еткереүсе, үҙҙәрен себер татарҙары тип йөрөткән ауылдаштарының шәжәрәһен, ауылының тарихын өйрәнеп, "Бегетино ауылы тарихы" исемле китап сығарыусы Фәрхәд Шамурадов гәзитебеҙҙең быйылғы 9 һанында сығыш яһағайны. "Улайһа, ни өсөн һеҙҙе татарҙар тип йөрөтәләр?" тигән һорауға ул шулай тип яуап бирҙе: "Ҡаҙан татарҙары менән беҙҙең уртаҡлыҡ шунда - беҙ барыбыҙ ҙа төрки халыҡтарға инәбеҙ. Ә генетик тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Ҡаҙан, Ҡырым, Себер һәм Әстерхан татарҙары төрлө халыҡтар вәкиле. Уларҙың дөйөм ата-бабалары юҡ һәм уларҙың халыҡ булып формалашыуы бер береһенән бойондороҡһоҙ рәүештә барған. Ошо факт ни өсөн уларҙың телдәре бер-береһенә оҡшамағанын һәм ниңә улар бер-береһен аңламауына асыҡлыҡ индерә. Шуға күрә, бөгөнгө көндә Себер татарҙарын Ҡаҙан йәки Ҡырым татарҙарына индерергә тырышыу бөтөнләй башҡа һыймай. Беҙ үҙаллы халыҡ. Беҙҙең үҙ телебеҙ, сәнғәтебеҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, быуаттар буйы формалашҡан үҙ булмышыбыҙ бар. Әлеге ваҡытта беҙ айырым халыҡ булып көн итәбеҙ. Беҙҙең өсөн иң мөһиме - сыбырлар, "себер халҡы" булыуыбыҙ..."**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ИПТӘШ

**Башҡорт телендә "иптәш" тигән матур һүҙ бар. Уны бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ, һөйләшкәндә йыш ҡына ҡулланабыҙ. Тик бына уның тәрән мәғәнәһе тураһында күп кеше уйлап та бирмәйҙер. Ә уйлап ҡараһаң, был һүҙ беҙҙең халыҡтың төплө, тәрән аҡылының бер сағылышы бит. Урыҫсаға ул "товарищ", тип тәржемә ителә. Ике тел, ике мөхит һәм ике донъяуи ҡараш сағыла "иптәш" һәм "товарищ" тигән һүҙҙәрҙә. Уның "товарищ" тигәне лә урыҫ теленә төрки телдәренән ингән. Әлегә "товарищ" тигәнен ситкә ҡуйып, "иптәш" тигәненә әйләнеп ҡайтайыҡ.**

Башҡорт телен белгән кеше телебеҙҙә "ип", "ипле" тигән һүҙҙәр барлығын яҡшы белергә тейеш. "Иптәш" һүҙендә лә ошо "ип", "ипле" тигән һүҙҙәрҙәге бер үк "ип" тамырын күрәбеҙ. Бында "иптәш" һүҙе "ип" һәм "-тәш" ялғауысынан тора. Телебеҙҙә ошо принцип буйынса төҙөлгән һүҙҙәр ярайһы уҡ күптер, мәҫәлән, "юлдаш" һүҙе лә ошо уҡ принцип буйынса төҙөлгән "юл" һәм "-даш" ялғауысынан торған һүҙ.

"Иптәш" тигәндә башҡорт үҙенә дуҫ һайлағанда "ипле, тәүфиҡле, инсафлы" кешене һайлаған", тип аңларға кәрәк.

Көндәлек тормошта йыш ҡына ҡулланылған, артыҡ иғтибар ҙа итмәгән бер генә һүҙ, ә халыҡтың холҡон аңларға мөмкинлек биргән ниндәй тәрән мәғәнә йәшерелгән ул һүҙҙә. "Үҙеңә дуҫ-иш һайлағанда яңылышып ҡуйма, яҡшы кешене һайла", тигән бик тә тәрән мәғәнәле, халыҡтың юғары әхлаҡи йөҙөн күрһәтеүсе һүҙ.

Башҡорттоң һәр һүҙе, әйтеме, мәҡәле халҡыбыҙ үҙенең тарихи юлында күргән, кисергән ваҡиғаларҙың мәғәнәһен сағылдыралыр һәм шул үткәндәрҙе аңларға ярҙам иткән асҡыстыр. Әйҙәгеҙ, ошо байлыҡты һаҡлайыҡ, арттырайыҡ һәм киләсәк быуындарға шундай уҡ матур килеш тапшырайыҡ.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

✓ *Бөрйән ырыуы ауылдары Һаҡмар йылғаһының үрге ағымында, Ирәндек һыртының ике яғы буйлап, Баймаҡ, Әбйәлил һәм Хәйбулла райондарында, Ағиҙел йылғаһы үҙәнендә, хәҙерге Бөрйән районы ерҙәрендә урынлашҡан.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

**Бөрйән ырыуының килеп сығышы ифрат ҡыҙыҡлы, ул башҡорт халҡының этногенезында айырым урын биләй. Бөрйәндәрҙең боронғо тарихи тамырҙары Урта Азия, Кавказ һәм Көнсығыш Европа тарафтарынан Көньяҡ Уралғаса таралып китеп, этнографик һәм тарихи тикшеренеүҙәр өсөн күп төрлө мөмкинлектәр ҡалдырған. Яҙма сығанаҡтар, мифология (легенда-риүәйәттәр), археология, палеогенетика һәм геногеография материалдары бөрйән тарихын асыҡларға, уның дөйөм башҡорт тарихындағы урынын билдәләргә ярҙам итә.**



# БАШҠОРТ ЙӘНЛЕ БӨРЙӘНДӘР БЕҘ!

Шул уҡ ваҡытта VII - IX быуаттарҙағы Византия, әрмән һәм Сирия авторҙары Кавказдағы Бурджан иле йәшәгән территорияла Берзилия (Берсалия) исеме менән аталған ил хаҡында ла яҙа. Византиянан Феофан (IX б.) "Берзилия төпкөлөнән, беренсе Сарматиянан, бөйөк хазар халҡы сыҡты", - тип яҙһа, VII быуатҡа ҡараған "Әрмән географияһында" һундар батшалығында, Кавказ тауҙарына яҡын урында, уларҙың Вараджан ҡалаһы булыуы теркәлгән. Моисей Каганкатвацыҙың "Албан тарихында" Дербенттан төньяҡтараҡ урынлашҡан гүзәл Варачан ҡалаһы булып, унда һундарҙың бөйөк кенәзе йәшәүе хаҡында мәғлүмәт бар. Иран шаһы Ануширван тап ошо заманда Кавказдағы Бурджанға һөжүм итә лә инде. Ибн әл Асир ошо хаҡта былай тип яҙа: "Уның эштәре көйләнгәс, ул Фирғәнәгә һәм Бурджанға яу асты, Бурджандан ҡайтҡас, Шабиран, Маскат һәм Баб әл Абваб ҡалаларын тәҙөттө. Был ҡала "ҡапҡа" тип атала, сөнки ул тауҙар юлында урынлашҡан". Бынан Берзилия (гәрәптәрҙә - Бершалия, Берсула) һәм Бурджандың бер үк ил икәнлеген аңлап була.

Тарихсы С. Хәмизуллин был осраҡта бурджан һәм берсула атамаларының боронғо берз/бурз тамырынан яралып, фарсы телендәге "бейеклек" мәғәнәһенә ярашлы, тауҙарҙа йәшәүсе ҡәүемгә ҡарата ҡулланыла башлауын фаразлай. "Бурджан" - тау кешеһе булһа, "бурдж-оглы" йәиһә "берзула" - тау улдарын аңлата булыр. Был ысынбарлыҡҡа тап килһә, бурджандар иран сығышлы булып, алан тип исемләнгән халыҡ менән ҡәрҙәш булып сыға. VI йәшәгән Иоан Эфесский "Сиркәү тарихы"нда Берзилияны аландар иле, тип атай. Башҡорт риүәйәттәренең береһендә башҡорттарға ҡушылып киткән алан-бөрйән ҡәүеме лә иҫкә алына. Гәрәп авторы әд Димашки рустар хаҡында яҙған бер мәғлүмәтендә ошондай юлдар бар: "Был ҡәүем менән Аллан һәм әл Бурджандар сиктәш. Ошо ике халыҡ бер туған икән, тип әйтәләр". С. Хәмизуллин ошо мәғлүмәттәр нигеҙендә берзил-бурджандар тип аталыусы ҡәүемдең сармат-алан донъяһының бер өлөшөн тәшкил итеүе хаҡындағы һығымтаға килә.

Шулай итеп, хәҙерге бөрйәндәрҙең тәү бабалары беҙҙең эраның тәүге быуаттарынан бирле Арал диңгеҙенән Көньяҡ Уралға тиклем һуҙылған киң далала йәшәүсе берсул-бурджан тип теркәлгән ҡәүемдән булған, тип фекер йөрөтөргә була. Боронғо Иран эпосы "Шахнамә"лә легендар туран батшаһы Афрасиабтың ейәненең исеме Бурзевейл булыуы ла ошо фекергә тап килә. Гәрәп тарихсыһы Хишам әл Ҡәлби (IX б.) генеалогияһына ярашлы, Бурсул Хуваризмдың (Хорезмдың) бер туғаны, тип теркәлә. Урта быуаттар аҙағында ла Урта Азияла йәшәүсе бурджандар хаҡында мәғлүмәт бар. XIV быуат энциклопедисы Ибн Фадл Аллаһ әл Умари былай тип яҙа: "Хорезмға йәнәшә Мангышлаҡ тип аталған түңәрәк ер бар; уның оҙонлоғо 5 айлыҡ юлға тиң, киңлеге лә шул тиклем; ул тотошлайы менән даланан хасил, бында күп һанлы бурджан ҡәбиләләре йәшәй".

Күрәһең, сак-сарматтарҙан булған Кангюй массагеттары (турҙар) этник мөхитендә формалашҡан бурджандар II - III быуаттарҙа аландар менән Арал буйҙарынан көнбайышҡа табан хәрәкәт итә башлай. Был Кавказ арьяғында Маскут батшалығын барлыҡҡа килтерә, уның составында берсул-бурджандар ҙа була. Улар Төньяҡ Кавказда VI быуатҡа тиклем иң көслө ҡәбиләләрҙән һаналып, Иран шаһын үҙҙәренә яһаҡ түләп торорға мәжбүр итә.

VI - VII быуаттарҙа фарсы һәм гәрәп гәскәрҙәре Хазар ҡағанатына бер-бер артлы һөжүм итеп тора, һөҙөмтәлә бында нығынған Берзилия/Бурджан кенәзлеге лә тарҡалыуға дусар ителә. Шул ваҡыттан бирле яҙма сығанаҡтарҙа ошо ҡәүем Кавказ тарафтарындағы халыҡтар араһында күренмәй башлай. Бурджан варисҭарының VII быуатта Көньяҡ Урал территорияһына күсеп килеп, ошо урынды төйәк итеүен күҙалларға була. Быны ошо ерлектә асылған турбаслы археологик мәҙәниәтенең Төньяҡ Кавказдағы археологик ҡомарттҡылар менән тап килеүе аша аңлатырға була. VII - VIII быуатҡа ҡараған Өфө ҡәберлектәренән алынған материалдар ҙа турбаслы мәҙәниәтенә тап килә, һәм бында Төньяҡ Кавказдың Кумбулта, Камунта һәм Чмэ ҡәберлектәренә хас булған һыҙаттар ҙа бар. Стәрлетамаҡ эргәһендә асылған Левашов ҡәберлегендә лә Көньяҡ Урал аландарынан ҡалған предметтар табылып, уларҙың Салтов һәм Кавказдағы катакомба ҡәберлектәрендәгенә оҡшаш булыуы асыҡланды. Башҡорт археологы Ф.А. Сөнғәтов белдереүенсә, Өфө-II ҡаласығында табылған, турбаслы мәҙәниәтенә хас ҡомарттҡылар Урал янында формалашҡан һуңғы быуын сарматтары вариҫтарыныҡы булып тора. Турбаслы мәҙәниәте кешеләре урындағы сармат ҡәбиләләре һәм европа һундарының ҡатнашлығында барлыҡҡа килгән, тип иҫәпләнә. Бындағы мәҙәниәткә тап ошо осорҙа Кавказ тарафтарынан күсеп килгән бурджандарҙың туранан-тура ҡатнашлығын, уларҙың тап шул ваҡыттан башлап дөйөм башҡорт этник берлегенә ҡушылып китеүен күҙалларға ерлек бар. Нисек кенә булмаһын, тап ошо осорҙан бөрйәндәрҙең башҡорттар составындағы өр-яңы тарихы башлана.

Бөрйән ырыуы ауылдары тарихи Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында, Һаҡмар йылғаһының үрге ағымында, Ирәндек һыртының ике яғы буйлап, Баймаҡ, Әбйәлил һәм Хәйбулла райондарында, Ағиҙел йылғаһы үҙәнендә, хәҙерге Бөрйән районы ерҙәрендә урынлашҡан. Шулай уҡ Оло һәм Кесе Ыҡ, Юшатыр йылғалары буйында, Көйөргәҙе, Күгәрсен, Ейәнсура райондарында ла, ҡыпсаҡ башҡорттары менән аралаш, бөрйән ауылдары байтаҡ. Дим үҙәнендә, мең ырыуы башҡорттарының аҫаба ерҙәрендә - Дәүләкән, Әлшәй, Миәкә, Стәрлебаш райондары ауылдарында йәшәүсе бөрйәндәр бар. Шулай уҡ Ырымбурҙың Тоҡ-Соран төбәгендә, көнбайышҡа табан китеп, Һарытау һәм Һамар яҡтарындағы ауылдарҙа ла бөрйән ырыуы вәкилдәре йәшәй. Ҡайһы бер иҫәпләүҙәргә ҡарағанда, XX быуаттың 20-се йылдарында бөрйәндәрҙең һаны 64 - 66 мең самаһы булған, хәҙерге ваҡытта был һан 85 мең тирәһен тәшкил итеүе мөмкин.

Этногенетик тикшеренеүҙәр бөрйәндәр генофондының төп гаплогруппаһы R1b-M343 булып, уның 74,5 процентҡа етеүен күрһәтте. Шулай уҡ ошо ырыу вәкилдәре араһында N1b, O, L, G һәм T гаплогруппаларына ҡарағандар бар. Тәүге гаплогруппа Көнбайыш Европа халыҡтарында йыш осрай. Ошо гаплогруппаның R1b-L23 субкладының ике ҙур тармағы - R1b-L51 һәм R1b-Z2103 асыҡланды. Тәүгеһе Көнбайыш һәм Үҙәк Европала таралһа, икенсеһе Көньяҡ-көнбайыш Азия, Кавказ һәм Көнсығыш Европа халыҡтарына хас. Бөрйәндәр R1b-Z2103 тармағына ҡарай. Шулай итеп, көнбайыш европалыларҙың һәм бөрйәндәрҙең боронғо уртаҡ ата-бабалары бынан 6500 йылдар элегерәк йәшәгәне билдәле булды. Шул уҡ генетик субклад археологик ям мәҙәниәтенә ҡараған ҡәберлектәрҙәге кеше һөйәктәренең ДНК-һын тикшергәндә асыҡланды, улар Урта Волга, Ҡаҙағстан территорияларында, шулай уҡ Көньяҡ Уралда табылды. Генетик тикшеренеүҙәр бөрйәндәрҙең ата-бабаларының боронғо һинд-европа һәм иран ҡәбиләләре менән ҡәрҙәш булыуын раҫлай.

Бөрйән ырыуы башҡорттары дөйөм башҡорт тарихында лайыҡлы урын биләй. Башҡорт батырҙары Алдар Иҫәкәев, Ҡаранай Моратов, дәүләт эшмәкәрҙәре Харис Йомағолов һәм Зекериә Аҡназаров, халыҡ сәсәндәре Ғәбит Арғынбаев һәм Хәмит Әлмөхәмәтов, халыҡ яҙыусылары Зәйнәб Биишева, Абдулхаҡ Игебаев, Таңсулпан Ғарипова, атаҡлы ҡурайсылар Кәрим Дияров һәм Ғата Сөләймәнов, ғалимдар Әкрәм Биишев, Салауат Галин, Әнүәр Әсфәндиәров, Хәлил Барлыбаев, композиторҙар Рәүеф Мортазин, Айрат Ҡобағошов, йырсылар Райман Ишбаев, Рамазан Йәнбәков, бейеүсе Рәшиҙә Туйсина һәм башҡа йөҙәрләгән зыялылар Бөрйән ырыуының ғына түгел, бөтөн башҡорт халҡының да данлыҡлы ул-ҡыҙҙары булып танылды, халҡыбыҙҙың матди һәм рухи мәҙәниәтенә байтаҡ өлөш индерҙе.

**Вәлиәхмәт БӘЗРЕТДИНОВ** әҙерләне.
(Аҙағы. Башы 28-се һанда).

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ТУПРАҠ АЛҺАҠ, ҠАЛАБЫҘ...

## Башҡорттоң һабаҡ алғаны

Күреүебеҙсә, ергә үтеп инеү, уны үҙләштереүҙең, уға хужа булып китеүҙең ысулдары әрмәндәрҙә лә, йәһүдтәрҙә лә - бер үк. Хәҙер үҙебеҙгә әйләнеп ҡайтайыҡ. Әле үрҙә миҫалға килтерелгән әзери-әрмән, гәрәп-йәһүд араһындағы фажиғәле талаш-тартыштарҙың сәбәбе ер менән бәйле булған кеүек, Башҡорт тарихының да иң ҡанлы биттәре ергә талаш менән бәйле. Беҙҙең ерҙәрҙә лә килмешәктәр тәүҙә әҙ була. Уларҙы башҡорттар ҡолас йәйеп тигәндәй ҡаршы ала, урынлашырға, нығынырға ярҙам итә. Сөнки ере күп башҡорт үҙенә ниндәй ҡурҡыныс янағанын әле аңламай ҙа. Нығынып, көстәрен тойғас, яңы күсенеп килгәндәр тештәрен күрһәтә башлай. Бында уларға батша властары ла ярҙам итә. Башҡорттар Рәсәйгә үҙҙәре теләп ҡушылһа ла, батша властары уларға бер ҡасан да ышанмай, гел шикләнеп ҡарай, башҡорт ерҙәрен нисек тә булһа Рәсәй дәүләтенә нығыраҡ бәйләү тураһында уйлай. Шуға күрә лә башҡорт ерҙәренә күпләп икенсе халыҡтарҙы күсереү ягын ғына ҡайғырта. Сөнки улары ерҙе урыҫ батшаһынан алғас, уға йәне-тәне менән хеҙмәт итәсәк бит. Властар һәр саҡта ла килмешәктәр яҡлы булып ҡала, сөнки улар властарҙың таянысына әйләнә.

XIX быуатта башҡорт үҙ ерен күпләп һата башлай һәм әллә күпме еренән ҡолаҡ ҡаға. Ер һатыуға ҡаршы булған күпме ир-егеттең башы властар тарафынан төрмәләрҙә, һөргөндәрҙә серетелә. Уларҙың аяныслы яҙмышы тураһында халҡыбыҙ күпме йырҙар сығарған. Беҙ үҙебеҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың ерҙәрен арзанға ғына (бушлай, хатта бер нисә әсмуха сәйгә, тип әйтерлек) һатып бөткәндәренә аптырай инек. Быны тағы шул көндәр яңынан алдыбыҙға килеп баҫты түгелме? Элек сәйгә алданһалар, хәҙер араҡыға алданыу ҡурҡынысы бар. Араҡы менән күҙе-башы томаланған кешегә бер нәмә лә кәрәкмәй. Ул әллә нәмәһен дә һатып ебәрер. Уға милләт яҙмышы ла, балаларының киләсәге лә кәрәкмәй. Ул тик бөгөнгөһө менән генә йәшәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Онотмайыҡ, 1919 йылда башҡорттар Рәсәйҙең "Башҡортостан" тигән автономиялы республикаһын һәм хөкүмәтен әллә күпме аҫыл ир-егеттәрен юғалтып, ҡандарын дарьялай ҡойоп, ана шул киҫкен ер мәсьәләһен хәл итеү, был донъяла халыҡ булараҡ һаҡланып ҡалыу кеүек ҡырҡыу, аяуһыҙ һорау алдыбыҙға килеп баҫҡанға, үҙ мәнфәғәттәрен яҡлауҙың иң һуңғы сараһы булараҡ төҙөй. Ленин һәм уның әйәрсендәре башҡорттар менән 1919 йылғы Килешеүҙе беҙҙең халыҡтың милли хоҡуҡтарын таныған түгел, килеп тыуған сәйәси хәлдә нисек тә булһа йомшартыу өсөн төҙөй, нығынып алғансы теләһә ниндәй ташламалар яһарға, башҡорттар ҡуйған шарттарға ризалашырға мәжбүр була. Үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булған башҡорттар Ленин большевиктары яһаған революциянан һуң ерһеҙ-ниһеҙ тороп ҡала. Быны беҙ яҡшы беләбеҙ. Ерһеҙ ҡалған халыҡ икенсе халыҡтар араһында ирееп юғалыуға дусар ителә. Тарихтан быға бихисап миҫалдар килтерергә мөмкин. Йәһүдтәр - ситкә ҡыуып таралтылғандан һуң әллә нисәмә быуат үткәс, юғалтҡан ерҙәрен кире ҡайтарып алып, унда үҙ дәүләтен тергеҙеүгә ирешкән берҙән-бер халыҡ. Был - кешелек тарихында берҙән-бер феномен.**

**Беҙгә бүтән халыҡтарҙың тарихында булып үткән ваҡиғаларҙан фәһем алып, уларҙан өйрәнергә кәрәк. Аҡыллы кеше сит кеше хатаһында өйрәнә, тиҙәр бит. Тарих тырмаһына ҡабат-ҡабат баҫмайыҡ, халыҡтар тарихы биреп торған һабаҡтар беҙгә лә фәһем булһын. Ер мәсьәләһендә бигерәк тә.**

**Зәкирйән ӘМИНЕВ.**
(Аҙағы).

***✓ Музей комплексы төҙөлә башлауы - үҙе ҙур алға китеш, тип әйтергә мөмкин. Әммә бөгөн бер мәсьәлә тора - матур, яҡшы, Европа музейҙарынан кәм булмаған экспозиция эшләү.***

# Шүлгәнташ ПАРИЖҒА

**Былтыр 17-19 ноябрҙә Париж ҡалаһында Башҡортостан Республикаһы көндәре сиктәрендә "Янғантау" геопаркының, Шүлгәнташ мәмерйәһенең презентацияһы үткәйне. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Мәҙәни мираҫтың күсемһеҙ милкен һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса фәнни-ғәмәли үҙәгенең (НПЦ) әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре, тарих фәндәре кандидаты Гөлсәсәк БҮЛӘКОВА менән "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡарсаулығы директоры Фәүзил МАЛИКОВ тағы ла Францияла булып ҡайтты. Юҡҡа ғына халыҡ, сит ерҙәргә сығып фәһем ал, тимәгән. Сәфәрҙән ниндәй фекерҙәр төйнәгәндәр - ошо хаҡта белешеү маҡсатында уларҙы редакцияға саҡырҙыҡ.**

**Социаль селтәрҙәрҙән мәғлүм булыуынса, һеҙ Дордонь департаментында Шүлгәнташтың ҡаялағы һүрәттәрен һәм "Янғантау", "Торатау" геопарктары презентацияһын күрһәтеп, Шүлгәнташҡа бағышланған күргәҙмә асыуҙа ҡатнашып ҡайтҡанһығыҙ. Был идея нисек һәм ҡасан тыуҙы?**

**Г. Бүләкова:** Былтыр 21 февралдә БР Мәҙәни мираҫтың күсемһеҙ милкен һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса фәнни-ғәмәли үҙәгенә Дордонь департаменты Советы президенты һәм Тарихҡа тиклемге осорҙо өйрәнеү үҙәге президенты Жерминаль Пьеронан Шүлгәнташ мәмерйәһенә һәм "Янғантау" геопаркына бағышланған күргәҙмәлә ҡатнашырға саҡырыу килгәйне. Беҙ яуап биргәндә "Торатау" геопаркын да индерергә буламы икәнен белештек һәм ыңғай яуап алдыҡ. Уларҙа туристик миҙгел 1 июндән асыла һәм шуға ла күргәҙмәне июндә үткәреүҙе планлаштырҙылар. 14 июндә рәсми презентация үткәрҙек, ә 17 июндә инде күргәҙмәне астыҡ, ул 2020 йылдың 20 мартына тиклем эшләйәсәк.

Әлбиттә, французлар Шүлгәнташта үҙҙәрендәге палеолит осоро мираҫы - Везер йылғаһы буйындағы ҡаялағы һүрәттәр, Пон-д'Арк мәмерйәһе, Испаниялағы Альтамир һәм Төньяҡ Испанияның мәмерйәләге палеолит сәнғәте менән уртаҡлыҡтар күрә, уларҙы уртаҡ мәҙәниәт тип һанай. Шуныһы ҡыҙыҡлы: беҙҙә ошо осорға ҡараған һәм ҡаялағы һүрәттәр күпләп тупланған бер генә мәмерйә булһа, уларҙа бик күп һәм барыһы ла тиерлек бер ерҙә урынлашҡан. Беҙ Комбарель, Фон-де-Гом, Ласко 4, Руфиньяк мәмерйәләре менән таныштыҡ. Әлбиттә, беҙгә уларҙың кимәленә етер өсөн ныҡ тырышырға кәрәк.

**Ф. Маликов:** Йыл да ошо провинцияла Европа археологияһы көндәре үтә. Унда бөтә Европа ғалимдары, археологтары йыйыла, гид-экскурсоводтарҙы уҡыталар, халыҡ менән осрашалар. Өс көн барған сара беҙҙең Шүлгәнташ мәмерйәһенең һәм "Янғантау", "Торатау" геопарктарының презентацияһынан башланды. Унда 100-ҙән артыҡ ғалим ҡатнашты: улар Франциянан ғына түгел, төрлө ерҙән йыйылған, шул иҫәптән Мәскәүҙән дә барҙар ине. Бик күп абруйлы ғалимдар менән осрашып һөйләштек. Улар барыһы ла беҙҙең мәмерйә тураһында хәбәрҙар. Палеолит осоро һүрәттәре булыуы һөҙөмтәһендә Шүлгәнташҡа ҡыҙыҡһыныу электән булған, ә бына һуңғы табылған дөйә һыны уларҙың ҡыҙыҡһыныуын тағы ла арттырҙы. Тағы шуны билдәләп китергә кәрәк: Ласконың күсмә экспозицияһы бөтә донъя буйлап йөрөй һәм Францияның Мәҙәниәт министрлығының Тарихҡа тиклемге дәүер үҙәге директоры Женевьев Пенсон әйтеүенсә, улар ошо Шүлгәнташта табылған дөйә һүрәтенә бер стенд бағышлаған. Әлеге ваҡытта был күргәҙмә Мюнхенда. Уның графигы билдәләнгән һәм уны Башҡортостанға ла килтерергә теләйҙәр. Ғөмүмән, улар мәмерйәләрҙе һеҙҙеке, беҙҙеке тип ҡарамай, дөйөм мәҙәниәт, донъя мираҫы тип ҡабул итә һәм нисек тә булһа ярҙам итергә тырыша. Был ярҙам ЮНЕСКО исемлегенә нисек инергә, ниндәй ғилми эштәр алып барырға кәрәклеге мәсьәләләренә лә ҡағыла һәм беҙгә ошо ярҙамды тойоу бик ҡыуаныслы. Һуңғы төҙөлгән Ласко-4 тигән музей комплексына ғалимдарығыҙ, белгестәрегеҙ менән килегеҙ, беҙ һеҙгә барыһын да аңлатып, ниндәй хаталарҙы ҡабатламаҫҡа икәнен һөйләрбеҙ, күберәк йөрөгөҙ, үҙегеҙҙең генә ҡаҙанығыҙҙа ҡайнамағыҙ, тип торалар.



*Туризмды матурыраҡ, мауыҡтырғысыраҡ итеп ойошторорға мөмкин. Беҙ Ласкола булдыҡ, тәҡдим ителгән продукция ассортименты шул тиклем күп - барыһын да һатып алғы килә. Ябай турау таҡталарынан алып балалар өсөн дә, ололар өсөн дә бөтөн нәмә бар, улар матур итеп эшләнгән. Иҫтәлеккә, бүләккә йәнең теләгән сувенирҙы алырға була. Улар менән сағыштырғанда беҙҙә бер нәмә лә юҡ. Әлбиттә, магниттар һатыла, әммә уларҙы үткән быуат тиергә мөмкин.*

**Башҡортостанда, аныҡлап әйткәндә, Бөрйән районында музей комплексы булдырыу идеяһы бөгөн нисек тормошҡа ашырыла, ниндәй проблемалар бар?**

**Ф. Маликов:** Музей комплексы төҙөлә башлауы - үҙе ҙур алға китеш, тип әйтергә мөмкин. Әммә бөгөн бер мәсьәлә тора - матур, яҡшы, Европа музейҙарынан кәм булмаған экспозиция эшләү. Әле уның буйынса Рәсәй кимәлендәге белгестәр менән фекер алышыуҙар, һөйләшеүҙәр, кәңәшләшеүҙәр, бәхәстәр бара, концепция төҙөлә. Беҙҙең вариант саҡ ҡына айырылырға ла мөмкин, сөнки Ласкола мәмерйәнең һүрәттәр булған өлөшөн тергеҙгәндәр, йәғни мәмерйәлә нимә бар, шуларҙы музей комплексы эсендә тулыһынса булдырғандар. Уларҙың мәмерйәләре ҙур түгел, ә беҙҙеке бейек, ҙур, һүрәттәр ҙә төрлө урындарҙа эшләнгән, шуға беҙ бөтөн мәмерйәне күрһәтә алмайбыҙ. Әммә былтыр уның тулы сканын эшләнек, әле Европаға ла тәжрибә рәүешендә дөйә һәм мамонт һүрәтен 3D принтерҙа эшләп алып барҙыҡ. Кемдәр һүрәттәрҙе күрҙе, ҡараны, барыһы ла моделдәрҙе алып барып еткергән өсөн ихлас рәхмәттәрен белдерҙе, сөнки улар төп нөсхә һымаҡ күренә.

Беҙгә, әлбиттә, музейҙы төҙөп бөтөү, экспозицияны асыу менән генә уларҙың кимәленә етеүе бик ауыр, ни өсөн тигәндә, Хөкүмәт, Дордонь, ҡала хакимиәттәре, ҡунаҡханалар, кафелар, хеҙмәтләндереү тармағы барыһы бергә эшләй. Хатта Мәҙәниәт министрлығында Археология бүлеге бар, ул тап мәмерйәләр өсөн яуаплы. Шуға беҙ уларҙың тәжрибәһен файҙаланып, мөмкин булғанса эшләргә тейешбеҙ. Әлбиттә, бөгөн эш бармай тип әйтеп булмай, газ үтә, юлдар һалына. Был Бөрйән районы, Шүлгәнташ өсөн ҙур эштәр.

Музей комплексы төҙөлөп, туристар килә башлағас, эргә-тирәләге ҡунаҡханалар, кафелар бизнес эшләргә, күңел асыу урындары ла булырға тейеш. Хатта халыҡ та үҙенең өйөндә ҡунаҡхана формаһында урындар эшләп, туристар өсөн шарттар тыуҙыра ала. Дордонь провинцияһының моделен бер нәмәһен үҙгәртмәй Бөрйән районына күсерһәк тә хаталанмабыҙ, бары тик файҙа ғына буласаҡ. Сөнки ЮНЕСКО-ның мәҙәни мираҫ исемлегенә инеп, Европа кимәлендәге туристар Башҡортостанға килә башлаһа, шундай уҡ кимәлдәге сервис кәрәк буласаҡ.

**Г. Бүләкова:** Францияның Дордонь провинцияһында халыҡ туризм менән үҙе ҡыҙыҡһына, улар шунан килем алып йәшәй. Беҙгә французлар кимәленә етергә йыраҡ әле. Күргәҙмәгә лә хатта ауыл халҡы, шунда эшләгән барлыҡ экскурсоводтарҙың килеүе лә күп нәмә хаҡында һөйләй. Ундағы халыҡ мәмерйәләрҙең баһаһын белә, аңлай. Һәм улар өсөн ниндәйҙер башҡа ил менән сағыштырыу ҡыҙыҡ. Дордонда 200-ләп мәмерйә иҫәпләнә, 80 проценты - шәхси милектә. Шуны улар быуындан-быуынға тапшырып килә, үҙҙәре лә, балалары ла археология менән ҡыҙыҡһыналар, туризмды үҫтереү буйынса көс һалып эшләйҙәр.

**Беҙҙә, Башҡортостанда, шундай кимәлгә етеү өсөн, тимәк, халыҡтың туристик мәҙәниәтен үҫтерергә, туристик аңын күтәрергә кәрәк...**

**Ф. Маликов:** Әлбиттә. Бөгөн туристар районға ла, халыҡҡа ла файҙа килтерергә тейеш. Әйтәйек, Шүлгәнташ мәмерйәһенә 35-40 мең кеше килә икән, уның 15 меңе тирәһе бер тапҡыр булған һәм, йылғанан ағырға йәки былай ғына ял итергә килеп, мәмерйәгә инмәйенсә үтеп китә. Уларҙың килеүенән файҙа юҡ, сөнки гид саҡырылмай, хеҙмәтләндерелмәйҙәр, йәғни улар "ҡырағай" турист булып йөрөй һәм районға аҡса инмәй. Мәҫәлән, йылғанан ағыуҙы ойошторған 3-4 ойошма бар, шулай уҡ Белорет районынан, Учалынан, Өфөнән дә интернет аша төркөмдәр йыялар ҙа, машина менән алып барып, палаткаларын ҡуялар, үҙҙәренең катамарандарында халыҡты йылға буйлап ағыҙып, аҡса алып ҡайтып китәләр. Шуға хәҙер шундай шарт ҡуйырға кәрәк - туристарға хеҙмәт күрһәткән эшҡыуарҙар мотлаҡ шул райондың һалым органдарында теркәлгән булырға, ә туристарҙан районға файҙа килтерергә тейеш. Бөрйән районы халҡы бөгөн һөйләгәндәргә, киләсәктә үҙҙәрендә Европалағы кеүек буласағына ышанып етмәй, әлбиттә. Шуға күрә улар араһында мәғлүмәт-аңлатыу эштәре алып барырға кәрәк. Шулай уҡ һәр бер Бөрйән районы кешеһе туристар менән итәғәтле итеп һөйләшергә, матур итеп ҡабул итергә, территорияһы ла таҙа, матур, бер сүпһеҙ булырға, ошо бөтә эште ул үҙенең бурысы итеп ҡуйырға тейеш, сөнки ул ни тиклем үҙен яҡшыраҡ күрһәтһә, бөтөн эш комплекста барһа, туристар ҙа киләсәк. Бының өсөн район хакимиәте халыҡ менән эшләргә, эшҡыуарҙарҙы йыйып, семинарҙар үткәрергә, икенсе урындарға алып сығып күрһәтергә һәм шундай мәғлүмәти-практикумдар күберәк булырға тейеш.

**Г. Бүләкова:** Туризмды матурыраҡ, мауыҡтырғысыраҡ итеп ойошторорға мөмкин. Беҙ Ласкола булдыҡ, тәҡдим ителгән продукция ассортименты шул тиклем күп - барыһын да һатып алғы килә. Ябай турау таҡталарынан алып балалар өсөн дә, ололар өсөн дә бөтөн нәмә бар, улар матур итеп эшләнгән. Иҫтәлеккә, бүләккә йәнең теләгән сувенирҙы алырға була. Улар менән сағыштырғанда беҙҙә бер нәмә лә юҡ. Әлбиттә, магниттар һатыла, әммә уларҙы үткән быуат тиергә мөмкин. Беҙ туризмды ойоштора, уны матур итеп күрһәтә белмәйбеҙ. Был өлкәлә ныҡлап уйларға, башҡаларҙан яҡшыраҡ итеп ойошторорға өйрәнергә кәрәк, ул ваҡытта туристарҙы ла ылыҡтыра аласаҡбыҙ.

Мин уҡыған ваҡытта шулай тигәйнеләр: "Ведь в музее, как и в любом другом учреждении культуры, "засчитывается" только вторичное посещение. Факт повторного прихода в музей означает превращение посетителя в публику". Күп осраҡта, ысынлап та, үтеп барышлай, ниндәйҙер транспорт көткәндә ваҡыт уҙғарыу өсөн, йәки кемгәлер күрһәтер өсөн генә киләләр. Музейға икенсе тапҡыр килгән кешенең, тимәк, ҡыҙыҡһыныуы бар. Был һәр тармаҡҡа ла ҡағыла. Кеше икенсе тапҡыр килһен, үҙе менән тағы ла кемделер килтерһен өсөн уны ҡыҙыҡһындырырға кәрәк.

**Шүлгәнташ инде нисәмә йылдар ЮНЕСКО-ның мәҙәни мираҫы исемлегенә инергә дәғүә итә, хәҙер уға "Янғантау" һәм "Торатау" геопарктары ла өҫтәлде. Был процедура ни өсөн оҙаҡҡа - йылдарға һуҙыла һәм бының сәбәптәре нимәлә?**

**Ф. Маликов:** Беҙҙең объекттарҙы Рәсәйҙең башҡа төбәгендәге объекттар менән сағыштырып булмай, сөнки Шүлгәнташ - ул палеолитик осорҙан ҡалған мираҫ. Процедураларға килгәндә, ҡаялағы һүрәттәр буйынса талаптар ныҡ ҙур һәм бик юғары. Беҙ ауыр юлды һайланыҡ, сөнки 2012 йылда ҡатнаш тәбиғи-мәҙәни мираҫ номинацияһына заявка бирелгәйне, әммә Европа ғалимдары, ЮНЕСКО белгестәре менән кәңәшләшеп һөйләшкәндән һуң, был юл менән

**✓ *Быйыл йәй башында Бөрйән районы һабантуйында ла Радий Фәрит улы менән осрашыу булды, уға үҙебеҙҙең экспозицияны күрһәттек, мәмерйәлә эшләнгән эштәр менән таныштырҙыҡ. Хөкүмәт яғынан яҡлау таптыҡ.***

барһағыҙ, үтә алмайһығыҙ, сөнки улар икеһе ике төрлө статус, тип аңлатты. Шуға 2018 йылдың башында заявканы үҙгәрттек. Әммә шул йылдар араһында 2014 йылда ЮНЕСКО белгестәре килгәндә: "Беҙ һеҙгә бында аңлата алмайбыҙ, үҙегеҙ барып, үҙ күҙҙәрегеҙ менән күрегеҙ", - тип белдерҙеләр. Хәҙер талаптар йылдан-йыл көсәйә, ныҡ тикшерәләр. Беҙ Европалағы коллегаларыбыҙҙың кәңәштәрен иҫәпкә алып, мәмерйәне таҙартыу, музей комплексы төҙөй башлау, датировкалар эшләү, мониторинг ҡорамалдары алыу, дөйәне табып, уның 3D һүрәтен эшләү кеүек ҙур эштәр башҡарҙыҡ, әммә ғалимдар менән эшләргә һәм күп фәнни баҫмалар нәшер итергә лә кәрәк.

# БАРЫП...

## мәмерйәһен күрһәттек

Бая әйткәнемсә, 2018 йыл аҙағында номинацияны үҙгәртеп, икенсе досье эшләнек. Рәсәй Федерацияһының Мәҙәниәт министрлығында уны күп эксперттар тикшерҙе, үҙҙәренең тәҡдимен әйтте, ҡарашын белдерҙе. Башҡортостан белгестәре эшләй алған бөтөн нәмәләрҙе эшләттек, әммә тар өлкә белгестәре лә бар һәм уларҙы Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән - Кемерово, Новосибирск, Мәскәүҙән йәлеп иттек, симпозиумға саҡырҙыҡ, яңы эшсе төркөм төҙөнөк. Әле иҫкәрмәләрҙә әйтелгән етешһеҙлектәрҙе төҙәтәбеҙ. Барыһы ла һәйбәт барһа, йыл һуңында номинацион досьены Францияға ебәрәсәкбеҙ. Унда белгестәр ҡарап, Алла бойорһа, 2021 йылдарҙа, бәлки, исемлеккә инеп тә китербеҙ тип өмөтләнәбеҙ. Рәсәйҙән йыл һайын бер объект ЮНЕСКОға үтергә тейеш. Быйыл Псковтың 17 һәйкәлдән торған ансамбле инде. Хәҙер Рәсәй буйынса сиратта беҙ беренсе булып торабыҙ. Был шулай уҡ ҙур яуаплылыҡ та, сөнки Шүлгәнташ мәмерйәһе Рәсәй кимәлендә ҡаяла палеолит дәүере һүрәттәре күпләп һәм беҙҙең осорғаса һаҡланған беренсе ҙур объект, шуға илдең барлыҡ ғалимдары күҙәтә, тикшерә, ярҙам итә.

Был юлы ла беҙ ҡурай, ҡымыҙ алып барҙыҡ. Ҡымыҙҙы - ҡала мэрына, ҡурайҙы Тарихҡа тиклемге дәүер үҙәге президенты Жерминаль Пероға бүләк иттек. Ул хатта, Башҡортостанға барғас, ҡурайҙа уйнаясаҡмын, шуға тиклем өйрәнәсәкмен, тип вәғәҙә бирҙе.

Аҙыҡ-түлектән тыш, дөйәнең һәм мамонттың 3D һүрәттәрен (1х1 метр) эшләтеп, улар самолетҡа алынмай, тигәс, кәңәшләшеп, поезд менән 4 тәүлек барҙыҡ. Поезда Мәскәүгә тиклем ризыҡтарҙы - туңдырғысҡа, Мәскәү поезында һыуытҡысҡа һалдыҡ, Белоруссия сигендә таможня тикшереүе булыр алдынан проводницалар был ризыҡтарҙы сиктән сығарырға ярамағанлығын аңлата башланы. "Беҙгә нисек тә булһа алып барып еткерергә кәрәк", - тибеҙ. "Беҙ иҫкәрттек, үҙегеҙ ҡарағыҙ", - тиҙәр. Таможня тикшереүе тапһа, 50 евро күләмендә штраф һалалар, өҫтәүенә, бөтөн нәмә конфискацияланасаҡ ине. Төн буйына йоҡламаныҡ, ризыҡтарҙы төрлө урындарға тығып, 3D моделдәрҙең артына ла йәшерҙек. Нимәнелер тапһалар ҙа, ҡалғандарын тапмаҫтар, тип өмөтләнәбеҙ. Таможня хеҙмәткәрҙәре купеға

**▸ Башҡорттоң ҡунаҡсыллығы хәҙер бөтөн донъяға билдәле, башҡорт балын да бар ерҙә лә беләләр, башҡорт ҡурайы менән донъяның барлыҡ музейҙары тулғандыр, моғайын. Һәм бына ошо сәфәрегеҙ хаҡында социаль селтәрҙәрҙә презентацияға йыйылыусыларҙы башҡорт милли ризыҡтары менән һыйлауығыҙ хаҡында уҡығайным. Сит илгә аҙыҡ-түлек, бигерәк тә ит-һөт ризыҡтары алып сығыу тыйыла, ә һеҙ нисек алып сыға алдығыҙ?**

**Г. Бүләкова:** Ноябрҙә барғанда милли ризыҡтар алғайныҡ, ҡымыҙ ҙа бар ине, француздарға башҡорт аш-һыуы бик оҡшап ҡалды һәм был юлы, исмаһам, тәмләп ҡарар өсөн генә булһа ла килтерә алмаҫһығыҙмы, тип үтенделәр. Мин ауылға өләсәйемә заказ биреп, эремсек, ҡорот, ыҫланған ҡорот, талҡан эшләттем, сөнки һатыуҙыҡы барыбер икенсе төрлө була. Сәк-сәк, бауырһаҡты әсәйемдән бешертеп алдым. Балдың төрлөһөн, хатта кәрәҙле бал да алып барҙыҡ. Ҡаҙылыҡ та алдыҡ. Ризыҡтарыбыҙ уларға шул тиклем оҡшаны, хатта ҡоротто ҡулдарына тотоп, яйлап, тәмләп ашап йөрөнөләр. Өҫтәлдә бер нәмә ҡалмауы күңелгә шундай рәхәтлек тойғоһо килтерҙе.

керәләр ҙә, моделдәр булған ҙур сумкаларҙы күреп, һораша башлайҙар, "беҙҙә шундай мәмерйә бар", тип, тарихҡа төшөп китеп һөйләй башлай. Үҙебеҙ эшләнек, ғалим дуҫыбыҙ бар, шуға бүләккә алып китеп барабыҙ, тибеҙ. Түшәкмендәрҙәрҙе, кейемдәрҙе барыһын да тотоп ҡарап сыҡтылар, әммә бер нәмә лә тапманылар. Белорустар тикшереп үткәс, Польша сигендә тағы ике тапҡыр тикшереү үттек. Ингән береһе һүрәттәргә төртөп күрһәтеп, нимә икәнен һорай, Фәүзил Әлфир улы һәр береһенә яйлап ҡына тағы һөйләй. Аллаға шөкөр, шундай ҙур теләк булдымы икән - бөтөн нәмәне иҫән-имен алып барып еткерҙек.

**▸ Ҡабат музей темаһына урап ҡайтҡанда: алда ҙур күләмле эш тора, уны йырып сығыу өсөн хөкүмәт, дәүләт яғынан да ярҙам кәрәк. Әммә күп осраҡта нимәнелер тормошҡа ашырыусылар менән власталарҙың да, йәмғиәттең дә фекере тура килмәй, йәғни улар өлгөрөп етмәгән була һәм идея инициатива кимәлендә генә туҡталып ҡала. Башҡортостан етәкселеге был эштәрҙең мөһимлеген аңлаймы?**



**Ф. Маликов:** Әлбиттә, 2014 йылда ЮНЕСКО вәкилдәре килеп, Хөкүмәт етәкселәре, төрлө ведомство вәкилдәре менән осрашып ҡайтты, әммә ул ваҡытта беҙ үҙебеҙ ҙә нимә эшләргә кәрәклеген белмәй һәм аңламай инек. Хәҙер генә уларҙың ни өсөн үҙҙәренә барып, күреп ҡайтыуыбыҙҙы теләгәндәрен аңланыҡ, шунан һуң ғына эш планын төҙөнөк, етәкселеккә аңлатыу эштәре алып барабыҙ. Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров беҙҙе саҡырып алып һөйләште, Башҡортостан Республикаһының Мәҙәни мираҫтың күсемһеҙ милкен һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса фәнни-ғәмәли үҙәге директоры Данир Әхмәҙи улы (Ғәйнуллин) уға тотош лекция һөйләне тиергә лә була. Быйыл йәй башында Бөрйән районы һабантуйында ла Радий Фәрит улы менән осрашыу булды, уға үҙебеҙҙең экспозицияны күрһәттек, мәмерйәлә эшләнгән эштәр менән таныштырҙыҡ. Хөкүмәт яғынан яҡлау таптыҡ, тип әйтә алам. Район хакимиәте яғынан да ҡаршылыҡтар юҡ. Хәҙер тағы ла ҡанатланып киттек, экспозиция буйынса ла күрһәтергә проекттар әҙерләйбеҙ.

Беҙгә хәҙер ҡыҙыҡһынған һәм Бөрйән районында йәшәп, мәмерйә буйынса эшләгән ғалимдар, заманса фекерләгән, заманса эшләгән йәштәр, эшҡыуарҙар кәрәк. Кадрҙар мәсьәләһе киҫкен тора, тип әйтергә була, сөнки әлеге ваҡытта йәштәр ҡалаға китергә тырыша, әммә үҙгәрештәр булып, районда эшләүҙең абруйы артһа, улар кире ҡайтыр тип уйлайым. Ваҡыт үтеү менән ҡунаҡханалар, төрлө туристик объекттар төҙөләсәк һәм уларҙы хеҙмәтләндерергә кешеләр кәрәк буласаҡ.

***Беҙгә хәҙер ҡыҙыҡһынған һәм Бөрйән районында йәшәп, мәмерйә буйынса эшләгән ғалимдар, заманса фекерләгән, заманса эшләгән йәштәр, эшҡыуарҙар кәрәк. Кадрҙар мәсьәләһе киҫкен тора, тип әйтергә була, сөнки әлеге ваҡытта йәштәр ҡалаға китергә тырыша, әммә үҙгәрештәр булып, районда эшләүҙең абруйы артһа, улар кире ҡайтыр тип уйлайым. Ваҡыт үтеү менән ҡунаҡханалар, төрлө туристик объекттар төҙөләсәк һәм уларҙы хеҙмәтләндерергә кешеләр кәрәк буласаҡ.***

**▸ Кадрҙар тигәндән, был музей комплексы халыҡ-ара кимәлдә буласаҡ, тимәк, унда төрлө телдәр белгән экскурсоводтар ҙа, сервис хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре лә талап ителәсәк. Әле үк уларҙы әҙерләү буйынса маҡсатлы эш алып барыламы?**

**Ф. Маликов:** Кадрҙарға төп талап булып башҡорт, рус теле һәм мотлаҡ инглиз телен белеү тора, кемдер француз телен дә яҡшы белһә, насар түгел, сөнки объекттар Францияныҡы менән оҡшаш. Улар менән хатлашырға, һөйләшергә кәрәк. Әле БДУ студенттарын төрлө стажировкаларға саҡырабыҙ, райондан кемдәр тарих факультетында уҡып, кире районға ҡайтҡыһы килә - беҙҙең маҡсатлы йүнәлтәмәләр бар. Былтыр Иҫке Собханғолдан бер кеше уҡырға инде. Уны икенсе курстан һуң төрлө сараларға йәлеп итергә тип уйлайбыҙ, сөнки йәштәрҙе белгестәр килгәндә йәлеп итеп, эйәртеп йөрөтмәһәң, улар өйрәнмәйәсәк. Францияның тағы бер ыңғай миҫалы бар: уларҙың экскурсоводтары ғалимдар кеүек һөйләй. Ятлап алып ҡына түгел, ә яратып, үҙҙәре ошо тема менән ҡыҙыҡһынып, теманың эсенә үтеп инеп аңлаталар. Тикшеренеү алып барған абруйлы ғалимдар уларға лекциялар уҡый, уларҙың белемдәрен камиллаштыра. Беҙгә республика кимәлендә шундай курстарҙы ойоштороорға кәрәк.

Ә сервис хеҙмәтенә кадрҙар әҙерләү - ул БР Туризм буйынса дәүләт комитеты компетенцияһына ҡарай. Әлбиттә, беҙ был комитеттың бер структураһы булып торһаҡ та, тарихи-мәҙәни объекттар буйынса БР-ҙың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡҡа ҡарайбыҙ, һәм төп эшебеҙ, төп бурысыбыҙ - ул ЮНЕСКО исемлегенә инеү буйынса ғилми эштәр алып барыу.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы директоры Фәүзил МАЛИКОВ белдереүенсә, "Шүлгәнташ" федераль тәбиғәт ҡурсаулығы һәм республика учреждениеһы булған "Шүлгәнташ" музей-комплексы килешеп һәм законға таянып эшләһен өсөн федераль һәм республика ҡануниәте бурыстарҙы аныҡ айырырға тейеш, сөнки ҡурсаулыҡ тәбиғәтте һаҡлай, ә мәмерйәне, йәғни уның ҡая сәнғәтен түгел. Әле иһә музей комплексы икенсе бурысты үҙенә ала, килгән туристарға күберәк мәғлүмәт биреү, уларҙы таныштырыу, район буйлап 2-3 көнгә йәлеп итерлек объекттарҙы күберәк булдырыу, ҡыҫҡаһы, эште туристарҙың аҡсаһы районда ҡалырлыҡ итеп көйләү хыялы менән йәшәй. Һөҙөмтәһен ваҡыт күрһәтер.**

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Күптәр аңламаны. Көлдөләр. Ситләттеләр. Үҙһүҙлелеге, еңмешлеге, сәнскеле теле, дисциплинаға буйһонмауы арҡаһында ауыр хәлдәргә лә ҡалғыланы, кенә тотоусылар, дошмандары күбәйеүенә лә иғтибар итмәне Рудольф.***



Юлда ҡайтышлай Рудольф берсә ҡулдарын һуҙып йүгерҙе, берсә ырғыны, берсә өйөрөлдө, һөрләкһә, ҡабаттан тороп хәрәкәттәр эшләй башланы. Өҫтөндәге ямаулы бишмәтенең ауырлығын да тойманы.

Ғәҙәттә, быға тиклем "Тиктормаҫ!" тип һуҡранған әсәһе әле бер нәмә лә өндәшмәне.

- Нимә булды уға? - тип һораны, ахыр, Рәзидә.

- Ул торналар менән ҡуша осто, - тине Фәриҙә.

- Ярай, осор ҙа онотор...

Тик Рудольф тәү күргән балетын иҫенән сығарманы. Һәм бер ҡасан да иҫенән сығармаясаҡ.

Тағы күп көндәр шундағы актерҙар булып бейене, ҡат-ҡат бейеп-һикереп туғандарын ялҡытып бөттө. Әсәһе генә гәжәп рәүештә сабырлыҡ күрһәтте. Рудольф йәнә әсәһе эргәһенә килеп баҫты.

- Әсәй, Зәйтүнә аяғын ошолай борҙомо?

- Саҡ ҡына дөрөҫ түгел. Бына ошолайыраҡ итеп...

Малай әсәнең ни тиклем матур хәрәкәт яһай алыуын күреп, ҡысҡырып ебәрҙе.

- Әсәй, һин оҡшатып эшләнең, ҡайҙан беләһең быны?

- Бәй, заманында беҙ, комсомолецтар, халыҡ араһында мәҙәни-ағартыу эштәре алып барҙыҡ. Булды шөғөлләнгән мәлдәр.

- Әсәй, һин бейенеңме?

Фәриҙә моңһоу йылмайып баш ҡаҡты.

- Саҡ ҡына...

- Әсәй, һин дә бейеүсе торна булып тыуғанһың.

- Белмәйем, улым.

- Ә мин беләм! Һинең хыялың булдымы?

- Һинең кеүек саҡта ҡошҡа әйләнеп, берәй утрауға китеп йәшәргә хыяллана торғайным. Бәхет утрауына. Һинең йәшеңдә ата-әсәм үлеп, йәтим ҡалып, аслыҡты, тормош ҡатылығын иртә татығанғамы... Бәхет утрауы теләк кенә булып ҡалды. Ә һинең хыял тормошҡа ашһын.

- Әсәй, кешеләргә яҡшылыҡ эшләүсе торналар ҡайҙа йәшәй? Моғайын, уларҙың айырым бер утрауы барҙыр?

Фәриҙә баш сайҡаны.

- Атайың менән байтаҡ ер-һыу кистек. Бер утрау күргәнем булманы. Һәр хәлдә, бәхет утрауын. Ул хыял ғына.

- Зәйтүнәне торналар бәхетле итте.

- Зәйтүнгөлдө, тигән.

- Юҡ, Зәйтүнәне! Ә тылсымлы торналар бар. Әсәй, ҡара минең торна бейеүемде, - Рудольф аяҡ остарына баҫты ла ҡулдарын күтәрҙе. - Бына ҡалай була ул Уралға ҡайтҡан торна!

- Ошондай һығылмалыҡ миндә лә булды бәләкәй саҡта, үҙемә оҡшағанһың...- тип улын үҙенсә хуплай Фәриҙә ханым.

- Ә мин ниндәй? Мин! - тип һорамайынса түҙмәй иғтибарға эләгергә тырышҡан Рәзидә. Ул килбәтһеҙерәк, кәүҙәгә ауырыраҡ.

Әсә уны ла йыуата.

- Һин атайыңа нығыраҡ тартҡанһың. Дөрөҫөн әйткәндә, һеҙ миңә лә, атайығыҙға ла оҡшағанһығыҙ, балалар.

Рудольф быңдай яуаптан ҡәнәғәт. Сөнки уның атаһына оҡшағыһы килә. Дөрөҫ, атайҙың ниндәй икәнен белмәй малай. Һигеҙ йәш тулды, ә уларҙың күрешкәндәре юҡ. Хәрби кешенең ихтыяры үҙенә бәйләнмәгән, әрме уға ниндәй бурыс ҡуя, шуны иң алда үтәргә тейеш. Ул бары Хәмит Нурыевтың тиҙерәк ҡайтыуын түҙемһеҙлек менән көтә. Атаһы уны яҡлар, терәк булыр тип өмөтләнә. Юғиһә, тиҫтерҙәре араһында буйға иң бәләкәсе, ҡаҡса булғаны өсөн йәберләүселәр етерлек. Туҡмаҡ та эләгә. Уның бейеү оҫталығын атаһы баһалар. Ниндәй икән уның атаһы? Эх, бөтөнләй хәтерләмәй шул!

* * *

- Етте! Бүтән бейеү түңәрәгенә йөрөмәйһең! Тоҡомда булмағанды ҡылана. Кеше алдында сәпәкәй өсөн ҡыуанып, маймыллап йөрөүеңде туҡтат! Һин бит хәҙер пионер!

- Ә фронттан яраланып ҡайтҡан һалдаттарға кем рухи көс бирҙе? Беҙ - уҡыусы балалар. Тап беҙҙең мәктәп унда йыш булды, беҙҙе, бейеүселәрҙе госпиталгә гел саҡырып торҙолар. Нисек кем? Һалдаттар! Үҙҙәре саҡыра ине. Башҡорт бейеүен бейеп бөтһәм, ҡосаҡлап алалар ине. Хәҙер мин белмәгән милли бейеү юҡ, атай.

- Ваҡытлыса был нәмәләр. Ваҡытлыса!

- Мин оҫта бейейем. Быны бөтәһе лә таный.




Атай, уҡытыусым Елена Вайтович үҙе әйтте һиңә был турала. Рудольфты Киров театры эргәһендәге балет мәктәбендә уҡырға ебәрергә тырышығыҙ, тине.

- Иң алда ир һөнәре үҙләштерәһең!

- Минең бейеү түңәрәгенә йөрөүем бер һиңә генә ҡамасаулай.

- Телләшмә!

- Телләшмәйем. Үҙ фекеремде генә әйтәм. Бейеү - минең донъям.

Бына шулай бейеү сәнғәте, уҡыу, өлгәш, тәртип - бөтәһе лә бергә буталды. Улар Рудольфтың тормошонда камил яраша алмай, шуға ла ата менән улы араһындағы тартҡылашыу ҡайбер көндәрҙә өйҙә айырыуса көсәргәнеш тыуҙыра.

Рудольфтың үсмер йылдарында, бигерәк тә уҙаллылыҡҡа ынтылғанда, аңлашылмаусанлыҡ көсәйә генә төштө.

- Мин һиңә асыҡ әйттем. Хәрби юлды һайлайһың, - тине атаһы тағы бер һөйләшеү мәлендә.

- Юҡ. Һуғыш уйыны минең өсөн түгел.

- Улайһа, инженер! Инженерҙар кәрәк тыныс тормошта. Заводтар, фабрикалар тотош ил буйлап төҙөлә! Советтар Союзы ҡеүәтле держава. Шулай булып ҡаласаҡ, тимәк, иң кәрәк һөнәр техника менән бәйле.

- Атай, нисәмә йылдар буйы бер нәмәне тылҡыйһың! Ялыҡманыңмы үҙең дә? Юғары сәнғәтте үҙләштергем килә.

- Балерина!

Атаһы ҡаты ҡулы менән биткә сәпәй. Ғәрлегенән ҡып-ҡыҙыл булған үсмер атылып сығып китә. Ул йүгерә, нимәлер һөйләнә. Шунан туҡтай. Күккә күтәрелеп баға. Унда, бейектә, ҡоштар тубын күргәндәй. "Сыңрау торна" балетын ҡарағандан һуң, ул кешеләргә ауыр саҡта ярҙамға килер торналар барлығына ышанғайны. Хәҙер юҡ. Ул тик ышанырға һәм үҙенсә көрәшергә тейеш.

Бына шулай Рудольф Нуриев ҡасабоҫа бейеү дәрестәрен ала. Ҡасандыр Рауза апаһы уны бейеү түңәрәгенә алып барһа, бөгөн дә яҡлаша. Мәсәлән, атай кешегә: "Рудик математиканан өҫтәмә дәрес алырға китте", - тип әйтә. Сөнки өлкән Нуриев улының математиканан насар өлгәшкәнен белә.

Ата менән ул низағлашҡанда Фәриҙә ике ут араһында ҡала. Төрки ҡатындарына хас булғанса, ул ирен хөрмәт итә, ғаиләлә уның ихтыяры закон булырға тейеш. Шулай уҡ улын ярата, уның ынтылышын аңлай. Ана шуға ҡатындың күҙҙәрендә һағыш. Ул күптән йылмайыуҙы онотто, тик эстән генә һыҙҙы. Йөрәге менән әсәһенең үҙе яғында икәнен һиҙенгән Рудольф атаһының кәмһетеүенә теш ҡысып түҙҙе, үҙенең оло һөйөүенән - бейеү сәнғәтенән ваз кисмәне.

- Беҙҙең бейеү төркөмө бөтөн мәктәптәр араһында еңеүсе булды! Мин башҡорт бейеүен бейенем. Атайым ҡыҙыҡһынманымы?

- Мин Опера һәм балет театрында массовкаларҙа ҡатнашам! Атайыма был яңылыҡ кәрәкмәйме?

- Мине кордебалет артисы итеп алдылар. Ни өсөн атайым риза түгел?

- Мин заводтарҙа халыҡ бейеүҙәрен өйрәтәм. Унда миңә ике йөҙ һум түләйҙәр. Мин үҙем аҡса эшләй башланым. Атайым нишләп ҡаршы булһын, әйеме?

- Мин үҙем эшләп алған аҡсаға Мәскәүгә барып ҡайттым. Һорашманымы атайым?

- Мин декадала ҡатнашам. Солист! Атайым минең балет артисы булғанымды күрһә, барыбер ризалашыр!

Мәскәүҙә үтәсәк башҡорт мәҙәниәте көндәре Рудольф өсөн яңы шатлыҡ бүләк итте. Ҡасандыр уны әсир иткән "Сыңрау торна" уны үҙ әсенә саҡырҙы. Унда бейейәсәк солист ауырып киткәнен ишеткәс, Рудольф һис икеләнеп тормай ошо ролгә үҙен тәкдим итте. Һәм Нурыевты, ролде бер ҙә уйнап ҡарамаған егетте, солист итеп тәғәйенләнеләр!

- Әсәй, минең дебют уңышлы булды!

- Улым, был уңышыңа шатбыҙ! Юҡ-юҡ, атайың ҡәнәғәт, ризаһыҙлыҡ белгертмәне!.

Мәскәү публикаһының алҡышы, тәнҡитселәрҙең итәғәтле мөнәсәбәте егетте яңы осошҡа ҡанатландырҙы. Рудольф үҙенең балет тигән сихри донъяға үтеп инәсәгенә һәм унда лайыҡлы урын биләйәсәгенә тамсы ла шик тотманы. Тылсымлы һандыҡ өс йоҙаҡҡа бикләнгән булһа, бөгөн уның бер биге ысҡынды, һәм Нурыев ҡалғандарын ҡалайтып булһа ла асырға тейеш!

- Әсәй, мине Опера һәм балет театры директоры артист итеп эшкә саҡырҙы. Йәнә лә Ленинград балет мәктәбенә саҡырыу алдым. Мин Ленинградты һайланым.

- Ленинград?..

- Нимә хафаға һалды? Мин һынауҙы уңышлы тотасаҡмын.

- Улым, зинһар был турала атайың белә күрмәһен.

- Атайым? Атайым күптән минең сәнғәткә ынтылышыма битараф.

- Яҙмышыңа битараф булһа, ҡул һелтәгән булыр ине. Инде нисә йылдар ул һиңә бер нәмәне аңлата...

- Мин уның менән һигеҙ йәштә саҡ күрештем. Улын тәрбиәләүҙә саҡ ҡына һуңланы...

- Бәләгә тарытмағайың туғандарыңды. Бәлки, кире уйларһың, Рудил!

- Ә мин үҙемдең Нуриев бөйөк бейеүсе икәнемде раҫлаясаҡмын. Быны өсөн әллә нимәләр талап ителмәгәйе!

Рудольф яуап урынына ишекте шартлатып ябып сығып китте.

Ун ете йәшлек егет Ленинградҡа табан юл алғанда, ышаныс эҙләгәндәй, төпһеҙ зәңгәрлеккә баҡты. Ә күк шундай аяҙ, шундай киңлек, шундай асыҡлыҡ, шундай сикһеҙлек! Ҙур, бөйөк маҡсат хаҡына талпынған Рудольф Нурыевтың ихтыярын һындырырҙай көс юҡ! "Сәнғәт күгенә мин үҙ ҡанаттарым менән күтәрелергә тейешмен. Ҡасандыр һеҙ миңә шуны аңлатҡайныгыҙ, торналарым!"

* * *

- Егет, һеҙ бик сағыу бейеүсе буларһығыҙ йәки был юлдан төшөп ҡаларһығыҙ. Аҙаҡҡыһы дөрөҫкә тура килмәгәйе. - Балет мәктәбенең өлкән уҡытыусыһы Вера Костровицкаяның ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙәре Рудольф өсөн киләсәккә осасаҡ уҡты кереш өҫтөнә һалыуға бәрәбәр ине. Яндың кереше тартылды, һәм уҡ киләсәккә табан атылырға әҙерләнде - Башҡортостандан бары тик ярһыу дәртен тоғро юлдаш итеп алған Рудольф Нурыев балет сәнғәте серҙәренә төшөнөр һәм унда үҙ урынын яулар өсөн арыу-талыуһыҙ бейеү һөнәрен үҙләштерергә кереште. Был юлда, был шөғөлөндә үҙенә ҡамасау итә тип шикләнгән бөтә нәмәне тар-мар итте, туҙыналармы, битәрләйҙәрме, мыҫҡыл итәләреме - тик үҙенекен "ҡыуыуын" белде. Үҙе өсөн кәрәк түгел, тип тапһа, интернаттың ҡаты ҡағиҙәләрен, талаптарын үтәүҙән дә баш тартты. Күптәр аңламаны. Көлдөләр. Ситләттеләр. Үҙһүҙлелеге, еңмешлеге, сәнскеле теле, дисциплинаға буйһонмауы арҡаһында ауыр хәлдәргә лә ҡалғыланы, кенә тотоусылар, дошмандары күбәйеүенә лә иғтибар итмәне Рудольф, бейеүгә лә бейене. Шул уҡ ваҡытта, ҡыҙыу ҡанлылыҡ менән түгел, уйлап эш итә белеүе күп осраҡта уны еңеүсе яһаны ла инде. Ахыр килеп, талантлы педагог А. Пушкиндың класына уҡырға төшөүе балет өлкәһендәге ҙур уңыштарының береһе булды. Ленинград балет театрында Советтар Союзынан йыйылған талантлар уҡыны, ә йәше буйынса инде "карт" тип иҫәпләнгән Рудольф Нурыев шулар араһында өс йыл эсендә аҡылдан яҙырлыҡ хеҙмәте менән профессиональ юғарылыҡҡа өлгәште.

Киров балет театрына Башҡортостан егетенең ҡабул ителеүе тураһындағы хәбәр кемдәр өсөндер йәшен атыуы кеүек тәьсир итте.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Ошо хәтлем итеп Башҡортостанды яратҡан, ул тойғоларын шундай яҡты, мөҡәддәс һүҙҙәр табып иркәләгән, фекер һүҙ сәнғәте аша еткерә алған башҡа шағирҙы белмәйем. Һәр хәлдә, Бабичҡа етә алған юҡ әле!***

*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП…*

**Ҡабатлағандан доға иҫкермәй, ти халыҡ мәҡәле. Шуға күрә халыҡ үҙенең шәхестәре, даһиҙары хаҡында күпме генә һөйләнә лә, йырлаһа ла, был һис кенә лә бер ҡылда көй уйнау кеүек ҡабул ителмәй. Киреһенсә, танһыҡ моңдо төрлө музыка ҡоралдарында уйнауҙы хәтерләтә: сөнки һәр автор теге йәки был шәхес хаҡында үҙ фекерен әйтергә, үҙ ҡарашын белдерергә тырыша. Бер ҡараһаң, Шәйехзада Бабич хаҡында кеше аптыратырлыҡ бер ниндәй яңылыҡ та әйтеп булмаҫ, әммә ҡырҙәлек, алдан тойомлау кеүек сифаттар хас булған был шағирҙы шулай уҡ һәр заманда ла көнүҙәк булырмы икән ни, тигән фекергә киләһең. Хәйер, уйҙарым менән уртаҡлашыу өсөн Ш. Бабичтың ижад донъяһына тағы ла бер тапҡыр күҙ һалырға саҡырам. Ижад донъяһына, тим, унда һүҙ уның шиғриәте хаҡында ғына түгел, ә Бабич ижады усағында һаман да баҙлап ятҡан ете ҡуҙ хаҡында барыр.**

# БАБИЧТЫҢ ЕТЕ ҠУҘЫ

Н. Чернышевскийҙың "Патриот - ул тыуған иленә хеҙмәт иткән кеше, ә тыуған ил - иң беренсе сиратта халыҡ", тигән канатлы һүҙҙәре бар. Эйе, Ш. Бабич ижадының юғары маҡсатлы, халыҡ өсөн йырланған йыр булыуы хаҡында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, фольклорсы-ғалим Әхмәт Сөләймәнов, Бабичевтар шәжәрәһен өйрәнгән тарихсы Әнүәр Әсфәндийәров кеүек күп ғалым оҫталары үҙ һүҙен әйтте. Үҙ сиратымда мин дә 24 йыл ғына йәшәү осоронда үҙен һүҙ, тел, моң, телмәр маһиры итеп танытҡан Шәйехзада Бабичтың ижады аша халҡыбыҙҙың бөгөнгөһөнә күҙ һалырға саҡырам.

Күктәр илсеһе булған Шағирҙы Ваҡыт, Замана, Халҡы тыуҙыра. Сарсап ҡаршы ала башҡорт ере Шәйехзаданың сая, ҡыйыу, ярһыу һүҙен. 1914 йылда Бабич "Халҡым өсөн" шиғырында:

*Ап-аҡ алтын йырҙарымды*
*Йырламайым данлыҡ өсөн,*
*Йырлаймын алтын илем өсөн,*
*Үҙ тыуған халҡым өсөн,* - тип, берсә бөркөттәй ҡанат кирһә,
*Иламайым мин көндәрем*
*Һыҙғаҡ, һыуыҡ һалҡын өсөн,*
*Илайым тик ярлы, меҫкен,*
*Ҡыҙғаныс халҡым өсөн,* - тип ғорур башын эйә. 1915 йылда ул һәр милләттәшен "Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде" тип, мәғәнәле, маҡсатлы яҙмышҡа өндәй. Бер быуаттан һуң да шағирҙың йөрәк ауаздары бөгөнгөбөҙ хаҡында тәҫлә тойола. Башҡорт халҡының донъя аренаһында ла юлы - ул көрәш аша яуланған хәләл майҙан, үр! 1916 йылда яҙылған "Көтәм" шиғыры өмөт бүләк итһә лә, "аҡ көн тыуғанын көтһә" лә, асылда, хәлдәр былайыраҡ була бит:

*Тауҙарына менһәм, ҡырҙа йөрһәм,*
*Балҡый йәннәт нуры - гөлөстан,*
*Меҫкен башҡорт ауылын*
*килеп күрһәм,*
*Аңҡый хәсрәт, үлем - гүрестан,*
*Гүрестандай гәмле ауылдарҙа*
*Ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр,*
*Йәнле мәйеттәрҙең гәмен көйләп,*
*Илап аға Һаҡмар, Яйыҡтар.*

Ә ниндәй хәлдә һуң бөгөнгө башҡорт ауылы? Һандарға, статистикаға туҡталып тормайым, әммә командировкаларға йөрөгәндә, ауылға ҡайтып килгәндә күргәндәрҙән дә сығып фекер йөрөтөүе ауыр түгел. "Ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр" тигән юлдар бөгөнгө ысынбарлыҡҡа тап килмәй, тип кем әйтә алыр: бер ҡараһаң, йәндәре бар, хәрәкәт итәләр, әммә рухтары һүнгән, үләт йоҡоһона бирелгән халыҡ. Белмәйем, ниндәй йөрәк ялҡындары кәрәк икән башҡортҡа үҙенең ниндәй бөйөк милләттең вариҫы икәнен аңлатыу өсөн? Эскәнә эсеп үлеп бөтөп бара халыҡтың. Ниндәй яуҙарҙы, көрәштәрҙе енгән башҡортто ошо бәләкәй генә ялтыр башлы шешә һындырҙы, бөлдөрә яҙҙы, юҡ итә яҙҙы. Шуға күрә, әгәр бөгөн гәм халыҡтың ниәтен республика етәкселеге күтәреп алып, "Айыҡ ауыл" акцияларын иғлан итә икән, был формаль сара түгел, ә һуңлап булһа ла үҙ хәлебеҙҙе аңлауҙан тыуған гәмәлдәр. "Кем өсөн?" тигән киң билдәле шиғырын Ш. Бабич 1916 йылда яҙа: "Ал да сәс нур халҡына!" тигән юлдары һәр милләттәштең рухи маяғы булһа ине лә бит... Ошо булыр беренсе ҡуҙ. Ул беҙҙә дөрләргә әҙерме бөгөн?

* * *

1917 йылда яҙылған "Тупраҡ" шиғырында шундай юлдар бар:

*Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,*
*Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.*
*Тупраҡ китһә, һау бул, донъя,*
*Өҙөлмәктер самабыҙ.*

Ер, тупраҡ - башҡорт халҡы өсөн мөҡәддәс, изге төшөнсәләрҙең береһе. Ашатҡан, кейендергән дә - ер. Хәйер, уның өсөн генә лә түгел, ә кендек ҡаны төшкән ҡара тупраҡта ата-бабалар рухы, хәтере, быуындар бәйләнеше, боронғолоҡ аһәңе һаҡлана. Юҡҡа ғына халыҡта элекке дәүерҙәрҙән үк, Уралды, ерҙе һаҡлағыҙ, тигән васыят телдән-телгә әйтелеп, һаҡланып килмәй, күрәһең. Уралһыҙ ҡалып бара башҡорт, Уралы - урманһыҙ. Тәбиғәт ҡосағында үҫкән, йәшәгән башҡорт - ул тәбиғәт балаһы, ябай йән эйәһе, ә уны тәбиғәттән - урман-тауынан мәхрүм итеү, һәләк итеү менән бәрәбәр.

"Көтәм" шиғырында Ш. Бабич юҡҡа ғына: "Килер микән аҡ көн беҙгә лә, тип, Уралҡайға ҡарап илайым..." - тимәгәндер. Ошо уҡ фекерҙе шағир "Список №9" шиғырында ла дауам итә: "Эй, тыуған башҡорт, әгәр булмаһаң бәдбәхет, Ерҙе һаҡла, ер ҡосаҡла, ер һиңә алтын тәхет". Икенсе ҡуҙҙан осҡон тоҡанырмы башҡорт ерендә? Ер мәсьәләһе ул территориаль билдәләнеш кенә түгел, ә Күктәр тарафынан башҡортҡа бирелгән аҫабалыҡ хоҡуғы. "Урал батыр" эпосында башҡорттоң тап ошо ерҙә яралыуы, халыҡ булып ойошоуы һүрәтләнә, ул бөйөк әҫәр башҡорт телендә яҙылған. Ошо ерҙә беҙҙең нисәмә быуын ата-бабаларыбыҙҙың ҡаны түгелгән, аҫыл һөйәге һеңгән - ә улар иң бөйөк көс. Ана шулар аша бөгөнгө вариҫтар ҡеүәт алып, нисек кенә ҡырһалар ҙа, юҡ итергә теләһәләр ҙә, бар булып йәшәп ята. Тамырҙарҙы, ер менән бәйләнеште, уны заман талаптарына ярашлы документаль яҡтан үҙендеке итеп ҡуйыу юлын хәстәрләргә тейешбеҙ бөгөн. Ә әллә нисәмә гектар ергә 10 мең бирҙеләр тип ҡыуанып ултырырға тейеш түгелбеҙ!..

Ә шағир тыуған еренә, уның тәбиғәтенә, халҡына, хатта һәр бер гөлсәскәһенә ғашиҡ! Ниндәй ягымлы, яҡты, нурлы һүҙҙәр менән иркәләй ул гәзиз ерен! Сайпылып түгелгән хис-тойғоларын шиғыр юлдарына һалып:

*Башҡортостан - гөлбостан,*
*Сөмбөлстан, нурбостан,*
*Былбылстан, рәйханостан...*
*Башҡортостан - йәмбостан...*
*Илһамыстан, шиғырстан,*
*Шунда тыуып, шунда үҫкән*
*Башҡорт атлы арыҫлан!* - тип яҙа. Ошо хәтлем итеп Башҡортостанды яратҡан, ул тойғоларын шундай яҡты, мөҡәддәс һүҙҙәр табып иркәләгән, фекер һүҙ сәнғәте аша еткерә алған башҡа шағирҙы белмәйем. Һәр хәлдә, Бабичҡа етә алған юҡ әле! Улай ғына ла түгел, тыуған ере өсөн Бабич үҙ йәнен фиҙа ҡылырға ла әҙер булыуын һүрәтләгән "Ғәскәр доға"тигән шиғырында:

*Намыҫ өсөн, тәңрем, йәндән кисәм,*
*Килтер вәғәҙә... Ҡәҙрәт ҡулың бир!*
*Башҡортостан иҫән ҡала тиһәң,*
*Бер йәнемә миллион үлем бир!*

**(Дауамы 12-се биттә).**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# БӘНДӘБИКӘ МЕНӘН ЕРӘНСӘ СӘСӘН

Әйек йылғаһының һул яҡ ҡушылдығы булған йылғаның элекке атамаһы нисек булғандыр, хәҙер ул Бәндәбикә йылғаһы тип атала. Ошо йылға буйында Бәндәбикә исемле бик аҡыллы, зирәк, уҡымышлы башҡорт ҡыҙы йәшәгән. Ул яңғыҙы ғына көн күргән. Тирә-яҡтан тәне ауыртҡандар ҙа, йәне ығ ызлағандар ҙа килгән уға.

Бер ваҡыт ҡаты ауырып киткән бер оло кешенән хәбәр килә. Назы йылғаһы буйындағы Үрген ауылынан бала үтенес. Бәндәбикә ат егеп бара ул ауылға. Ауырыуҙы имләп һауыҡтырып, ҡайтырға сыҡҡанда, аты, нимәнәндер өркөп, сығынлай ҙа, йылғаның уртаһында туҡтай ҙа ҡуя. Әмәлгә ҡалғандай, Ерәнсә сәсәндең шул тирәнән ҡайҙалыр китеп барған сағы була. Ул атын тыңлата алмай аптыранған ҡатын кешене күреп ҡала ла йылғаға төшөп, атты туғарып, ярға сығара, шунан арбаны һөйрәп алып сыға.

- Кем булаһың, аҡыллы ҡыҙ? - тип һорай Ерәнсә сәсән.

- Минең исемем башҡасараҡ.

- Һинең аҡылың тотош ҡарашына, йөҙөңә яҙылған. Икенсе исемдең булыуы мөмкин түгел. Ҡайҙан һин? - тип һорай егет.

- Ҡояш байышында бер йылға бар. Беҙҙең йәйләүебеҙ шунда.

- Ҡунаҡҡа барам. Кем тип һорайым һине?

- Минең тирмәм йәйләүҙән ситтәрәк тора. Үҙең дә табырһың. Ҡырҡ һөңгө һөйәлгән уға, - тигән дә үҙен танытмай ҡайтып киткән Бәндәбикә.

Бер аҙҙан Ерәнсә сәсән килә был йәйләүгә. Ҡырҡ һөңгө һөйәлгән тирмәне таба алмағас, йәйләүҙән бер яҡ ситтәрәк торған тирмә эргәһенә бара. Бер кем дә булмағас, иҫле генә килеп, тирмә ишеген аса. Ҡараһа, тирмә эсенә төрлө яҡлап һөңгө һымаҡ һуҙылып-һуҙылып ҡояш нурҙары төшкәнен абайлап ҡала. Был нурҙар кейеҙ тишектәренән төшә икән. Үҙе лә йор һүҙле Ерәнсә сәсән эштең ниҙә икәнлеген - тирәяҡта әүлиәлеге менән дан алған Бәндәбикә тирмәһенә килгәнлеген аңлай. Ипләп кенә ҡайтыу ягын ҡарай. Әммә Бәндәбикәнең аҡыллы ҡарашы уны ташламай, күҙ алдынан китмәй. Йөрәгендә быға са булмаған бер тойғо ярала егеттең. Ул ҡабат китә йәйләүгә. Үҙе кисергән хистәрен аса. Бәндәбикә: "Мин һинән күпкә өлкәнерәк. Мин олоғайған саҡта, һин ир уртаһында ғына булаһың. Килешмәҫ. Ҡарт көнөмдә яңғыҙ ҡалғым килмәй", - ти.

Әммә Ерәнсә сәсән уны бер ваҡытта ла ташламаясағына ышандыра. "Мин ныҡлап уйланғандан һуң килдем. Ниәтемдән кире ҡайтыу юҡ", - ти ул. Улар бик матур йәшәйҙәр. Әммә тәбиғәт ҡанундары үҙенекен итә. Бәндәбикә лә ҡартая, ауырыҡһына башлай. Ә Ерәнсә сәсәндең был ваҡытта Абулхайыр тигән ҡаҙаҡ ханының яуын һүҙ ҡеүәте ярҙамында ҡайтара алыуы менән дан алған сағы. Ул, егеттәрен йыйып, ҡаҙаҡтарға барымтаға бармаҡсы була. Иренең был ниәтен һиҙеп ҡалған Бәндәбикә быға ҡаршы була.

- Һин үҙ илеңдә батыр исемен яуланың. Батырлыҡ янына аҡыл кәрәк. Ил һаҡлаған ирәйеп йәшәр, ил баҫҡан иҙелгә төшәр. Ил баҫыу - беҙҙең гөрөфкә ят. Йәштәрҙе ахмаҡландырма. Насар уйҙан кире ҡайтығыҙ. Ҡаҙаҡта ла батырҙар күп, - ти. Әммә дандан башы әйләнгән Ерәнсә сәсән уны тыңламай. Төндә барымтаға китәләр. Әммә егеттәрҙең байтағы үлә, ҡалғандарын, ҡамауҙа ҡалдырып, хөкөм майҙанына алып киләләр.

Ҡаҙаҡ аҡһаҡалдары былдай хөкөм сығара: "Батырҙар көрәшһен. Башҡорт батыры еңһә, барыһын да ҡайтарырбыҙ. Ҡаҙаҡ батыры еңһә, ҡалғандарын ҡайтарабыҙ ҙа, яу башлаусының йөрәгенә бысаҡ ҡаҙап үлтерәбеҙ".

Ҡаҙаҡ батыры еңгән. Бысаҡ ҡаҙарға әҙерләнгән саҡта Ерәнсә сәсән ҡысҡырып көлөп ебәргән. Батыр ҙа, аҡһаҡалдар ҙа аптырап ҡалған.

- Үлтермәй тор, ни эшләп көлгәнен һорашайыҡ, - тигәндәр аҡһаҡалдар.

- Ҡатыным ошолай булырын иҫкәрткәйне. Хаҡлы булған икән, - тигән Ерәнсә сәсән.

- Ҡатының кем?

- Бәндәбикә.

- Һин Ерәнсә сәсәнме ни?

- Эйе.

- Нимә тине һуң беҙҙең хөрмәтле Әүлиәбеҙ?

- Ил һаҡлау - ҙурлыҡ, ил баҫыу - хурлыҡ, тине. Мин үҙемдән көлдөм.

- Аҡыл эйәһе Бәндәбикә хаҡына һеҙҙе ҡайтарабыҙ, - тигән ҡаҙаҡтар.

Әммә Ерәнсә сәсән ҡайтыуға, Бәндәбикә донъя ҡуйған була. Ерәнсә ни эшләргә белмәй, йөрәк ярһыуына түҙә алмай, көнсығышҡа ҡарай китә. Тыуған ауылына яҡын Кәншәт тауына йән-фарман сабып менә лә, шунан Үргенгә яҡын убанан аты менән ҡуша ташлана.

Был хикәйәт тә беҙҙең ҡыҙыу баш егеттәргә фәһем бирә булыр: һәр аҙымды аҡыл менән үлсәп баҫ, һинең артыңда илең, халҡың, ата-әсәң, балаларың тора икәнен онотма.

✓ *Ана шундай тетрәндергәс тойғо кисереп баға Бабич ҡатын-ҡыҙға! Шағирҙарҙың ҡайһыһы гүзәл затты Аллаһ менән бер тиңдәй күреп сағыштырғаны бар әле! Бары тик Бабич ҡына шулай яҙа ала.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МАТУРЛЫҠ ХАҠЫ

■ Һуңғы ваҡытта сәстәрҙе таҙартыуҙың яңы ысулы - co-washing ҙур популярлыҡ яулай бара. Был осраҡта сәстәрҙе шампунь менән түгел, ә кондиционер менән йыуырға кәрәк. Косметологтар белдереүенсә, бары тик кондиционерҙы ғына йәлләргә ярамай. Ул күбекләнеп торһон тиһәгеҙ, бер аҙ һыу ҡушырға була. Иң мөһиме, кондиционер составында силикон булмаһын. Был ысул көсһеҙ һәм ҡоро сәстәрҙең торошон яҡшырта, уларҙы тарауы еңеләшә. Уның тәьсирен яҡшыртыу өсөн кондиционерға зәйтүн майы, бал, бер-ике тамсы ағас майы йәки бөтнөк өҫтәргә була.

■ Миҙгелдәр алышынған мәлдә мунсаға йөрөгөҙ, тип кәңәш итә табиптар. Мунса был ваҡытта көстәрҙе тулыландырыу өсөн иң яҡшы сара булып тора. Миндек тиреләге, мускулдарҙағы, тире аҫтындағы күҙәнәктәрҙәге ҡан әйләнешен яҡшыртып ҡына ҡалмай, тын юлдарына ла ыңғай йоғонто яһай, бынан тыш, матдәләр алышыныуы тиҙләнә. Миндектән тыш, белгестәр бесән вағы быуының да файҙалы булыуын белдерә. Бесән еҫе һәм ҡайнар быу бактерицид эффектҡа эйә, ул һауалағы һәм тиреләге бактерияларҙы шунда уҡ юҡҡа сығара. Мунсалағы ҡайнар быу һөҙөмтәһендә кеше йышыраҡ һәм тәрәнерәк тын ала башлай, тимәк йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына күнекмә яһала.

■ Асығыуҙың синтетик аналогы грелин яман шеш менән сирләүсе ауырыуҙарҙа йышыраҡ осраған аппетит булмауы проблемаһын хәл итә аласа. Грелин эсәктәрҙә барлыҡҡа килә һәм асығыу тойғоһо өсөн яуап бирә. Японияның Осаки университеты ғалимдары был гормондың эшмәкәрлек механизмын тикшереү һөҙөмтәләре артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусыларға ярҙам итер тигән маҡсатта үткәрә. Әммә әлегә уларҙың хеҙмәте уңышҡа өлгәшмәгән, шулай ҙа был гормон химиотерапия үткәреүселәрҙең тормошон еңеләйтеү мөмкинлеге бирәсәге асыҡлана.

■ Туҡлыҡлы иртәнге аш кешегә көн дауамында төрлө эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн энергия бирә, мейенең дөрөҫ эшләүен тәьмин итә, метаболизмды тиҙләтә. Быларҙың барыһы ла көҙгөн һомғол көйө һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Иртә - тәм-том менән һыйланыу ваҡыты ла, тип белдерә Тель-Авив университеты ғалимдары. Сөнки был ваҡытта матдәләр алышыныуы яҡшы эшләй һәм артыҡ калориялар шунда уҡ янып юҡҡа сыға. Профессор Даниэль Якубович әйтеүенсә, иртән мотлаҡ шоколад ашаһан, көнө буйы татлы ризыҡтар ашағығыҙ килмәйәсәк.

■ Косметик саралар составында булған ҡайһы бер матдәләр организмда туплаНып, уға зыян итеүе, хатта яман шеш кеҫек ауыр сирҙәргә килтереүе ихтимал. "Росбалт" яҙыуынса, күптән түгел АҠШ-ның тауарҙар һәм медикаменттар сифаттары контролдә тотоу буйынса федераль идаралығы ирен буяуының 400 төрөндә ҡурғаш ҡушылмалары тапҡан. Британия ғалимдары ла ауыр металдарҙың косметикаға әйберҙәрендә осрауын белдерә. Ошондай уҡ тикшеренеүҙәр Канадала ла үтә һәм уның һөҙөмтәләре буйынса кеше сәләмәтлегенә зыян килтереүсе ауыр металдарҙы косметика етештереүҙә ҡулланыу тыйыла.

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП…

# БАБИЧТЫҢ ЕТЕ ҠУҘЫ

(Башы 11-се биттә).

* * *

Өсөнсө - күрәҙәлек ҡуҙы - башҡорт ерен ҡурсаларҙай һүҙ оҫталары йөрәгендә яңынан ҡабыныр, тип теләйек. Һиҫкәндерерлек күрәҙәлек кәрәк бөгөн! Бер ҡараһаң, бер ни үҙгәрмәгән кеүек, шул һымаҡ беҙҙең бәләләр:

*Бер әйләнсек ҡамғаҡ*
*төҫлө хәлдәр*
*Быуат аша тағы киләләр...*

Бабичтың "Башҡорт халҡына көйлө хитап"ын уҡырға кәрәк! Бар хикмәт ана шул әҫәрҙә!

* * *

Шағир бөтә рухи халәтен, булмышын, оҫталығын Башҡортостанды өр-яңынан тыуҙырыуға һалырға тырышҡан. Уҙған быуат башында йәш шағир шәхестәр Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Фәйзи Ғәскәров, Шәйехзада Бабич, Әхмәтзәки Вәлиди, әйтерһең, Күктәр тарафынан махсус рәүештә башҡорт еренә, иленә яңы һулыш өрөр өсөн ебәрелгән. "Ҡурайҡайға" шиғырында шағир Шәйехзада:

*Күкрәтеп, геүләп, һайрап, өҙләп,*
*Килде, ҡурай, һайрар миҙгелең,*
*Яҡты уйҙар һалып, дәртен ҡуҙғап,*
*Күккә ашыр йөрәктәр һиҙгереп!* - ти.

Әле генә ул беҙ - ҡурайсылар конкурстары, байрамдары ойошторолоп торғас, меңәр ҡурайсы бер юлы башҡорт көйҙәрен уйнағанын ишеткәс, моңдан назланабыҙ, моңға иҙрәйбеҙ, иркәләнәбеҙ. Ә бит заманында ҡурай уйнау ҙа тыйылған, ҡурайсылар ҙа һирәгәйгәндән-һирәгәйгән булған, шөкөр Хоҙайға, Бабичҡа ҡушылып:

*Килде заман, инде шатлан, ҡурай,*
*Йәмле тауышың илгә яңғыраһын!* - тип әйтәбеҙ.

Дүртенсе: ҡурай ҡуҙының осҡондары бөгөн башҡорт ерендә ялҡын, усаҡ булып ҡабынды. Улар үҙҙәренең боронғо ауаздары менән йәнде имләй, ата-бабалар, тамырҙар менән бәйләнеште нығыта, халҡыбыҙҙы тағы ла оҙаҡ йылдарға, мәңгелеккә Ер шарына бәйләй, шул уҡ ваҡытта ҡанатлы итә. Ҡурайсы егеттәребеҙ Роберт Юлдашев, Ринат Рамаҙанов донъя сәхнәләренә алып сыҡты башҡорт моңон, башҡорт ҡурайын, ҙур еңеүҙәр яуланы. Тәбиғәттә үҫеп үлтырған ябай ҡурай бөгөн музыка ҡоралы ғына түгел, ә заман афәттәренән, сирҙәренән дауалар имгә әйләнде.

* * *

Халыҡты юҡ итергә теләһән, иң беренсе уның ерен, телен, шәхестәрен юҡ итергә кәрәк. Бына ошоға юл ҡуймау тураһындағы иҫкәртеүҙе башҡорт йөрәгендә ҡуҙ итеп тоҡандыра Бабич. Төрки донъяһы ғына түгел, ә Европа, Америка илдәре ғалимдары Әхмәтзәки Вәлидиҙен шәхесен танып, уның бөйөк ғилми хеҙмәттәренә таянып эш итә башлағас, Рәсәйҙә Вәлиди шәхесенә бысраҡ өйөргә тырышыусылар табылды. Уның исемен яньялсылар менән йәнәш ҡуйырға тырышыу башҡорт халҡын һиҫкәндерергә тейеш. Алтынға бәрәбәр беҙгә милләтебеҙҙең



һәр вәкиле, шуға күрә кеше, йәмәғәтселек күҙенән төшһә лә ярай, тип ҡул һелтәп ҡуйырға хоҡуғыбыҙ юҡ. Күп һанлы милләттәр бер-береһенең ҡәҙерен белмәй, сөнки улар күмәк: улар үҙ-ара хәйлә, аҡыл яуы алып бара ла, зыян күрмәйҙәр. Ә беҙ улай булғеләнә, телгеләнә алмайбыҙ. Бабичтың "Көйлә хитаб"ын уҡығыҙ! Шәхестәрҙе һаҡлау, уларҙың фекеренә таяныу тураһында һөйләгән бит Бабич! Дөйөм масса алдынғы ҡарашлы була алмай, ә бына мәғрифәтсе фекерле, алдынғы ҡарашлы шәхестәр тап ошо заманда халыҡ ниндәй йүнәлештә эшләргә тейешлеге хаҡында әйтә!

* * *

Бабичтың йөрәктә ялҡындар дөрләтерлек алтынсы ҡуҙы - ул Мөхәббәт, ир-егет менән ҡатын-ҡыҙ араһында дөрләгән мөхәббәт ҡуҙы. 24 йәшендә ул нимә генә кисереп өлгөргән инде, тип уйлаһағыҙ, яңылышаһығыҙ. Шағир йөрәгенә тотош донъя, Ваҡыт һыя, Мөхәббәт уға - илһам сығанағы. Был хаҡта бына ул нимә ти:

*Кәләмемә күнел енен*
*ҡағылдырған,*
*Тиле күңелдә үҙ юлына*
*абындырған*
*Ике нәмә - әүәле Алла,*
*икенсе - ҡыҙ*
*Бәндәләрҙе ҡөҙрәтенә*
*табындырған.*

Ана шундай тетрәндергәс тойғо кисереп баға Бабич ҡатын-ҡыҙға! Шағирҙарҙың ҡайһыһы гүзәл затты Аллаһ менән бер тиңдәй күреп сағыштырғаны бар әле! Бары тик Бабич ҡына шулай яҙа ала: үҙе әллә кеше, Аллаһ нуры төшкән зат, әллә шиғыр ене ҡағылған йәш йөрәк! Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев уны ҡанатлы Бабич тиһә, мин мөхәббәтле Бабич тип атайым!

* * *

Бабичтың етенсе ҡуҙы - ул баш ҡалабыҙ Өфөгә ҡағылышлы тойғо булыр. Әгәр ҙә "Өфө ҡыҙыҡтары", "Өфө тигеҙһеҙлектәре" тигән мәҡәләләренең аҫтына "1916 йыл" тип яҙып ҡалдырмаһа, авторын, датаһын ҡуймаһа, бөгөнгө хәлдәргә лә ауаздашлыҡ барлығын тойоп булыр ине. "Өфө тигеҙһеҙлектәре" мәҡәләһендә һүҙ милли сәхнә, сәнғәт хаҡында бара. "Өфө ҡалаһына беренсе мәртәбә килгәс тә, ҡаланың тау өҫтөндә соҡорло-саҡырлы бер унайһыҙ ерҙә икәнен күреп, "тигеҙһеҙ" ергә һалынған икән, тинем", - тиеүе еңелсә юмор, үҙ-үҙенә, тормошона сарказм менән ҡараған Бабичтың Өфөгә, Өфөнөң милли сәнғәткә мөнәсәбәте хаҡында һөйләй. "Йәшәһен туған тел - яңы милли сәхнә!" тип тамамлай автор мәҡәләһен. Шөкөр, бөгөн башҡорт фольклоры ла, профессиональ сәнғәт тә - Өфөләрҙең түрендә. Әммә һиҫкәнеү тойғоһо бер ҡасан да зыян итмәҫен автор "Өфө ҡыҙыҡтары" мәҡәләһендә лә бер тапҡыр раҫлай. "Йоҡлата был Өфө, һүндерә был Өфө: эре генә әҙәмдәрҙе лә ваҡландырып ваҡлыҡҡа күндерә Өфө". "Ваҡландыра был Өфө, ағас атҡа атландыра был Өфө, ҡып-ҡыҙыл сырайлы ғына егеттәрҙе ыҫмалаға буяп талпындыра был Өфө..." Әлбиттә, бөгөн Башҡортостандың баш ҡалаһында башҡорт сәнғәте - шиғриәте, йыры, бейеүе, ҡурайы ҙур ҡаҙаныштар яулауын күреп, Шағир сикһеҙ ҡыуаныр ине. Моғайын, ыңғай үҙгәрештәр уның күңел талпыныштары ярҙамында ла тормошҡа ашырылған, ашырыла, ашырылыр. Әммә бер үр яулағандан һуң уның ситенә аяҡты һалындырып ултырһаҡ, Бабич һымаҡ Өфөлә ышыҡ таба алмай йөрөүең дә ихтимал, милләттәш. Ул бит юҡҡа Ырымбур, Темәс, Йылайыр, Ҡыйғаҙытамаҡ тип ашҡынып тормаған. Өфөнөң ҡыйыҡлы йорттары ла үҙ ышығына алһын ине башҡорт балаһын. Беҙ бит әле Ғәрнәти карталарында 76 башҡорт ҡалаһы барлығын күрһәткән милләт!

"Миллионлыҡ мегаполиста Шәйехзада Бабич исемен йөрөтөрлөк бер урам таба алмайбыҙ. Черниковка, Сипайлово, Дим кеүек Өфө төбәктәрендә түгел, ә тап баш ҡаланың үҙәгендә булһын ине ул урам. "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы, "Ҡояшлы" микрорайонында әленән-әле яңы йорттар һалына, урамдар ҡалҡып сыға, моғайын, оҙаҡламай шуларҙың береһе был быуатҡа Бабич исеме менән бағыр! Өфөлә әле лә Бабич өсөн тигеҙһеҙлек хөкөм һөргәндәй", - тип яҙғайным бер мәл 2008 йылда. 1924 йылдың 25 февралендә Башнаркомпростың уҡытыу-тәрбиә биреү комиссияһы Өфөнөң Оло Ильинская урамын Шәйехзада Бабич исеме менән атау хаҡында ҡарар ҡабул итә. Ул урам хәҙер шағирҙың фекерҙәше, Башҡортостан автономияһы атаһы Әхмәтзәки Вәлидиҙең исемен йөрөтә.

Әйткәндәй, бер быуатҡа яҡын ваҡыт көттөк беҙ был көндө: ниһайәт, V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы сиктәрендә Өфөлә бөйөк башҡорт шағиры, дәүләт эшмәкәре, музыкант, телмәр оҫтаһы Шәйехзада Бабичҡа һәйкәл асылды! Был юлдарҙы яҙғанда күҙҙән йәш атылып сыға: беҙ ниндәй бәхетле быуын - Бабичҡа һәйкәл асҡан быуатта йәшәйбеҙ! Ошо яҡты көндөң шаһиты булдыҡ!

Шиғриәт - ул мәңгелек донъя. Бабич ижадына мөрәжәғәт итеп, уның әҫәрҙәре аша уйлы уйын ҡорҙоҡ. Ҡабул ҡылығыҙ! Бәлки, һеҙҙең йөрәктәрҙә ул тағы ла әллә ниндәй ҡуҙҙарҙы тоҡандырыр!

**Лариса АБДУЛЛИНА,**
**Ш. Бабич исемендәге республика йәштәре премияһы лауреаты.**

***✓ Беҙҙең халҡыбыҙ борон-борондан тәбиғәткә яҡын. Шифалы үләндәрҙе яттан белеп, һәр ҡайһыһының файҙаһын күреп йәшәгән, шуға күрә рухи яҡтан да, физик йәһәттән дә ныҡлы булған.***



*ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...*

# ЙЫЛЫ ҺҮҘЕ ЙӘНГӘ ДАУА



**Рәсәйҙең иң яҡшы шәфҡәт туташы ҡайҙа йәшәй һәм эшләй, тип уйлайһығыҙ? Эйе, тап шулай, Башҡортостанда. "Медицина һәм фармацевтик урта белемле иң яҡшы белгес" Бөтә Рәсәй конкурсы һөҙөмтәләре буйынса Күмертау ҡала дауаханаһының Халыҡ-ара муниципаль онкологик үҙәгендә палаталар шәфҡәт туташы булып эшләүсе Гөлфиә Әхтәмова "Иң яҡшы шәфҡәт туташы" номинацияһында ағымдағы йылдың еңеүсеһе тип табылған. Рәсәйҙең 56 төбәгенән конкурсҡа килгән 331 эш араһынан нәҡ уныҡы иң юғары баһаға лайыҡ булған. Ҙур конкурста лайыҡлы еңеү яулаусы Гөлфиә ӘХТӘМОВА менән осрашып әңгәмә ҡорҙоҡ.**

- Көйөргәҙе районының Ҡарай ауылында күп балалы ғаиләлә тәрбиәләндем. Урта мәктәпте тамамлағас, Салауат медицина училищеһының "Шәфҡәт туташы" ("Сестринское дело") һөнәрен үҙләштереп, Күмертау Үҙәк поликлиникаһында эш башланым. 1994 йылдан алып әлеге бүлектә эшләйем. "Үҙенең һөнәрен тапҡан", тиеүҙәре нәҡ минең хаҡта әйтелгән кеүек. Үҙ эшемде яратып башҡарам. Сирле беҙҙең бүлеккә килеп ингәндән алып сығып киткәнсе табип тәғәйенләгән дауалау процесын камил алып барыу минең иңемдә. Пациенттарҙың хәлен күҙәтәм, үҙгәрештәрҙе ентекле теркәп барам, улар хаҡында табипты билдәләлеккә ҡуям. Ниндәй өлкәлә булһаң да, һөнәри яҡтан камиллашыу өҫтөндә эшләү кәрәктер. Минә, кеше һаулығы өсөн яуаплы белгес булараҡ, был бигерәк тә актуаль, шуға күрә үҙ кимәлемде үҫтереүҙе беренсе урынға ҡуям. Быным өсөн тематик семинар, мастер-класс һәм конференцияларҙа актив ҡатнашам.

Ғөмүмән, эшмәкәрлегемдә укол ҡаҙап, капельница ҡуйыуға ғына ҡайтарып ҡалдырмайынса, һөнәри яҡтан үҙемде төрлө яҡлап үҫтереү, белемемде тәрәнәйтеү буйынса эшләйем. Ошоно күреп тә хеҙмәттәштәрем әлеге конкурста ҡатнашып ҡарарға тәҡдим иттеләр ҙә инде. Конкурс өс этаптан торҙо. Күмертау дауаханаһында эшләүсе шәфҡәт туташтары араһында үткән беренсе этапта иң яҡшыһы, тип табылғас, икенсе этапҡа Өфөгә барҙым. Унда бөтә республиканан йыйылған шәфҡәт туташтары араһында 1-се урын яулап, Рәсәй кимәленә сыҡтым. Һәм, оло ҡыуанысыма күрә, үҙемдең категориямда бөтә ил буйынса иң яҡшы белгес, тип табылдым.

Мин эшләгән бүлектә һәр кем эшләй алмай. Яман шеш сиренә тарыған̣дар физик хәлһеҙлек менән бер рәттән рухи һынылыш кисерә. Уларҙың эске һыҙланыштарын үҙе аша үткәреп, артабан көрәшерлек көс-ҡеүәт бирә белгәндәр генә оҙаҡ йылдарға тотҡарлана беҙҙә. Ауырыуҙар менән генә түгел, уларҙың яҡындары менән дә мәрхәмәтле, хәстәрлекле, иғтибарлы булыу мөһим, сөнки улар бөгөлөп төшөргә тейеш түгел. Ошондай бәлә килгән ғаиләләрҙең берҙәм, бер-береһенә терәк булып сиргә ҡаршы тороуы мөһим. Һәм беҙгә, табиптан алып санитарҡаға тиклем, ошо көрәштең уртаһында булырға тура килә. Шуға күрә оптимистик ҡарашлы, ягымлы, изге күңелле булыу беҙҙең өсөн беренсе баҫҡыста тора. "Йылы һүҙ - йән аҙығы", тип бушҡа әйтмәгәндәр. Мин ошо мәҡәлде һәр ваҡыт иҫемдә тотоп эш итәм.

Эштән тыш та әүҙем тормош алып барам. Ҡала дауаханаһының шәфҡәт туташтарын берләштергән "Ынйыҡҡай" вокаль ансамбле менән етәкселек итәм. Ҡыҙҙар менән төбәк һәм республика кимәлендәге йыр бәйгеләрендә сығыш яһап, призлы урындар яулап торабыҙ. Шулай уҡ спорт менән әүҙем шөғөлләнәм, саңғы һәм волейбол буйынса ярыштарҙа гел ҡатнашам. Күмертау ҡалаһы медицина хеҙмәткәрҙәренең КВН командаһының да даими ағзаһымын. Шиғриәтте бик яратам, үҙем дә башҡорт телендә шиғырҙар яҙам. Эшем эмоциональ йәһәттән ауыр, шуға сәнғәт, спорт һәм шиғриәт ярҙамында рухи "бушаныу" алам. Шулай уҡ бүлеккә практика үтергә килгән буласаҡ шәфҡәт туташтары менән даими эшләү, улар менән хеҙмәт тәжрибәм, эшемдең нескәлектәре менән бүлешеү ҙә эшмәкәрлегемдең бер өлөшө. Түңәрәкләп әйткәндә, тормошомдан ҡәнәғәтмен. Бәхетле йәшәү өсөн бөтәһе лә бар: һөйөклө ғаиләм, мине хөрмәт итеп торған хеҙмәттәштәрем, күңел биреп башҡарған эшем, яратҡан шөғөлдәрем. Хоҙай ошонан айырмаһын, тип теләйем. Барыбыҙ ҙа иҫән-һау булайыҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

*ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА*

# БОЛАНУТ СӘЙЕ

**Таш диуарҙар араһындағы өйөбөҙгә хуш еҫтәр таратып, ауыл тәме аңҡый! Әйтеп аңлатҡыһыҙ тыуған яҡ еҫе! Боланут (Иван-чай) киптерәбеҙ.**



Асылда, беҙ йәшәгән ҡала сите - шау боланут ул. Өҫтәрендә көн-төн кирбес йорттар артыуына әсенеп, йәлләп тә ҡуям. Әммә ауылдағы үләндәргә етмәй! Уның тәме, еҫе, һуты башҡа! Ҡыш көндәре, күп төрлө үләндәрҙән сәй ҡайнатып ебәрһәң, тыуған яҡтың үҙенә ҡайтҡандай булаһың - ожмах кеүек аҡландарына, хөрриәттәй сәхрәләренә, әкиәт кеүек йәйҙәре ҡосағына!

Беҙ хәҙер сәй һатып алмайбыҙ. Йыл буйы үлән сәйе эсәбеҙ. Былтыр 11 төрлө үлән йыйҙыҡ, шул арҡала балаларыбыҙ сырхау белмәне, Аллаға шөкөр! Ул бит тәбиғи дарыу! Аптеканан алып, химик препараттар, антибиотиктар тылҡыу түгел. Күпме аҡса, һаулыҡ китә! Унан бит ауырыуҙар арта: препараттарҙың 10 проценты дарыу булһа, 90 проценты ағыу. Ә магазин сәйҙәре һуң! Үҙе буяу, үҙе саң, үҙе химикат. Йүнлерәген эҙләһәң - ҡиммәт...

Беҙҙең халҡыбыҙ борон-борондан тәбиғәткә яҡын. Шифалы үләндәрҙе яттан белеп, һәр ҡайһыһының файҙаһын күреп йәшәгән, шуға күрә рухи яҡтан да, физик йәһәттән дә ныҡлы булған. 7 төрлө үлән ҡушып сәй ҡайнатмаһа, башҡорт булмаҫ, тигәндәр.

Ҡәҙерле дуҫтар, әйҙәгеҙ, халҡыбыҙҙың ана шул ерле асылына бороламыҡ. Аяҡ аҫтыбыҙ туп-тулы шифа бит! Дарыуханан, магазиндарҙан теләһә ни алып эскәнсе, үҙебеҙҙең тыуған тупраҡтың энергетик көсөн, сихәтен, дауаһын алып ҡыуанайыҡ!

Боланут сәйен әҙерләүҙе иһә Бәйләнештә сайтында үҙем яратып алып барған Башҡорт ҡатын-ҡыҙы төркөмөнә яҙышҡан апайҙарҙан, тәжрибәле инәйҙәрҙән өйрәндем. Һеҙгә лә тәҡдим итәм: июнь уртаһынан август уртаһына тиклем болануттың өҫкө 4-5 япрағын ғына йыйлар ҙа, 5 см тирәһе ҡалынлыҡта йәйеп һалып, һулытып алалар, уны даими әйләндергеләп торалар. Япраҡтар йомшарғас, усҡа һалып, һуты сығырлыҡ итеп ыуалар. Япраҡты изгеслә́ү кәрәкмәй. Төрнәктәрҙе ҡалайға (эмалле һауытҡа) һалалар ҙа, уларға теймәҫлек итеп ҡалын еүеш сепрәк менән ябалар. Япраҡ көрән төҫкә инә башлай, әммә күгәреүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Көрән төҫкә ингәс, төрнәктәрҙе ваҡлап, ҡыҙыу булмаған (60-100 градус тирәһе) духовкаға йә мейескә һалып, йыш ҡына әйләндергеләп киптерәләр. Ул бер нисә көндән көс йыйып бөтә һәм хуш еҫле, файҙалы сәй әҙер була! 2 йыл дауамында яраҡлы һанала. Болануттың файҙаһы тураһында яҙып бөтөрлөк түгел, ул хаҡта һеҙ интернеттан да, китаптарҙан да мәғлүмәт таба алаһығыҙ.

**Светлана СӨЛӘЙМӘНОВА.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Тын алыу менән ирекле идара итеү

Стрельникова гимнастикаһының визит карточкаһы - ҡул сапҡандағы кеүек ҡыҫҡа тын алыу. Бик йыш үҙҙәренең дауалау сеанстарында медиктар сәпәкәйләп пациенттарҙың иғтибарын йәлеп итә: сәпәкәйләү туҡтаһымы - тын алыу ҙа туҡтай. Ҡыҫҡа, шаулы тын алыу танау япрағында тойола. Поликлиникаларға бик йыш танау аша тын алыуы боҙолған пациенттар килә. Балалар ғына түгел, бик күп оло йәштәгеләрҙең дә танау аша тын алыуы боҙола, был гипертонияға һәм башҡа йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары үҫешенә килтерә. Барыбыҙ ҙа танау аша тын алыуҙың ни тиклем мөһим икәнлеген беләбеҙ һәм быным өсөн табип булырға кәрәкмәй. Ауыҙ менән тын алыу - ул запас ҡапҡа кеүек. Шуға күрә лә танау аша тын алыуҙың боҙолоуы күп проблемалар тыуҙыра һәм төрлө ауырыуҙарға килтерә. Стрельникованың тын алыу күнегеүҙәре тап ошо ҡыҫҡа тын алыу аша боҙолған тын алыуҙы тергеҙә лә инде. Һәм был, үҙ сиратында, башҡа йәшәү өсөн мөһим булған ағзаларҙы тергеҙеүгә йоғонто яһай.

Тын алыу - ирекле функция. Тимәк, теләйбеҙ икән, тынбыҙҙы тотоп та тора алабыҙ. Кеше һыу аҫтында тынын тотоп торорға һәләтле - тәбиғәт бөтөн нәмәне уйлаған. Шулай ҙа, беҙ бер ваҡытта ла нисек тын алыуыбыҙ хаҡында уйлап та ҡарамайбыҙ. Тауға шәберәк менһәк - тынбыҙ йышая, йоҡлағанда - бөтөнләй әкеренәйә. Бик йыш, тәбиғәт күҙәлләмаған өлкәгә тығылып, табиптар зыян килтермәйме, тигән һорауҙар ишетергә мөмкин.

Кеше тын алышын кислород менән туҡланыу өсөн генә түгел, ә телмәр, аралашыу өсөн дә файҙалана. Был бик мөһим аспект. Кеше өсөн телмәр - аралашыуҙың төп сараһы. Шуға һаңғырау булып тыуған балалар үҫешә артта ҡала ла инде. Уларҙың тын алыу ағзаһы сәләмәт балаларҙыҡы менән сағыштырғанда насарыраҡ үҫешкән. Тын алыу юлдары, телмәр аша үҫешә! Тын алыу менән ирекле идара итеү - үпкәләрҙе дөрөҫ үҫтереүҙең айырылғыһыҙ өлөшө. Әйткәндәй, йырсылар тын юлдары ауырыуҙары менән һирәк сирләй. Ә бына саксофонсылар һәм торбала уйнаусыларҙың, тын сығарғанда артыҡ көсәнгәнлектән, үпкәләрендә проблемалары була.

Анапаның "Надежда" тигән шифаханаһында ҡурылдай астмаһы менән ауырыған балаларҙы дауалаусы бүлек бар. Унда балаларға шиғыр һөйләргә, йырларға өйрәтәләр. Уларҙың ҡурылдай астмаһы өйәнгән йыр ярҙамында бөтәрәләр. Күреүегеҙсә, тын алыу менән ирекле идара итеү - кеше сәләмәтлеген үҫтереү һәм тергеҙеүҙең мөһим элементы. Стрельникованың тын алыу күнегеүҙәре тауыштарын юғалтҡан йырсылар өсөн махсус уйлап табыла, сөнки Александра Николаевна үҙе опера йырсыһы була. Аҙаҡ инде был күнегеүҙән бик күп сирҙәрҙе дауалауҙа ярҙам иткәнлеге асыҡлана. Бөгөн ул хатта туберкулездан да ярҙам итә. Тын алыуҙы күнектереү һәм дөрөҫ тын алыуҙы тергеҙеү организмдың барлыҡ ағзаларына һәм системаларына йоғонто яһай. Күнекмә - бөйөк эш. Беҙ мускулдарҙы күнектереп һөҙөмтә күрәбеҙ, шулай уҡ тын алыу менән шөғөлләнеп, диафрагманы күнектерәбеҙ.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 22 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.10, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Двое против смерти". [12+]
23.30 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
22.55 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
1.10 Т/с "Московская борзая". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Х/ф "Возвращение Будулая". [12+]**
**13.00 Наука 102. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**14.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00, 22.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Х/ф "Кризис Веры". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Вечерняя трапеза". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 23 ИЮЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.05, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Двое против смерти". [12+]
23.30 Премьера. "Камера. Мотор. Страна". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
23.00 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
1.20 Т/с "Московская борзая". [12+]
4.05 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 Республика Live. [12+]**
**11.45 Х/ф "Возвращение Будулая". [12+]**
**13.00 Дорога к храму. [0+]**
**13.30, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**14.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 "Честно говоря". [12+]**
**23.15 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Х/ф "Спящий и красавица". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 24 ИЮЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.15, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Двое против смерти". [12+]
23.30 "Звёзды под гипнозом". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
23.00 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
1.20 Т/с "Московская борзая". [12+]
3.20 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**11.45 Х/ф "Возвращение Будулая". [12+]**
**13.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**13.30, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**14.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 23.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00, 5.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**0.00 Х/ф "Счастливого пути". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 25 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.20, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Двое против смерти". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.25 На ночь глядя. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
23.00 Д/ф "Профессия - следователь". [16+]
23.55 Т/с "Московская борзая". [12+]
3.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Х/ф "Возвращение Будулая". [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**14.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**23.15 "Песня года". [12+]**
**23.45 Современник. [12+]**
**0.00 Х/ф "Возвращение Будулая". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Найдите мне папашу". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 26 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Три аккорда". [16+]
23.20 "Вечерний Ургант". [16+]
0.15 Д/ф "Ингмар Бергман". [16+]
1.20 Х/ф "Патерсон". [16+]
3.35 "Про любовь". [16+]
4.20 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
23.00 Х/ф "Золотце". [12+]
3.25 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 5.30 Д/ф "Глазами и сердцем". [12+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 Х/ф "Путешествие во влюбленность". [12+]**
**13.30, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**14.00 "Красная кнопка". [16+]**
**14.45 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**15.00 Интервью.**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 "Выше всех!" [6+]**
**16.30 Д/ф "Неустрашимый Венюков". [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 У дачи. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Ради добра. [6+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Возвращение Будулая". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.30 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**

## 27 ИЮЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Д/ф "Арктика. Выбор смелых". [12+]
7.15 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.00 Х/ф "Два Федора". [0+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10 Д/ф Премьера. "Душе нужен праздник". К 90-летию Василия Шукшина. [12+]
11.15 "В гости по утрам".
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Х/ф "Калина красная". [12+]
14.20 Х/ф "Печки-лавочки". [0+]
16.20 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.30, 21.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
23.00 "Своя колея". [16+]
1.00 Х/ф "Будь круче!" [16+]
3.10 "Про любовь". [16+]
3.55 "Наедине со всеми". [16+]
5.20 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Смеяться разрешается.
14.20, 20.30 Т/с "Дом у большой реки". [12+]
0.55 Х/ф "Испытание верностью". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**8.30 Всемирная фольклориада в Мексике. [12+]**
**9.30 "Физра". [6+]**
**9.45 "Перекличка". [6+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 МузКәрәҙ. [0+]**
**10.30 "Папа может все!" Репортаж с конкурса семей, воспитывающих детей с ОВЗ. [6+]**
**11.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**11.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**12.00 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия". [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "Еду в деревню". [12+]**
**17.30 Д/ф "Лестница в небо". [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.00 Специальный репортаж... [12+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Кош юлы". [6+]**
**22.30, 2.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Торатау йыйыны". [12+]**
**0.45 Х/ф "Атлантида". [16+]**
**3.15 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**5.00 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Д/ф "Неустрашимый Венюков". [12+]**

## 28 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Д/ф "Цари океанов". [12+]
7.10 Х/ф "Командир счастливой "Щуки". [12+]
9.00, 12.10 День Военно-морского флота РФ. Праздничный канал.
12.00 Новости с субтитрами.
13.00 Торжественный парад к Дню Военно-морского флота РФ.
14.35 Х/ф "72 метра". [12+]
17.25 "КВН". Премьер-лига. [16+]
18.50 "Точь-в-точь". [16+]
21.00 Время.
21.50 "Точь-в-точь". [16+]
22.45 Т/с Премьера. "Лучше, чем люди". Новые серии. [16+]
0.50 Х/ф "Моя семья тебя уже обожает". [16+]
2.25 Х/ф "И Бог создал женщину". [12+]
4.10 "Про любовь". [16+]

### РОССИЯ 1

5.05 Х/ф "Приказано женить". [12+]
7.20 "Семейные каникулы".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 Д/ф "Затерянные в Балтике".
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.20 Т/с "Впереди день". [12+]
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Д/ф "Огненная кругосветка". [12+]
2.00 Х/ф "Первый после Бога". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "Песня года". [12+]**
**10.00 Бирешмә. Профи. [6+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 "Йәйләү". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.45 "Ал да гөл. [6+]**
**12.00 "Бай бакса". [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.00 Д/ф "Долгое возвращение". [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Д/ф "Еду в деревню". [12+]**
**17.30 Юбилейный концерт народного артиста РБ Азамата Тимерова. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00 Республика Live. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 Х/ф "Путешествие во влюбленность". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**0.45 Спектакль "Чужой ребенок". [12+]**
**3.00 "Навруз-2019". [12+]**
**3.45 Х/ф "Атлантида". [16+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Июль (Зөлкәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (19) дүшәмбе | 3:40 | 5:10 | 13:30 | 20:03 | 21:33 | 23:03 |
| 23 (20) шишәмбе | 3:42 | 5:12 | 13:30 | 20:02 | 21:32 | 23:02 |
| 24 (21) шаршамбы | 3:44 | 5:14 | 13:30 | 20:00 | 21:30 | 23:00 |
| 25 (22) кесе йома | 3:45 | 5:15 | 13:30 | 19:58 | 21:28 | 22:58 |
| 26 (23) йома | 3:47 | 5:17 | 13:30 | 19:57 | 21:27 | 22:57 |
| 27 (24) шәмбе | 3:49 | 5:19 | 13:30 | 19:55 | 21:25 | 22:55 |
| 28 (25) йәкшәмбе | 3:50 | 5:20 | 13:30 | 19:53 | 21:23 | 22:53 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТТАР - ДОНЪЯЛА

1



2



Ҡалайҙан бөләкәй һауыт

"Өйөндә - әтәс, (...)да - себеш"

Башҡорт ашын төмләткес

Нәҫелдән күсхән ер хужаһы

4253 башҡортло ил (1)

3820 башҡортло ил (2)

Өй тирәләй кәртә

"Ҡатын - донъя (...)һы"

Ҡырҙа ҡаҙан элгән таяҡтар

3707 башҡортло ил (3)

17263 башҡортло ил (4)

Ҡышын аҡ, йәйен күң-гәрт ҡош

Тырма остары

Ҡояштан төшкән яҡтылыҡ

Бейек урын

"Ир (...) тауҙы ҡом итә"

Сәй төмләткесе

Сулпы икенсе төрлө

СССР-ҙағы тәүге эшҡыуар

Карап тағы баҫҡыс

Шыйыҡ төмләткес

Йөндән һуғылған тауар

Эштең ҡайтарылған хаҡы

Башҡорт ҡатын-ҡыҙ исеме

Һыу һауыты

Төүлектең ҡараңғы осоро

Эт бала сағында

"Асыҡһаң да (...) менән аша"

"(...) йөктө ат тартыр"

Ҡатын-ҡыҙ тотҡон

"Уңмағандың (...) янмаҫ"

"(...) ҡойҙороу менән (...) ҡунмай"

Кеше

Ергә ятып тәгәрәү

Вәғәҙә

Ҡатыҡ эшләү өсөн "маяу"

Рәсәйҙә бе-ренсе диппло-матик дәрәжә

Тамыры ашарлыҡ күк ҡыңғырау

Ағасҡа эленгән емле һауыт

Музыка ҡоралында уйнау-сы коллектив

Ҡыр тауығы



3



4

Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**28-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Һарытау. Штурм. Ырымбур. Петр. Төпсөк. Ҡырмыҫҡа. Шарт. Әсә. Мәскәү. Төмән. Һамар. Талҡан. Ҡурған. Оҫтабикә. Ебәк. Утар. Ахыр. Азат. Ыҙан. Тмин.

**Вертикаль буйынса:** Ҡалтағай. Пархоменко. Ноҡот. Ырыҫлы. Аласыҡ. Һыр. Рашҡы. Салма. Курант. Бөрсә. Ниәт. Удмурт. Шәм.Татарстан. Силәбе. Ситек. Кейәү. Найк.

*2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре ҡулланылды.

ҠОЛАҠ ҺАЛ!

## Үҙеңдән башла

Яҡшыға үҙгәреш кешенең башында башлана. Кеше үҙенә лайыҡлы тормош һайлап алғас та, уның ҡылыҡтары эске торошона тап киләсәк. Ҡайһы берҙә миңә барыһы ла ишетерлек итеп: "Ҡарағыҙ, йәшәү рәүешегеҙ үҙегеҙгә оҡшаймы? Ҡасанға тиклем үҙебеҙ йәшәгән подъездың бысраҡлығына түҙербеҙ? Ошо сүп-сарҙы аша атлап йөрөгәнсе, ишеккә йоҙаҡ ҡуйҙырып, стеналарҙы буятыу (үҙ иҫәбеңә булһа ла) еңелерәк булмаҫ инеме?" - тип ҡысҡырғым килә. Минең бер танышым подъезындағы бындай бысраҡлыҡ үҙенең яңы хәленә лайыҡ булмауын аңлап, күршеләренән бер ниндәй ҙә матди ярҙам көтөп ала алмай, подъезын үҙ аҡсаһына ремонтлатты, йоҙаҡ һатып алып ҡуйҙыртты. Подъезд ялт итеп ҡалды. Иң ҡыҙыҡлыһы шул: күп тә үтмәй, иренең эштәре көйләнде, күберәк аҡса эшләй башланы, тормоштары яҡшырҙы. Бында бәйләнеш бармы, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ.

## Яҡшы ял ит, дөрөҫ туҡлан һәм матур кейен

Нытҡ тәндә рух та нытҡ, ә ас тәндә рух йомшаҡ. Ләкин, әгәр һин дөрөҫ туҡланһаң, яҡшылап ял итһәң, аҡылың үткер бысаҡ кеүек булыр. Тәнең тураһында хәстәрлек күр - аҡылың сәләмәт булыр.

## Хатанан бер кем дә ҡурсаланмаған

Уңышҡа юлда иң ҙур гонаһ - үҙ-үҙеңә саманан тыш ышанғанлыҡ. Бер ваҡытта ла хаталанмаҫыңа ышаныу һиңә ҡаршы эшләйәсәк. Үҙ-үҙеңә саманан тыш ышанғанлыҡтан да ҙурыраҡ кәмселек юҡ, шуға күрә уның һинең күҙеңде томалауына юл ҡуйма.

## Әгәр һиңә насар икән, үҙеңде наҙла

Бәхетһеҙлектәрҙән ҡурҡма. Киреһенсә, үҙеңде улар аша үтергә мәжбүр ит. Бәхетһеҙлектән ҡурҡыуыңды еңмәй тороп, муллыҡҡа аҙым яһай алмаясаҡһың. Шуға күрә һине ҡурҡыу солғап алған саҡтарҙа магазиндар буйлап үт һәм күптән һатып алырға теләгән, әммә тәүәкәллек итмәгән ҡиммәтле әйберецде һатып ал.

**Наталья ПРАВДИНА.**

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ИЮЛЬ АЙЫНЫҢ ШИФАЛЫ ҮЛӘНДӘРЕ

## Ҡара көртмәле

Ҡара көртмәлеләге (черника) антиоксидант матдәләр яман шеш ауырыуҙарын иҫкәртеүсе антоцианин матдәләренә торошло, тип иҫәпләнә. Был матдә емештәр - алма һәм ҡара виноградтағына ҡарағанда күберәк. Ҡара көртмәле күреү һәләтен яҡшырта һәм күреү органдары ауырыуҙарын иҫкәртә. Уны тауыҡ күҙ, конъюнктивит ауырыуҙарын дауалауҙа ярҙамсы сара булараҡ ҡулланырға була. Емеш составындағы В5 витамины организмдағы матдәләр алмашыныуын яҡшырта. Ҡара көртмәле ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарын дауалауҙа киң ҡулланыла, даими ашау колит ауырыуынан, киптерелгән емештәре эс китеүҙән, ә яңы йыйылған емештәре, киреһенсә, эсте йомшартырға ярҙам итә. Организмдағы шешеү процестарын яйлата, шуға бауыр һәм үт ҡыуығы ауырыуҙарын дауалағанда, һалҡын тейгәндә ашарға кәрәк. Шәкәр диабеты булғанда емеше генә түгел, япрағы ла файҙалы. Ҡара көртмәле иммунитетты нығыта, йөрәккә файҙалы, ҡанды шыйыҡлата һәм инфаркт, ҡан ойошоуҙы иҫкәртә. Ул бактерияларға ҡаршы яҡшы сара, балаларҙың һөйәктәрен нығытыуға ыңғай тәьҫир яһай.

**Диабет.** 50-шәр грамм ҡара көртмәле, бәпембә һәм кесерткән япраҡтарына 500 мл һыуыҡ һыу ҡойоп, 10-20 минут ҡайнатырға. Был сәйҙе эҫе көйөнсә эсәләр.

**Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән.** Ҡара көртмәленең яңы емештәрен яҡшылап йыуғас, һауытҡа һалып, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойоп утҡа ҡуйырға. Шифалы эсемлеккә бер аҙ шәкәр һалырға ла ярай. Был ҡара көртмәле морсын һыуыҡ көйөнсә тәүлегенә 3 тапҡыр 60 мл эсергә кәрәк.

**Күреү һәләтен яҡшыртыу өсөн.** Ҡара көртмәле һабағын һәм япрағын тигеҙ өлөштә алып ваҡларға һәм өҫтө ҡапланғансы ҡайнар һыу ҡойорға, 3 сәғәт төнәтергә, һөҙөп алырға. Дауалы төнәтмәне көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә.

***Иҫкәртеү:*** *ҡара көртмәлене бала имеҙгән осорҙа ашарға ярамай, шулай уҡ 3 йәшкә тиклем балаларға ла ашатыуҙан тыйылырға. Ашҡаҙан аҫты биҙенә бәйле сирҙәр менән яфаланған, хроник эс ҡатыу, аллергия булғанда ла был емеш ҡәтғи тыйыла.*

## Цикорий

Юл буйҙарында үҫкән цикорийҙы күптәр суррогат ҡәһүә тип белә. Әммә уның шифалы үҙенсәлектәре лә бар, цикорийҙың микробтарға ҡаршы һәм ауырыуҙарҙы иҫкәртеүсе тәьҫире көслө. Тире ауырыуҙарын дауалауҙа ҡулланыла, нервы системаһына ыңғай йоғонто яһай, йөрәк тибешен көйләй. Аш һеңдереү ситемаһы өсөн дә цикорийҙың файҙаһы ҙур: үлән тамырынан эшләнгән ҡайнатма аппетитты аса, ашҡаҙан аҫты биҙе эшен яҡшырта. Бынан тыш, цикорий үт ҡыуығындағы таштарҙы сығара, үт һыуын сығара һәм бауырға ҡан йөрөү, матдәләр алмашыныу процестарын тиҙләтә. Үләндән алынған "инулин" тигән органик матдә иммунитетты нығыта эсәк микрофлораһын үҫтерә, ашҡаҙан-эсәктәрҙең лайлалы тиресәһе боҙолоуға бәйле ауырыуҙарҙы киҫәтә. Шуға цикорий ашҡаҙан һәм бөйән язваһы, гастрит, дисбактериоз, аш һеңдереү процесы боҙолғанда, эс ҡатыу, бауыр һәм үт ҡыуығы ауырыуҙарын дауалауҙа ҡулланыла. Был үҫемлек нервы һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн файҙалы. Цикорий тамырынан эшләнгән ҡәһүәлә кофеин юҡ, шуға ҡан баҫымы юғары булған, неврастения, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ, мигрень ауырыуҙарынан яфаланыусылар өсөн яҡшы дауа булып тора. Цикорий В төркөмө витаминдарына һәм калий матдәһенә бай. Ул ҡанды холестериндан таҙарта, ҡан тамырҙарын киңәйтә, йөрәк тибешен нормаға килтерә. Цикорийҙан эшләнгән эсемлектәр атеросклероз, тахикардия, йөрәктең ишемик ауырыуы һәм башҡа төр йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан яфаланғандар өсөн файҙалы.

**Аҙ ҡанлылыҡ.** Үҫемлектең баш өлөшөн йолҡоп алып, яҡшылап йыуып һәм ҡайнар һыу менән сайып, ит турағыс аша үткәрергә. Килеп сыҡҡан массанан һутын һығып алып яй ғына утта 2-3 минут ҡайнатырға. Был һутты һыуытҡыста һаҡларға кәрәк. Дауаланыу өсөн 1 балғалаҡ цикорий һутын ярты стакан йылы һөткә ҡушып, 1 балғалаҡ бал һалып, көнөнә өс тапҡыр эсергә. Дауаланыуҙы бер ай дауам итергә.

Бөйөр, бауыр ауырыуҙарын дауалау һәм аш һеңдереүҙе яҡшыртыу өсөн 15-30 грамм киптерелгән цикорий япрағы һәм тамырына 1 литр эҫе һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатырға. Ҡайнатманы ашарҙан алда көндөҙ һәм кис бер сынаяҡ эсергә.

ЯҢЫ КИТАП СЫҠТЫ

# ШАМБЫМЫ, СУРТАНМЫ ӘЛЛӘ... ТАШБАШМЫ?

**Ошо көндәрҙә генә редакцияға "Киске Өфө" гәзитенең күптәнге дуҫы - биология фәндәре докторы, БДУ-ның Сибай институты профессоры, шул уҡ ваҡытта әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, журналист Сәфәрғәли Йәнтүрин килеп сыҡты. Шундай шәхестәр була, үҙҙәренең илһөйәрлек һәм дә телһөйәрлек асылдарын улар бәғзе берәүҙәр кеүек бушбоғаҙланып, ҡоро ләстит һатып йөрөүҙә түгел, ә милләте, туған теле хаҡына аныҡ, файҙа килтереүсе эштәре менән раҫлап йәшәүҙә күрә. Даими уҡыусыбыҙ, төплө белемле, дәлилле фекерле авторыбыҙ Сәфәрғәли Искәндәр улы тап ана шундай шәхестәрҙең береһе лә инде.**

Редакцияға ул был юлы ла буш ҡул килмәгәйне: әле генә "Китап" нәшриәте типографияһынан сыҡҡан "Зоология терминдарының русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлеге"нең, үҙе әйтмешләй, "иң беренсе данаһын" "Киске Өфө" гәзитенә үҙ ҡулдары менән яҙып бүләк итеп, шатлыҡ уртаҡлашырға килгәйне. Беҙ ҙә бик шатландыҡ: эш барышында даими кәрәк булып торған һәр бер һүҙлек журналистар, тәржемәселәр өсөн генә түгел, уҡытыусылар, студенттар, мәктәп уҡыусылары, шулай уҡ туған телебеҙҙе мөмкин тиклем яҡшыраҡ үҙләштерергә теләгән кешеләр өсөн дә өҫтәл китабы ролен үтәй. "Зоология терминдары һүҙлегенең баҫылып сығыуына ярты быуаттан ашыу ваҡыт үткән. Ул 1952 йылда Т. Баишев тарафынан төҙөлә. Фән үҙгәрә, яңы фекерҙәр, ҡараштар менән тулылана бара. Һуңғы йылдарҙа ауыл хужалығы, умартасылыҡ, малсылыҡ терминдары һәм башҡа һүҙлектәр донъя күрҙе, ләкин улар зоология фәне тураһында тулы мәғлүмәтле баҫмаға дәғүә итә алманы, - ти профессор. - Был һүҙлекте төҙөгәндә хайуандарҙың, ҡоштарҙың, балыҡтарҙың һәм башҡа тере организмдарҙың йәшәү рәүеше һәм үҙ мөхитендә тотҡан урынына ҡарата белешмәләр биреү төп принцип булып торҙо".

Зоология терминдары һүҙлегендә барлығы 5 меңләп атаманың тәржемәһе һәм ҡайһыларының аңлатмалары бирелгән. Башҡортостанда йыш осраған хайуандар һәм ҡоштар исемдәренең тәржемәһе "Балыҡтар", "Ер-һыу хайуандары", "Һөйрәлеүселәр", "Ҡоштар","Һөтимәрҙәр" кластарына айырылып, махсус бүлеккә тупланып биреләүе был уҡыу ҡулланмаһының ҡиммәтен тағы ла арттыра төшкән.

Әйткәндәй, Башҡортостаныбыҙ йәнлек һәм хайуандарға, ҡоштарға һәм балыҡтарға бай булыуы менән элек-электән дан тота. Үкенескә, глобаль экология көрсөгөнөң ҡоротҡос тәьҫире төпкөл төбәктәрҙең аулаҡ тәбиғәт мөйөштәренә лә килеп етте. Хәтеремдә, тыуған ауылым һыулап ултырған Йылайыр йылғаһы бынан 40 йыллап элек тә әллә ни ҙур йылғаларҙан булмаһа ла, тын ғына тәрән ятыуҙары, ятыуҙарынан бигерәк унда йәшәгән ҡолас буйлыҡ суртандары менән дан тотто. Ҡустылар көнө буйы ҡарауыллап ултырып, ҡармаҡҡа шуларҙы эләктерһә, ат менгәндәй ҡыуанып ҡайтып, маҡтанырҙар ине. Тик атрауҙай был ятыу эйәләренең исемдәрен балыҡ таҙартыусы беҙ, апай-һеңлеләр, яңылыш әйтеп, балыҡсыларҙың бик ныҡ асыуына тейә инек. "Шамбы түгел, суртан был! Ташбашты ла танымаған башығыҙ менән..." тип ғәрләнеп китә ҡустылар. Ҡайҙандыр ҡарап алам, тимә, ул заман интернет та, энциклопедия ла, әлеге кеүек "Зоология һүҙлеге" лә юҡ. Бөгөн генә ул тыуған яғын, уның тәбиғәтен, флора-фаунаһын өйрәнәм, тигән кешегә бөтөн белешмә-ҡулланмалар ҙа ҡул аҫтында, тик тәбиғәтебеҙ менән ҡыҙыҡһыныусылар, уны өҙөлөп яратыусылар һәм һәр ваҡыт уның именлеге һағында тороусылар ҙа күберәк булһын ине...




**Шулай итеп, ғалимдың китабынан Башҡортостанда йыш осраған балыҡтарҙың башҡортса-русса атамалары:**

**белоглазка - аҡҡүҙ турғай, сәгер балыҡ**
**амур - амур балыҡ**
**берш - береш, берш, берш балыҡ**
**верховка - ялтырсабаҡ**
**вьюны - һаҡалсандар, этбалыҡтар**
**голавль - ажау, ҡушбаш**
**гольян, гольян густера - гольян сабаҡ**
**густера - густера ҡорман**
**елец - бөгәрсә, йомро сабаҡ**
**ёрш - шыртбалыҡ, этеш**
**жерех - ағасъяңаҡ, ағасаҡ**
**игла-рыба, игла морская - энә балыҡ, орсоҡ балыҡ**
**карась - табан, табан балыҡ**
**карп (сазан) - һаҙан, һаҙан балыҡ**
**колюшки - энәле балыҡтар, терпе балыҡтар**
**краснопёрка - ҡыҙылғанат**
**лещ - ҡорман, таран балыҡ, ҡарағанат**
**линь - ҡарабалыҡ**
**налим - шамбы**
**окунь - алабуға**
**осётр русский - рус мәрсене**
**пескарь - ташбаш, ҡомай**
**подкаменщик обыкновенный - зөгән, зөгәй**
**подуст - борош, борош балыҡ**
**русская быстрянка - шаршы күкене**
**сиг - сиг, сиг-балыҡ**
**синец - күкен, күк балыҡ**
**сом - йәйен**
**стерлядь - уҡбалыҡ, сөгә, сөгө**
**судак - һыла, суҙаҡ**
**таймень обыкновенный - ҡыҙыл балыҡ**
**уклея, уклейка - бәшкәләй, бәшкәләк**
**форель ручьевая - бағры**
**хариус - бәрҙе**
**чехонь - чехонь, ҡылысбалыҡ**
**щука - суртан**
**язь - опто.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## БАШҠОРТО - ҺИЛЫМ, УРЫҪЫ - ШАБРА

Әсәйемдең, ҡарт өләсәй һәм өләсәйемдең, ике инәйемдең үҙ-ара һөйләшкәнен тыңлағанда ғәжәп ҡыҙыҡ һүҙҙәр ишетә инем. Үкенес, йәшерәк саҡта шуларҙы барламағанмын, күбеһе онотолған.

"Ҡунаҡҡа Мәүлетбирҙе һилымды саҡырғайным, өйҙә булманы". "Һилым" - һыйлау һүҙенән, дуҫлыҡты аңлата. Ә урыҫ дуҫты әсәйем "шабра" тип йөрөттө. "Николай шабра килеп, хәл белде әле".

"Бесәнде кәмә һыуы булып, саҡ бөттөк". "Кәмә һыуы" тигәне тишек кәмәнән ингән һыуҙы түгә-түгә, батмай ярға килеп сығыуҙы аңлата. Эште саҡ теүәлләү ҙә шуға тиң була. Бесән насар үҫһә, йоҡа ғына булһа, "тайыз" ти ине өләсәйем. "Бесән быйыл бик тайыз, аҙ сығыр, ахыры".

"Тубығыма туйын бәйләп кенә тынсыным". "Туйын" йылға ситендәге йомшаҡ ҡына балсыҡ. Был һүҙ Силәбе башҡорттарында ла бар.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**
**Әбйәлил районы,**
**Байым ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ТӨКӨШӘ ТОРҒАН КӘҘӘГӘ...

### Хоҙай мөгөҙ бирмәгән

Ағыу яһаған ағыуҙан үлер, һөңгө яһаған һөңгөнән үлер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йыш ҡына кешеләр көлөү объектына әйләнермен тип ҡурҡып, изгелек эшләүҙән тыйыла.

**(Сара Бернар).**

Гонаһтарҙың күләгәһе оҙон.

**(Ирланд мәҡәле).**

Данға ярһып ынтылыуҙан да, ҡурҡып тайпылыуҙан да һаҡлан.

**(Аристотель).**

Үҙ өйөндә бәхетлеләр генә тормошта бәхетле.

**(Лев Толстой)**

Фәҡирлек ҡурҡыныс түгел ул. Фәҡирлектең яманлығы шунда: уны башҡалар күҙенән йәшереп булмай.

**(Джером).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше бик ҡаты ауырып китә һәм түшәгенән дә тора алмаҫ хәлгә килә. Ул үҙен аяуһыҙ яҙмыш алдында көсһөҙ бер йән эйәһе итеп хис итә башлай. Хәл белешергә килгән бик күп һанлы туғандары, таныштары үҙҙәренең йәлләүе, яҙмышты әрләүе менән уның был тойғоһон тағы ла тәрәнәйтә генә. Бары тик ҡатыны ғына өндәшмәҫ һәм сабыр булып ҡала. Ул ирен йәлләмәй, ә хәленә инә, хәстәрләй, уның күңелен күтәрергә тырыша. Кистәрен усаҡ яғып, иренә аҙағы бәхетле тамамланған ваҡиғалар тураһында һөйләй. Үҙе лә ире алдында матур булырға, ирендә йәшәргә һәм яратырға көс тыуҙырырға тырыша. Тик яңғыҙы ҡалған ваҡыттарҙа ғына ул башҡалар ишетмәһен өсөн башын тәҙрәнән сығарып, йәшертен генә күҙ йәштәрен түгә. Ә уның күҙ йәштәре тамған урында иҫ киткес матур ағас үҫеп сыға.**

**Бына бер ваҡыт улар йәшәгән ҡалаға үҙенең белеме һәм аҡылы менән танылған бер табип килә. Унан әлеге ауырыу ирҙе ҡарауҙы үтенәләр. Табип ауырыуҙы ҡарай һәм: "Һин һауығаһың һәм аяҡҡа баҫаһың, тик йәлләү шишмәһенән һыу эсеүеңде туҡтат һәм өй алдында үҫкән ағастың емешен аша", - ти. Ауырыуҙың ҡатыны бөтөн туғандарын, таныштарын өйҙән ҡыуып сығара. Ул иренә тәҙрә төбөндә үҫкән ағастың емешен килтереп бирә. Емеште ашағас, ауырыу ир тәненең яҙылып киткәнен тоя һәм аяғына баҫа.**

**Китер алдынан табип ҡатынға баяғы ағастан тағы бер емеш килтереүен үтенә. Ул был емештең орлоҡтарын соҡоп ала һәм уны бөтөн донъяға таратасағын әйтә. Кешеләр был емеште ашап, ысынды ялғандан, ихласлыҡты икейөҙлөлөктән, йәлләүҙе хәлгә кереүҙән айырырға өйрәнергә тейеш, ти ул".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 19 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 1381/07